ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18-24 март (буранай) 2023

№10 (1052)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Иғтибар! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2023 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә баҫмабыҙға ваҡытынан алда 800 һум 10 тингә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙҙә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йәштәребеҙ...**
башҡортса шаяртырға өйрәнә
5



**Остазлыҡ мәктәбе...**
һәр белем усағында булһын
11



**Был уҡыу йортона...**
ауыл еренә ҡайтырға теләгән егет-ҡыҙҙар килә
8-9



**Алтын-көмөш хазинамы?**
11



*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# ИЛҺӨЙӘРҘӘР ТӘРБИӘЛӘЙ

**Мин ғүмер буйы гәзит-журнал уҡып үҫкән быуын вәкилдәренең береһе булам. Бала саҡтан килә был яҡшы ғәҙәт. Ул замандарҙа матбуғат баҫмаһы алдырмаған ғаилә һирәк ине ауылдарҙа. Минекеләр кеүек, уҡытыусылармы атай-әсәйҙәребеҙ, әллә ябай колхозсылар, йә эшселәрме - бөтәһелә гәзит алдырып уҡырға әүәҫ инеләр. Уҡып ҡына ла ҡалмайҙар, аҙаҡ теге йә был мәҡәлә, унда күтәрелгән мәсьәләләр буйынса өйҙә лә, эштәрендә лә бергәләп һөйләшер, фекер алышыр булдылар.**



"Уҡыныңмы әле, бөгөнгө гәзиттә шулай тип яҙылған..." тигәнде йыш ишетергә тура килә ине беҙгә, мәктәп уҡыусыларына ла. Беҙҙең өсөн балалар баҫмаларына ла яҙылып ҡайтыр ине атайым. Матбуғат һүҙенә ихтирам һәм һөйөү ана шулай бала саҡтан башланды миндә. Бөгөн дә мин әллә күпме гәзит-журнал алдырып уҡыйым, уҡығандарын ташламайым, төпләмәләргә туплап, һаҡлап барам. Шулар араһында сыға башлауына хәҙер 21-се йыл киткән "Киске Өфө" гәзите лә үҙенең лайыҡлы урынын тапты. Мин уны тәүге һандарынан алып уҡыйым һәм, әйтергә кәрәк, уның йөкмәткеһенә ҡыҙыҡһыныуым һүнмәй ҙә, һүрелмәй ҙә, сөнки уның үҙенә күрә генә алдан ныҡлы уйланылған идея йөкмәткеһе, маҡсатлы йүнәлеше бар.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ПЕНСИЯНЫ КӨЙЛӘЙҘӘР

Рәсәй Хеҙмәт министрлығында социаль пенсияларҙы 1 апрелдән июнь айында үткәрелгән индексацияға өҫтәп, тағы ла 3,3 процентҡа арттырырға тәҡдим итеlә, тип белдерҙеләр. Ғәҙәттәгесә, социаль пенсияларҙы индексациялау йылына бер тапҡыр - 1 апрелдә үткәреlә. Беренсе ярты йыллыҡта инфляция юғары булыуын иҫәпкә алып, граждандарға ярҙам итеү өсөн социаль түләүҙәрҙе этаплап арттырырға ҡарар ителде. 1 июндән Президент ҡушыуы буйынса йәшәү минимумы, минималь эш хаҡы, страховка һәм социаль пенсиялар 10 процентҡа индексацияланды. 1 ғинуарҙан йәшәү минимумы тағы ла 3,3 процентҡа артҡан. 1 апрелдән социаль пенсиялар ҙа 3,3 процентҡа арта, улар йыл һайын йәшәү минимумы үҫеше буйынса арта. 2023 йылдың 1 апреленән индексация яҡынса 4 миллион пенсионерҙың пенсияһын күтәрергә мөмкинлек бирәсәк, тип күҙаллана. Быының өсөн Социаль фондҡа мөрәжәғәт итеү талап ителмәй. Социаль фонд 1 апрелдән түләүҙәрҙе ғәҙәттәгесә, ғаризаһыҙ индексациялай һәм арттырылған пенсияны график буйынса килтерә.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, социаль пенсия алыусылар - төрлө сәбәптәр арҡаһында страховка пенсияһын алыу өсөн етерлек хеҙмәт стажы булмаған граждандар.

*КӨНАУАЗ*



# ТӨНДЕ ЯҘЫРҒА ВАҠЫТ.

## Баҡса көтә!

**Ҡыш буйына ҡыҫылып, өйҙә генә ултырғандан һуң, халыҡҡа бер аҙ яҙылып алырға ваҡыт та етте. Баҡса мәшәҡәттәре көтә беҙҙе алда, йәмәғәт! Ауыҙ өсөн көҙ яҡшы, яҙ ул күҙ өсөн генә яҡшы, тиһә лә халыҡ, көҙҙөң уңышын яҙҙан хәстәрләү мөһим. Ошоно иҫәпкә алып, бөгөн Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Көньяҡ Урал ботаника баҡса-институты ғилми хеҙмәткәре, биология фәндәре кандидаты Ирина Нәғим ҡыҙы АЛЛАЯРОВАны редакцияға саҡырҙыҡ. Уның менән яҙ башындағы баҡса эштәре, үҫентеләр сәсеү, уларҙы тәрбиәләү хаҡында һүҙ алып барасаҡбыҙ.**

➔ **Ботаника баҡса-институты тигәндә, күптәр уның оранжереяһын ғына күҙ уңында тота. Ниндәй йүнәлештәрҙә эш алып барыла ботаника баҡсаһында?**

- 2006 йылдан ошо учреждениела эшләйем, ошонда уҡ кандидатлыҡ диссертацияһын яҡланым. Оранжерея халыҡ араһында бик популяр, шуға ла уны күптәр беләә. Әммә институттың әһәмиәте бик ҙур, унда 5 ҙур ғилми лаборатория төрлө һынауҙар алып бара. Сәскәләр, ҡыуаҡтар, ағастарҙың яңы сорттары сығарыла, беҙҙең төбәккә хас булмағандарын яраҡлаштырып ҡарайбыҙ, ҡыр үҫемлектәрен күсереп ултыртып, уларҙы күбәйтәбеҙ. Мәҫәлән, Ҡыҙыл китапҡа ингән үҫемлектәрҙе үрсетеп, күбәйеп киткәс, уларҙы кире урман-ҡырҙарға күсерәбеҙ, тимәк, юғалыуҙан ҡотҡарабыҙ. Йылы яҡтарҙа үҫкән үҫемлектәрҙе лә өйрәнәбеҙ.

Ә сәскәләрҙең яңы сорттарын уйлап табыу тураһында һөйләп торорға ла кәрәкмәй, иристар, хризантемалар, лилиәләр, пиондар һ.б. Яңы сорттарға матур исемдәр ҡушыла, әйтәйек, пиондарҙың "Башҡорт сувенирҙары", "Урал ынйыһы", "Ирәмәл", "Ҡурай йыры", "Урал батыр", "Өфө уттары" кеүек әллә күпме атамаһы бар! Бында үҙ эшенә мөкиббән, ерҙе, тәбиғәтте яратҡан кешеләр эшләй, директорыбыҙ, биология фәндәре докторы Зиннур Хәйҙәр улы Шиһапов та бик илһөйәр кеше, һәр башланғысты хуплап ҡына тора.

**(Дауамы 12-13-сө биттәрҙә).**

12+

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

✓ *Баймаҡ колхоз-совхоз театрында эшләп йөрөгән 16 ир-егет һуғыштың тәүге көндәрендә үк фронтҡа китә. Театр ҡатындар һәм үҫмер балалар ҡулына ҡала.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТЫУҒАН ИЛ ТАРИХЫН...
## бергәләп яҙайыҡ!

- Беҙҙең ғаиләлә бала саҡтан тыуған ил тигән төшөнсәне ҡәҙерләп, аңлап, киләсәктә уға хеҙмәт итәсәгебеҙҙе белеп үҫтерҙеләр. Шуға күрә, бигерәк тә һуңғы ваҡытта йәмғиәттәге төрлө кешеләрҙең ҡапма - ҡаршы фекерҙәре мине борсой. Беҙ барыбыҙ ҙа тыуғас та ошо ергә аяҡ баҫабыҙ, ошо ерҙең һауаһын һулайбыҙ, иң һуңғы төйәгебеҙ ҙә тыуған ер ҡуйынында буласаҡ. Тыуған ил берәү генә була, кәрәк саҡта ул һинең ярҙамыңа, яҡлауыңа, һаҡлауыңа мохтаж. Һәм, ғөмүмән, илен яратмаған кеше бер кемде лә, бер нәмәне лә ярата белмәй. Ундай кешеләр ярата белеү тигән изге хистән мәхрүм.

Беҙ бала саҡтан уҡ тыуған илгә һөйөү сағылдырылған шиғырҙар ятлап, китаптар уҡып үҫтек, табын янында атай-әсәй йыш ҡына ошо темаға беҙҙең менән һөйләшеүҙәр алып бара торғайны. Хәҙер инде мин дә студенттар менән был темаға йыш фекер алышам. Тыуған ил минең өсөн ҡәҙерле булған өсөн генә түгел, ә йәштәргә дөрөҫ тәрбиә бирергә, уларға ҡайһы бер мәсьәләләрҙе дөрөҫ аңлатыу кәрәклегенә инанғанға шулай итәм. Беҙҙең театр факультетында буласаҡ актерҙар һәм режиссерҙар уҡый. Ошо йәштәрҙең тыуған илгә ҡарата булған хис-тойғолары дөрөҫ, тип ҙур яуаплылыҡ менән әйтә алам. Быға минең иманым камил.

Милли театрҙар төҙөлгән осорҙа тап театр сәнғәте ауыл менән ҡаланы бәйләп торған ижади усаҡ була. Башҡорт күсмә труппаһы актерҙары республика ауылдарына гастролгә сыҡҡанда спектакль генә күрһәтеп ҡалмаған, политуҡыуҙар үткәргән, ауыл халҡын илдәге һуңғы яңылыҡтар менән таныштырған, ер һәм һалым түләү мәсьәләһенә ҡағылған һорауҙарға яуап биргән. Театр менән бергә, "Башнаркомпрос"тың төрлө бүлек етәкселәре лә ауылдарға сыҡҡан. Һуңыраҡ Башҡортостан театрҙары тарихында ил һаҡларға яуға киткән актерҙар ҙа күп була. Баймаҡ колхоз-совхоз театрында (хәҙерге А. Мөбәрәков исемен йөрөткән Сибай дәүләт башҡорт театры) эшләп йөрөгән 16 ир-егет һуғыштың тәүге көндәрендә үк фронтҡа китә. Театр ҡатындар һәм үҫмер балалар ҡулына ҡала. Фронтҡа киткән ағаһының ролдәрен уйнарға килгән 14 йәшлек Хәмзә Ҡурсаевтың яҙмышы ғына ни тора! Хәҙер заманалар үҙгәреп, халыҡ менән аралашыуҙың башҡа төр ысулдары барлыҡҡа килһә лә, театр үҙенең көсөн бер ҡасан да юғалтмай. Юғалтмаясаҡ, сөнки актерҙар сәхнәнән тороп тамашасы менән күҙгә-күҙ ҡарашып аңлаша - шуға ла тап уларҙың үҙаңы дөрөҫ булырға тейеш.

Мин үҙем СССР-ҙың тарҡалыуына шаһит булған кешемен. Беҙгә шул осорҙа буй еткерергә, белем тупларға яҙҙы, әммә тыуған илгә, уның көсөнә беҙ һис шикләнмәй йәшәнек. Иртәгәһе көнгә лә айыҡ аҡыл менән ҡарайбыҙ. Уҡытыусы булараҡ та бөгөнгө ысынбарлыҡта алғы һыҙыҡтағы һалдатмын мин. Ил яҙмышы беҙ уҡытҡан уҡыусылар, студенттар ҡулына күсәсәк. Ошо быуындар алмашынған осорҙа беҙ берҙәм һәм бергә эш итергә, тарихты бергәләп яҙырға тейешбеҙ.

**Гөлсәсәк САЛАМАТОВА,**
**Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты.**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ИЛҺӨЙӘРҘӘР ТӘРБИӘЛӘЙ



**(Башы 1-се биттә).**

Был гәзиттә баҫылған бөтөн мәҡәләләр ҙә уҡыусыһын халҡыбыҙҙың рухи донъяһы, мәҙәни хазиналары өлгөләре менән таныштыра, тарихыбыҙҙы һөйләй, зыялы башҡорттарыбыҙҙы күрһәтә һәм уларҙың данын күтәрмәләй. Тап бына ошо "Киске Өфө"нө уҡып, мин үҙебеҙҙең заман башҡорттары, уларҙың эшмәкәрлеге, ижадтары хаҡында күберәк белә алдым. "Киске Өфө" гәзитенә тиклем башҡорттоң милли кейемдәре, биҙәүестәре, йолалары, тарихы хаҡында шулай ентекләп яҡтыртҡан баҫма юҡ ине, тиһәм, башҡа баҫмалар үпкәләмәҫтер, моғайын. Атаҡлы ғалимыбыҙ, археолог Нияз Мәжитовтың да Өфө тарихы буйынса фәнни-археологик асыштары тураһында тәүләп яҙып сығыусы, уның үҙе менән күп тапҡырҙар ҡыҙыҡлы әңгәмәләр ойоштороусы ла ошо гәзит булды.

Быларҙы мин ни өсөн яҙам? Бөгөн бәғзе бер маңҡорт һәм наҙандарҙың, ауыҙҙары ла ҡыйшаймайынса, хәҙер гәзиттәрҙең кәрәге бөттө, тип әйтеүҙәренә яуап итеп һөйләйем быларҙы. Ошо әйткәндәр хаҡында интернетта берәй материал уҡығанығыҙ бармы һеҙҙең, улайға китеп, гәзитте бөгөн интернет алыштырҙы, тип әйтергә батырсылыҡ итәһегеҙ икән? Эйе, таныйым, бөгөн интернет күпселек өсөн төп мәғлүмәт сығанағына әүерелде: унда, үкенескә, дөрөҫө лә бар, ялғаны ла етерлек. Һүҙ буҡкаһы, самаһыҙлыҡ сиге ул, минеңсә, интернет хәбәрҙәре. Юҡҡамы ни уның йәштәрҙе һәм бала-сағаны аҙҙырыусы йоғонтоһо хаҡында күптән инде саң ҡағыла.

Ә гәзиттәр, айырыуса үҙебеҙҙең милли матбуғат баҫмалары мәғлүмәт биреп кенә ҡалмай, үҙ уҡыусыларында илһөйәрлек, телһөйәрлек тойғолары ла тәрбиәләй. Шуның өсөн генә лә алдырып уҡырға тәҡдим итер инем мин милли матбуғатыбыҙ баҫмаларын. Ғаиләләргә, ауыл-ҡала китапханаларына, мәктәптәргә булһа ла.

Мин "Киске Өфө"нө уҡып, мәғлүмәт алыу менән генә сикләнмәйем, яҙышып та торам: теге йә был тәҡдимдәрем, фекерҙәрем менән уртаҡлашам. Ошо йәһәттән мин Башҡортостан Республикаһын "Башкирия" тип әйтеүгә һәм яҙыуға ҡаршы булыуым хаҡында төрлө гәзиттәргә яҙып ҡараным, шул иҫәптән, "Киске Өфө"гә лә, ләкин бер ниндәй ҙә һөҙөмтә юҡ. Гәзит аша БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарына ошо фекеремде еткерергә ине, бәлки, был йәһәттән берәй закон ҡабул итерҙәр.

Тағы бер фекерем "төбәк" һүҙенә ҡағылышлы. Минең тыуған яҡтарым Мәсетле районында "төбәк" ул төпкөл бер урын, аҡлан йә һыу буйы һ.б. Бәләкәй саҡта әсәйем миңә: "Быҙауҙарҙы йә ҡаҙҙарҙы төбәккә ҡыу", - тип йомош ҡушыр ине. "Регион" тигәнде беҙгә "төбәк" тип түгел, ә "аймаҡ" тип әйтеү урынлы булыр кеүек. Өсөнсө тәҡдимем дә бар: гәзитебеҙҙә мин спорт темаһын киңерәк яҡтыртыуҙы үтенер инем, сөнки беҙҙә спорт яҡшы үҫешкән, билдәле спортсыларыбыҙ, төрлө кимәлдәге чемпиондарыбыҙ күп, улар хаҡында яҡшыраҡ белергә кәрәк беҙгә. Ә дөйөм алғанда, "Киске Өфө" миңә бик оҡшай, минән күреп, хатта туғаным да яҙылды әле уға. Гәзит журналистарына эштәрендә артабан да уңыштар юлдаш булһын!

**Дим ӘХМӘҘИЕВ,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Нефтекама ҡалаһы.**

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

# АҠСАЛАР ТЫНЛЫҠ ЯРАТА



**Был кинәйәне бынан йөҙ йыл элек бөйөк аҡыл эйәһе Лев Толстой яҙған. Хәл үҙгәргәнме, сағыштырып ҡарағыҙ әле.**

Сауҙагәрҙәр он, май, һөт һәм башҡа шуның кеүек ашамлыҡтар һата. Күберәк килем алып, тиҙерәк байығыу өсөн улар, ғәҙәттә, һатҡан әйберҙәренә төрлө осһоҙ, зарарлы ҡатнашмалар ҡуша башлай: онға кәбәк өҫтәйҙәр, онталған эзбизташ һалалар, майға маргарин ҡушалар, һөткә аҡбурлы һыу ҡойоп болғайҙар. Тәғәйен һатып алыусыға барып еткәнсе бөтәһе лә шып-шыма бара: күмәртәләп һатҡандар тауарҙы ваҡлап һатыусыларға тапшыра, улары артабан һата. Келәттәр ризыҡ менән тула, кәштәләр ашамлыҡтарҙан әйелә, тәү ҡарамаҡҡа, сауҙа шаулап-гөрләп бара. Сауҙагәрҙәр ҡәнәғәт йылмая. Әммә үҙҙәре үҫтереп түгел, тик магазиндағын ғына һатып алып ҡулланырға өйрәнгән ҡала кешеләре генә был ризыҡтарҙың файҙаға түгел икәненә борсола: он онға оҡшамаған, май менән һөттөң рәте юҡ. Әммә берәү ҙә ҡәнәғәтһеҙлеген ҡысҡырып әйтергә ашыҡмай.

Бына бер саҡ ауылда йәшәп, ғаиләһенә тик сифатлы ризыҡтар ғына бешереп ашатырға күнеккән бер хужабикә ҡалаға күсеп килә. Ул ҡала магазиндарында һатылған он-маҙарҙы һатып алып, бешеренә-төшөрөнә башлай. Әммә икмәге уңмай, онталып тора. Маргаринлы майҙа бешкән күмәстәре тәмһеҙ булып сыға. Һөттән ҡаймаҡ айырылмай. Хужабикә шунда уҡ төшөнә: һатып алған он-май-һөттөң сифаты юҡ. Тикшереп ҡараһа, шикләнеүе дөрөҫ булып сыға: онда эзбизташ таба, майҙа - маргарин, һөттә - аҡбур. Һатыусыларҙы фаш итеү өсөн хужабикә баҙарға бара һәм сауҙагәрҙәрҙән сифатлы ризыҡтар талап итеп, янъял ҡуптара. Әммә сауҙагәрҙәр уға иғтибар итмәйенсә: "Беҙҙең тауарҙар

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда тәүлек эсендә ковид-сирлеләр һаны 182-гә еткән, тип хәбәр иттеләр республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан. Пандемия башланғандан алып республикала бөтәһе 358 меңгә яҡын кеше сирләгән. "Хәҙер 139 сирле стационарҙа дауалана, уларҙың 97-һе - оло йәштәгеләр, - тип билдәләнеләр Һаулыҡ һаҡлау министрлығында. - Өй шарттарында 2,1 меңгә яҡын кеше дауалана, уларҙың 664-е - 60 йәштән өлкән пациенттар". Халыҡты вакцинациялауға килгәндә, Башҡортостанда 3,456 миллиондан ашыу кеше коронавирусҡа ҡаршы вакцинаның ике компонентын да алған.

✓Башҡортостан делегацияһының Иранға эш сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Рәсәй Федерацияһының Ирандағы ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе Алексей Дедов һәм Рәсәйҙең сауҙа вәкиле Рөстәм Йыһаншин менән осрашты. "Рәсәй менән Иран араһында бәйләнештәрҙе һәм хеҙмәттәшлекте нығытыу менән бер рәттән төбәктәр араһында үҙ-ара мөнәсәбәттәр ҙур әһәмиәткә эйә була бара, - тине Алексей Дедов. - Әле Башҡортостан менән хеҙмәттәшлек итеү өсөн территориялар билдәләнә. Улар иҫәбендә - ғәйәт ҙур сәнәғәт һәм фәнни ҡеүәткә эйә булған Меркези провинцияһы".

✓Радий Хәбиров етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы Ирандың баш ҡалаһындағы Ниаваран тарихи-мәҙәни үҙәгенә барҙы. Комплекс биш бинанан тора: Ниаваран һарайы, Әхмәт-шаһ павильоны, Сахибкаран һарайы, Джахан Нама музейы һәм китапхана. Һарай королдәрҙең тантаналарын үткәреү өсөн төҙөлгән, ләкин һуңыраҡ ул Ирандың икенсе короле Мөхәммәт Реза-шаһтың резиденцияһына әүерелгән. Радий Хәбиров үҙенсәлекле комплексты шул килеш һаҡлап ҡалған Тегеран ҡала властарының ыңғай тәжрибәһен билдәләне.

✓Өфө рапирасыһы, фехтование буйынса олимпия чемпионы Аделина Заһиҙуллина Иранда үткән халыҡ-ара ярыштарҙа бронза миҙал яуланы, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Спорт министрлығынан. Бынан алда Аделина Заһиҙуллина Мәскәү өлкәһенең Новогорск ҡалаһында фехтование буйынса Бөтөн Рәсәй ярыштарында ла бронза призер булғайны.

***✓ Тормош үҙгәрмәй, йәмәғәт! Дауам итә, әммә үҙгәрмәй. Лев Толстой яҙған дәүерҙән алып берәй нәмә үҙгәргәнме? Юҡ! Бизнестың ҡумәртәләп осһоҙға ал да, ваҡлап ҡимməтерәккә һат, тигән ауыһыҙ ҡануны йәшәй, йәшәйәсәк.***



БЫНАҒАЙЫШ!

**Бөгөн ҡала халҡына, фатирым бар, тип ирәйеп йәшәргә тура килмәй, сөнки кеше өсөн төп йәшәү шарты булып хеҙмәт иткән "баш осондағы был ҡыйыҡ" бер ҡасан булмағанса ғәййәт ҡиммәткә төшә һәм етди проблемаға әүерелә башланы. Юҡҡа ғына үҙәк матбуғат экспертары фатир өсөн тотонолған сығымдарҙы һәм коммуналь "һалым"дарҙы кеше кесәһенең хаяһыҙ рәүештә талау тип атамайҙыр.**

# ҠАЛАНЫ МАҠТА ЛА...

## ауылда тор



Йылылыҡ өсөн түләү генә лә квитанциялағы дөйөм хисап суммаһының 40-50 процентын тәшкил итә, ти эксперттар. Әҫтәүенә, "төпһөҙ ҡоҙоҡҡа" китеп тороусы капиталь ремонт өсөн иғәнәне лә арттырып ебәреү ҡулланыусы хәлен тағы ла ауырлаштырҙы. Сукышын ысҡындырһа - ҡойрого, ҡойроғон ысҡындырһа, суҡышы йәбешеүсе меҫкен ҡошсоҡ хәләндә фатир милекселәре бөгөн. Ай һайын тип әйтерлек берәй "яңылыҡ" уйлап сығарып ҡына тора коммуналь хеҙмәттәр системаһы. Бизнес торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өлкәһенең аҡса һауыу өсөн сикһеҙ мөмкинлектәргә юл асыуын бик тиҙ аңғарып алды: ресурс хужалары дөйөм табаҡты хушһынмай, айырым монополистарға бүленә һалды һәм бер-береһе менән ярыша-ярыша хаҡтар арттыра башланы. Етмәһә, властар тарафынан да тәьминәтселәргә шашынырға юл ҡуйыусы положениелар, законлар һәм уларға теге йәки был төҙәтмәләр "ижад ителеп" кенә тора, күрәһең, идара итеүсе даирәләргә лә файҙаһы бар бының.

Әйтәйек, һуңғы ике йыл эсендә ресурстарҙы ҡулланыу нормативтарын тыйыу юҡҡа сығарылды. Һөҙөмтәлә дөйөм йорт ҡулланыуы күрһәткестәре өсөн, мәҫәлән, хисап приборындағы тотонолған ресурс урынына норматив буйынса "түңәрәкләп" түләү һалына башланы. Ә түңәрәкләп иҫәпләүҙән ниндәй һан ғибәрәт булыры башланғыс класс балаһына ла яҡшы аңлашыла: йөмро ғына һандар килеп сыға. Тәьминәтсегә был, билдәле, өҫтәмә килем килтерә. Ә бит закон буйынса 2012 йылдан алып күп ҡатлы бөтөн йорттар ҙа ҡулланылған һыу, электр энергияһы, йылылыҡ күләмен иҫәпкә алыусы хисап приборҙары менән тәьмин ителергә тейеш ине.

Ҡулланыусы өсөн тағы бер аңлайышһыҙ мәсьәлә - ул капремонт иғәнәһе. Уны мин бая "төпһөҙ ҡоҙоҡ" менән юҡҡа сағыштырманым. Шуныһы ҡыҙыҡ: иғәнә арта, ә беҙҙең йорттарға ремонт күп тигәндә подъезд ишектәрен буяп сығыуҙан ары китмәй. Быйыл бының өсөн түләү тағы ла 7-12 процентҡа артасаҡ. БР Хөкүмәтенең быйыл 23 ғинуарҙағы Ҡарары буйынса Өфөлә, мәҫәлән, күп йорттарҙың 1-6-сы ҡатына тиклем айына түләү квадрат метрынан 7,46 һум һалынһа, шунан юғарыраҡ ҡаттарҙа йәшәүселәр өсөн ни сәбәптәндер 8,10 һум ҡаралған. Юғиһә бит бынан алдараҡ "Капремонт төбәк операторы" фонды директоры П.Сафоновтың аппетиты күпкә юғары (20 процент!) күтәрелмәксе ине. Булмаҫ был, тимә, киләсәктә был иғәнә барыбер артҡандан-арта ғына барасаҡ, ти махсус күҙәтеүселәр.

Әйткәндәй, капремонт фондының махсус иҫәбендә бөгөн 200 млрд һум аҡса бар, ти мәғлүмәтле кешеләр. РФ Торлаҡ союзы рәйесе Константин Крохин һүҙҙәренә ҡарағанда, үҙебеҙ йәшәгән йортҡа ремонт хаҡында беҙгә хыялланырға ла ярамай, был мәсьәләне йорт хужалары түгел, ә муниципалитет депутаттары ғына хәл итә ала икән, бынағайыш!

Күп ҡатлы йорт фатирҙарының милекселәре хоҡуғы тураһында һүҙ сыҡҡас, тағы бер сәйер яңылыҡ иҫкә төштө. Ошо йылдың 1 мартынан "Күсемһеҙ милекте дәүләт теркәүе тураһында" законға төҙәтеүҙәр көсөнә инде. Шуға ярашлы, Росреестрҙан алынған күсермәлә теге йәки был бина, фатир йә булмаһа ер участкаһы милекселәре хаҡында мәғлүмәт биреү тыйыласаҡ икән. Был, әлбиттә, персональ мәғлүмәттәрҙе һаҡлау йәһәтенән эшләнә, ләкин эксперттар әйтеүенсә, ошо айҡанлы торлаҡ баҙарында проблемалар килеп тыуасағы шик тыуҙырмай, сөнки фатир һатып алғанда әлеге тыйыу сәбәпле, күсемһеҙ милектең юридик "таҙалығы"н тикшереү мөмкин булмаясаҡ.

Ә бит икенсел торлаҡ баҙарында һәр бер фатирҙың үҙ "тарихы" бар: унда кемдәр теркәлгән, ошоға тиклем фатир буйынса ниндәй һатыу-һатып алыу килешеүҙәре булған - ҡыҫҡаһы, һатыласаҡ фатирҙың иң тәүге милексеһенән асыҡлауға тиклем бөтөн мәғлүмәттәр кәрәк булыуы бар. Юғиһә, был фатирҙы һатып алғандан һуң торлаҡтың яңы хужаһына милекселек буйынса берәй дәғүәсе килеп сыҡмаҫ, тип кем ышандыра ала? Ә бит бындай күңелһеҙ осраҡтар, айырыуса суд аша яңы дәғүәсе менән фатир өсөн тартҡылаштар тарихы хаҡында бөтәбеҙгә лә яҡшы билдәле. Шуның өсөн дә белгестәр фатир һатып алыусыларға күсемһеҙ милек хаҡында мәғлүмәттәрҙе ентекләп үҙенә асыҡларға һәм был эште риелторға йә адвокатҡа ғына ышанып ҡалдырмаҫҡа кәңәш бирә, юғиһә, фатирҙан ҡолаҡ ҡағыуың да бар. Дөрөҫ, ҡасандыр бер осор намыҫлы һатып алыусы мәнфәғәтен яҡлау хаҡында ла һүҙ сыға биреп ҡуйғайны ла ул, ләкин был институт Рәсәйҙә үҫешә алманы, ти белгестәр...

Ошоларҙы уйлаһаң, ауылға күсеп ҡайтҡы килә лә тора. Унда ла йәшәүе еңелдән түгел, ләкин , исмаһам, тапҡан-таянғаның "төпһөҙ ҡоҙоҡҡа" китеп тормаҫ ине.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

---

беренсе сортлы, бөтөн ҡала халҡы нисәмә йылдар буйы беҙҙең ризыҡтар менән туҡлана. Һин ысын он менән май күргәнең юҡтыр", - тип, матур һауыттарға һалынған ап-аҡ төҫтәге онға, һап-һары майға, үтә күренмәле шешәләргә ҡойолған һөткә ымлап, үҙҙәренекен тылҡыйҙар.

- Мин белмәй, кем белһен, - тип яуаплай хужабикә, - ғүмерем буйы үҙем бешереп, әҙерләп ашаным. Һеҙҙең аҙыҡ-түлектәрегеҙ боҙолған. Бына һеҙгә дәлилдәр, - ти ул, бысый икмәккә, тәмһеҙ күмәстәргә, һөт төбөнә ултырған бурьяҡҡа күрһәтеп. - Һеҙҙең тауарҙарығыҙҙы һыуға ташларға, йә яндырырға һәм улар урынына сифатлыларын алып килергә кәрәк! - Хужабикә һатып алыусылар һәм баҙарҙағылар ишетерлек итеп бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатлай.

Был ҡатындың сауҙаға зыян килтереү мөмкинлеген һиҙенгән сауҙагәрҙәр һатып алыусылар алдына сығып, былай ти: "Ҡарағыҙ, был тилергән ҡатын кешеләрҙе ас ҡалдырырға уйлай. Бөтөн ашамлыҡтарҙы һыуға ташларға йә яндырырға ҡуша. Әгәр беҙ уны тыңлап, аҙыҡ-түлек һатыуҙан туҡтаһаҡ, һеҙ нимә ашарһығыҙ?" Сауҙагәрҙең шундай һүҙҙәренән һуң өйкөләшә башлаған халыҡ төркөмө, киреһенсә, ҡатынды әрләй башлай. Хужабикә: "Мин аҙыҡ-түлекте бөтөрөү тураһында һөйләмәйем бит, киреһенсә, сауҙагәрҙәр сифатлы тауарҙар һатһындар, халыҡты ағыуламаһындар тип тырышам", - тип, уларҙы үҙенең һүҙҙәренең хаҡлығына ышандырырға итә, әммә күпме һөйләһә лә, нимә һөйләһә лә, уны тыңламайҙар...

...Тормош үҙгәрмәй, йәмәғәт! Дауам итә, әммә үҙгәрмәй. Лев Толстой яҙған дәүерҙән алып берәй нәмә үҙгәргәнме? Юҡ! Бизнестың ҡумәртәләп осһоҙға ал да, ваҡлап ҡиммәтерәккә һат, тигән ауыһыҙ ҡануны йәшәй, йәшәйәсәк. Осһоҙҙоң һурпаһы шыйыҡ була, ти халыҡ әйтеме. Тиҙ байырға теләгәндәрҙең нәфсеһен ҡәнәғәтләндереп, артабан да шыйыҡҡа риза булып йәшәй бирәбеҙ. Үҙебеҙҙең "ағыу" ашауыбыҙ, шул арҡала һаулыҡ хәлдәребеҙ хөртәйә барыуы ла башыбыҙға барып етмәй. Врачтар: "Ауыҙ аша йөҙ ауырыу инә",- тигәнде ҡабатлай ҙа ул ҡабатлауға, уға кем ҡолаҡ һала! Сифатлы ризыҡ етештереүселәр әндәшмәҫ, ә бына кеҫә ҡалынайтыуҙы беренсе урынға ҡуйғандар ябырылыуы ихтимал - ни тиһәң дә, аҡсалар тынлыҡты һәм әндәшмәгәндәрҙе ярата...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлбиттә, кинәйә бының менән генә тамамланмай, бөйөк Толстой шул осорҙағы фән менән сәнғәттә лә "маргаринлы" әҫәрҙәр барлыҡҡа килеүе һәм ул, яҙыусы булараҡ, шул турала әндәшкәс, баяғы хужабикәгә ябырылған кеүек уға ҡаршы ябырылыуҙарын да бәйән итә. Иҫләйһегеҙҙер, атеист Ленин бабай үҙенең "Лев Толстой, как зеркало русской революции" тигән хеҙмәтендә бөйөк яҙыусыны "помещик, юродствующий во Христе", тип атай. Шулай, иптәштәр, аҡса булған ерҙә шым һөйләшегеҙ. Тсс!**

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

---

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Йәмәғәт эшмәкәре, бер нисә тапҡыр "Рәсәйҙең иң көслө кешеһе" исеменә лайыҡ булған Эльбрус Ниғмәтуллин тәүгеләрҙән булып Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттарын һайлау буйынса "Берҙәм Рәсәй" партияһының алдан тауыш биреүендә ҡатнашыу өсөн ойоштороу комитетына тейешле документтарын тапшырҙы. "Мин спорт карьерамды тамамланым һәм туплаған тәжрибәмде йәштәр менән уртаҡлашырға теләйем. Башҡортостанда тормошто яҡшыраҡ итеү өсөн үҙ өлөшөмдө индерергә тейешмен, тип иҫәпләйем", - тип билдәләне Эльбрус Ниғмәтуллин.

✓ Ил Президенты Указы менән полиция генерал-майоры Александр Прядко Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының яңы етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Александр Александрович Прядко 1964 йылдың 28 мартында Силәбе өлкәһенең Коркино ҡалаһында тыуған. 1994 йылдан эске эштәр органдарында хеҙмәт итә башлаған. Һуңғы эш урыны - 2019 йылдың 25 декабренән Рәсәй Эске эштәр министрлығының Архангельск өлкәһе буйынса идаралығы начальнигы вазифаһы.

✓ 1 апрелдә Башҡортостанда балаһы беренсе класҡа алыу өсөн ғаризалар ҡабул итеү башлана. Был хаҡта республиканың мәғариф министры Айбулат Хажин хәбәр итте. "1 апрелдән мәктәпкә беркетелгән биләмәлә йәшәгән (йәғни йәшәгән урын буйынса) балаларҙың ата-әсәләре беренсе класҡа ғариза яҙырға мөмкин. Башҡалар 6 июлдән алып мәктәптә буш урындар бөткәнсе ошондай хоҡуҡҡа эйә, ләкин ағымдағы йылдың 5 сентябренән дә һуңға ҡалмаҫҡа кәрәк", - тип яҙҙы министр үҙенең телеграм-каналында.

✓ Чехов исемендәге шифахананан Осиповтар ғаиләһе махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яҡташтарыбыҙға бер тоннанан ашыу сәскә балы оҙатҡан. Һалдаттар Башҡортостан халҡының уларға ярҙам күрһәтеүен тойорға тейеш, тип иҫәпләй ғаилә башлығы Станислав Осипов. "Әйткәндәй, был ғаилә махсус хәрби операцияға йөрөгән яугирҙарға беренсе тапҡыр ғына бал ебәрмәй. Ноябрҙә Станислав хәләл ефете Виолетта, ҡыҙы Русалина һәм улы Давид менән махсус гуманитар ярҙам йыйыу үҙәгенә тоннанан ашыу бал тапшырғайны", - тип яҙҙы Дамир Мостафин "Бәйләнештә"гә сәхифәһендә.

✓ *Радий Хәбиров республиканың иң яҡшы баҡсасылыҡ ширҡәттәре өсөн Башҡортостан Башлығының 500-шәр мең һумлыҡ 10 грантын булдырыу тураһында иғлан итте.*



ҠЫҪҠАСА

# БАШЛАНДЫ!

**Башҡортостанда "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" республика конкурсы һәм "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсы башланды.** Быйыл унда 150 педагог - һөнәри оҫталыҡ конкурсының муниципаль этабында еңеү яулаған уҡытыусылар ҡатнаша. Ҡатнашыусылар өсөн конкурс һынауҙары 10 мартта "Педагогик оҫтахана" конкурсынан башланды, бәйгеселәр уҡытыу һәм тәрбиә биреү мәсьәләләрендә методик белем кимәлен һәм тәжрибәһен күрһәтте. Һәр кем дистанцион технологиялар ярҙамында реаль ваҡыт режимында үҙенең педагогик асыштары, дәресте онотолмаҫлыҡ, файҙалы һәм мауыҡтырғыс итеп үткәрергә ярҙам иткән алымдары менән уртаҡлашты. Конкурсанттарҙы алда оҫталыҡ, асыҡ дәрестәр көтә. Конкурс марафоны матбуғат конференцияһы менән тамамлана. Республика Мәғариф министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, еңеүселәрҙең исемдәре 24 мартта "Торатау" конгресс-холында конкурсты ябыу тантанаһында иғлан ителә.

✓ **Ауырғазы районында быйыл тәүге зона агроконференцияһы уҙҙы.** Унда Урал алды зонаһының 17 районы өсөн сәсеү стратегияһы тикшерелде. Иң мөһиме - ямғырҙар башланғанса сәсеүҙе тамамлау, тип билдәләне республиканың Ауыл хужалығы министрлығы быйылғы сәсеүҙең тактикаһын. "Һауа торошона аныҡ фараз биреп булмай, шуға күрә ҡоролоҡҡа әҙерләнәбеҙ. Былтыр сәсеүҙе мөмкин тиклем тиҙерәк тамамлауҙы талап иттеләр, майҙандарҙың 80 процентында яҙғы культураларҙы сәсеп өлгөрҙөк һәм отток. Рекордлы уңыш үҫтереп алдыҡ. Быйыл да ошо тәртип буйынса эшләйбеҙ", - тине Башҡортостан Республикаһы вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов. - Сәсеү эштәрен - биш, ә уныш йыйыуҙы ун көндә тамамлау яҡшы, әлбиттә. Әммә бының өсөн күберәк техника - иген урыу комбайндары паркын ғына 2,5 тапҡырға арттырырға кәрәк. Министр урынбаҫары Ирек Сураков мәғлүмәттәренә ярашлы, 2023 йылда - 2,88 миллион гектарҙа (2022 йылда - 2,17 миллион гектар), ошо майҙандың 15 процентында элиталы орлоҡтар сәсеү күҙаллана.

✓ **Радий Хәбиров республиканың иң яҡшы баҡсасылыҡ ширҡәттәре өсөн Башҡортостан Башлығының 500-шәр мең һумлыҡ 10 грантын булдырыу тураһында иғлан итте.** "Республикала ярты миллионға яҡын кешенең баҡса участкалары, баҡсасыларҙың үҙ субмәҙәниәте бар, - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы. - Төбәктә 1,5 мең баҡсасылыҡ ширҡәте. Ошо күрһәткес буйынса Башҡортостан илдә алтынсы урынды биләй. Беренсе форум йомғаҡтары буйынса республика бюджетынан 116 миллион һумдан ашыу аҡса бүленде, был сумма әлегә ҙур түгел, әлбиттә. Тәүҙә беҙ инә торған юлдарҙы ремонтлауға 66 миллион һум йүнәлттек. Быйыл был эште дауам итербеҙ. Ҡатмарлы шарттарға һәм санкция баҫымына ҡарамаҫтан, быйыл баҡсасыларҙың проблемаларын хәл итеүгә ярҙам суммаһын 250 миллион һумға тиклем арттырҙыҡ". Билдәләнеүенсә, хәҙер коммерцияға ҡарамаған баҡсасылыҡ ширҡәттәре сифатлы электр уты менән тәьмин ителә башланы. Автобустар, ҡала яны поездары бәйләнешен ойоштороу буйынса хәл яйға һалына, канат юлы һәм йылға кисеүҙәре өҙлөкһөҙ эшләй.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИРАНҒА СӘФӘР



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров етәкселегендәге делегация Иранда эш сәфәре менән булды. Башҡортостан делегацияһын Ислам Республикаһының иҡтисади мәсьәләләр буйынса вице-президенты Мохсен Резаи ҡабул итте.**

"Башҡортостан менән Иран араһында тауар әйләнеше әлегә 100 миллион долларға яҡын. Алдағы йылдарҙа ошо күрһәткесте кәмендә ике тапҡырға арттырыу беҙҙең көсөбеҙҙән килер тип ышанам. Иран - Башҡортостанға, ә Башҡортостан Иранға инвестиция һалырға әҙер. Халыҡ-ара иҡтисади хәл беҙҙе ошо йүнәлештә эшләргә этәрә. Һис шикһеҙ, ике яҡлы эшмәкәрлек иҡтисад өлкәһе менән генә сикләнмәй. Беҙҙең фән, мәғариф, медицина туризмы өлкәһендә хеҙмәттәшлекте киңәйтергә теләк бар. Күҙ көнө, Республикабыҙ көнө алдынан, Башҡортостанда Иран Ислам Республикаһы көндәрен үткәреү тәҡдиме барлыҡҡа килде. Иран ағы быны хупланы", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Тегеранда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ирандың ауыл хужалығы министры Джавад Садати-Нежад менән осрашты. Улар агросәнәғәт өлкәһендә халыҡ-ара хеҙмәттәшлек йүнәлештәре тураһында фекер алышты. Яҡтар ауыл хужалығы продукцияһының ассортиментын һәм күләмен киңәйтеү мәсьәләһен тикшерҙе. Башҡортостан Иранға иген һәм үҫемлек майы оҙата. Ирандың ауыл хужалығы министры ағас эшкәртеү һәм малсылыҡ продукцияһын һатып алыуға ла ҡыҙыҡһыныу белдерҙе. Киләсәктә ике республика араһында тауар әйләнешенең йылына әлегә 100 миллиондан алып 400 миллион долларға тиклем артыуы ихтимал, тип билдәләне Джавад Садати-Нежад. Уның һүҙҙәренсә, Иран инвесторҙарын агрокультураларҙы һәм малсылыҡты үҫтереү өсөн ауыл хужалығы ерҙәрен ҡуртымға алыу ҡыҙыҡһындыра. Башҡортостандан минераль ашламалар һәм биологик препараттар оҙатыу ҙа хеҙмәттәшлектең тағы бер йүнәлеше булыуы мөмкин. Радий Хәбиров шулай уҡ республика баҙарының Иранда үҫкән йәшелсә-емештәргә ихтыяжын билдәләне. "Башҡортостандың ауыл хужалығы продукцияһын Рәсәйҙең башҡа төбәктәренә оҙатырға мөмкин булған логистика үҙәгенә әүерелеүе ихтимал. Әйткәндәй, Үзбәкстандан коллегаларыбыҙ беҙҙә ҙур логистика үҙәге төҙөлөшөн башланы. Иран партнерҙары менән дә ошондай эш алып барырға әҙербеҙ", - тип йомғаҡ яһаны Радий Хәбиров.

# САМБО-МӘКТӘПТӘРГӘ



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Берҙәм Рәсәй"ҙең генераль советы секретары Андрей Турчакка Өфөлә самбо буйынса халыҡ-ара турнир уҙғарырға тәҡдим итте.**

Турнирҙы 2024 йылда үҙ ишектәрен асырға йыйынған Көрәш һарайында ойоштороуҙары ихтимал. Ярыштарҙы Самбо көнөндә - 2024 йылдың 16 ноябрендә үткәреү планлаштырыла. "Мәскәүҙә үткән "Еңеү фәне" форумында республикабыҙҙа самбоны үҫтереү буйынса ҡаҙаныштар менән уртаҡлаштым. "Самбо - мәктәптәргә" программаһында Башҡортостандың 19 мәктәбе ҡатнаша. Быйыл йыл аҙағына уларға тағы унауҙы өҫтәйбеҙ. Яңы уҡыу йылынан Башҡортостан физик культура институтында самбо буйынса тренер-уҡытыусылар әҙерләй башлайбыҙ", - тине Радий Хәбиров.

Республика самбосылар өсөн сифатлы һәм осһоҙ кейем-һалым, ҡорамал етештерә башларға әҙер, тип өҫтәне Радий Хәбиров. "Республика бындай мөмкинлектәргә эйә. Ғөмүмән, проект артабан да киңәйер, егеттәрҙе физик һәм рухи яҡтан көслө булырға өйрәтер тип ышанам. Был бик файҙалы", - тине Радий Хәбиров.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Радий Хәбиров Башҡортостанда Андрей Турчак тәҡдим иткән "Za самбо" проектын ғәмәлгә ашырыу тураһында ғинуарҙа уҡ әйткәйне. "Бөтә Рәсәй самбо федерацияһы президенты Сергей Елисеев менән Өфөлә Андрей Турчактың "Za самбо" проектын тормошҡа ашырыу тураһында фекер алыштыҡ, әйткәндәй, ул үҙе СССР-ҙың дзюдо буйынса спорт мастеры", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

# ЯРЫШТЫЛАР!

**"Башҡортостан Республикаһының мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының йыл педагогы" республика һөнәри конкурсын һәм "Туған телдә уҡытыу менән мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының йыл педагогы" конкурсы сиктәрендә үткәрелгән конкурсты ябыу тантанаһы үтте.**

Республика һөнәри конкурсы 2012 йылдан алып йыл һайын үткәрелә һәм мәктәпкәсә белем биреү ойошмаларының педагогик хеҙмәткәрҙәре араһында иң популяр һәм абруйлы конкурстарҙың береһе булып тора.Конкурста республиканың 55 муниципалитетынан 91 мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһы педагогы ҡатнашты. Уны ябыу тантанаһында Башҡортостан мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин ҡатнашты һәм шулай тине:

- Йыл һайын конкурс Башҡортостан Республикаһының иң яҡшы педагогик кадрҙарын берләштерә. Беҙ тәрбиәләнеүселәребеҙҙең юғары һәм сифатлы һөҙөмтәләрен күрәбеҙ. Балаларыбыҙ Бөтә Рәсәй, халыҡ-ара ярыштарҙа, конкурстарҙа, олимпиадаларҙа еңеү яулай һәм уларҙың һәр береһе беҙҙең башҡорт мәғариф системаһының йөҙө булып тора. Конкурс еңеүселәре һәм лауреаттары мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының иң яҡшы педагогы исемен лайыҡлы йөрөтәр, тип ышанам.

Өфө районы Жуково ауылының "Карлуғас" балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе Арина Валерьевна Баҡыева "Башҡортостан Республикаһы мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының йыл педагогы" республика һөнәри конкурсында еңеүсе исемен яуланы. "Туған телдә уҡытыу менән мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының йыл педагогы" конкурсында 202-се полилингваль балалар баҡсаһының өлкән тәрбиәсеһе Гөлсинә Азат ҡыҙы Ишбаева еңеүсе булды. Конкурс еңеүселәре һөнәри оҫталыҡ конкурстарының федераль этаптарында ҡатнашасаҡ.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөнөң "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле Татарстандың баш ҡалаһында "Хазина" тигән үҙенсәлекле программа менән сығыш яһаны. "Хазина" концерт-театрлаштырылған тамашаһы Ырымбур, Силәбе, Ҡурған, Екатеринбург, Пермь, Ҡазан ҡалаларында, Ямал-Ненец һәм Ханты-Манси автономиялы округтары ҡалаларында күрһәтелә.

✓Башҡортостандың 18 йәшкә тиклемге ҡыҙҙар командаһы үҙ тарихында тәүге тапҡыр хоккей буйынса Рәсәй беренселегендә өсөнсө урын алды. Спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итеүенсә, ярыштарҙың йомғаҡлау этабы 2-10 мартта Түбәнге Новгород өлкәһендә үтте. Унда Мәскәүҙән, Санкт-Петербургтан, Мәскәү, Свердловск, Түбәнге Новгород, Воронеж өлкәләренән һәм республикабыҙҙан командалар ҡатнашты. Башҡортостандың йәш спортсылары бронза миҙал яуланы һәм беренселектең призерҙары исемлегенә инде.

✓18 мартта Өфө ҡалаһының 38-се һәм 97-се мәктәптәрендә "Бергә тапшырабыҙ! Ата-әсәләрҙең БДИ тапшырыу көнө" тигән Бөтөн Рәсәй акцияһы ойоштоҙола. Ул берҙәм дәүләт имтиханы тирәләй имеш-мимештәрҙе юҡҡа сығарыуға йүнәлтелгән. Акция имтихан үткәреү пунктында барған хәлгә, ҡатнашыусыларҙың хоҡуҡтарына бәйле бик күп һорауҙарға асыҡлыҡ индерә. Берҙәм дәүләт имтиханын уҙғарыуҙың күнекмә пункттарында булдырылған шарттар ысынбарлыҡҡа яҡын. Ата-әсәләр бөтә имтихан процедураһын үтергә (теркәлергә, һөҙөмтәләрҙе алырға) мөмкин.

✓Кемерово ҡалаһында II "Азия балалары" ҡышҡы халыҡ-ара уйындары тамамланды. Башҡортостандың йыйылма командаһы турнирҙа өс алтын, шунса уҡ көмөш һәм ике бронза миҙал яуланы, тип хәбәр иттеләр республикаһың Спорт министрлығынан. Ярыштар 23 февралдән 4 мартҡа тиклем Кузбастың дүрт ҡалаһында үтте. 12 ил спортсылары 11 спорт төрөндә 57 наградалар комплекты уйнатты.

✓26 мартта "Өфө һылыуҡайы - 2023" ҡала матурлыҡ конкурсына һайлап алыуҙар уҙғарыла. Конкурсты Өфө хакимиәте булышлығында "Һомай" театр-дефиле" студияһы үткәрә. Сара көндөҙгө сәғәт 2-лә башлана. Конкурста ҡатнашыуға 16-35 йәшлек ҡыҙҙар саҡырыла. Финал 26 апрелдә ВДНХ комплексында була. Быйыл проект Өфөнөң яҡынлашып килгән 450 йыллығына арнала. Еңеүсегә 100 мең һум аҡсалата бүләк тапшырыла.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЙӘШТӘРЕБЕҘ...

## башҡортса шаяртырға өйрәнә



**Ҡыштың һуңғы көнө - 28 февраль ҡояшы, үҙ буранына сәсәй-сәсәй, тоноҡ, ҡараңғы офоғона тәгәрәй ине. Сәғәткә ҡарағас, аһ итем! Өлгөрмәйем! Башҡорт асыҡ КВН лигаһының Ҙур фестивале башланырға ярты ғына сәғәт ҡалған! Такси саҡыртырғамы, автобусҡа ултырырғамы? Маршрут таксиһы - иң шәбе! Туҡталышҡа барып еттем дә, тоҡос автобустарҙың береһенә инеп тә ҡунаҡланым...**

Барып еттем дә, ҡабаланып тамаша залына йүгерҙем. Урындар бар икән әле. Ләкин һанаулы. Береһенә һеңәм. Бына халыҡ ҡул сабырға тотондо. Юҡҡа түгел, сәхнәнең уң мөйөшөндә трибуна артында дүрт күҙле Линар Хәлилов пәйҙә булды. Фанфаралар яңғыраны, ҡулдар нығыраҡ сәпәкәй итте. Линар Хәлилов, теле-телгә йоҡмай, ҙур фестиваль асылыуын иғлан итте һәм командаларҙы сәхнә уртаһына саҡырҙы. Бына улар: "Йыуаса", "Быйма", "Тегенән-бынан", "Барыбер", "Әфлисун", "Особый башҡорттар", "Теге өсәү", "Ыстағәфирулла", "КарАҡ" һәм "Сәй эсәйек" - йәмғеһе ун команда. Бына беренсе команда ағзалары сәхнә тултырып йүгерешә, үҙҙәре менән таныштыра, кәмит күрһәтә лә башланы. Уларҙы, күп тә үтмәй, икенсе, өсөнсө ҡатнашыусылар алмаштырҙы. Бөтәһе лә үҙенсә ҡыҙыҡлы сығыштар күрһәтте. Күҙҙән йәш сыҡҡансы көлдөрҙө КВН-сылар!

Бер мәл иң-индәргә билдәләр мәл етте. Баһалаусылар мәрәй һанаған арала, һүҙ тамаша ҡылыусыларға бирелде. Берәү командаларға һорау бирә, ә ҡалғандар тиҙ арала тапҡыр яуап ҡайтара. Яуап ҡайтарыусылары бер, ә бына тамаша залынан атылып сығып, алып барыусы эргәһенә баҫып, уның менән бер-ике һүҙ, ым-ишара менән даулашып, хатта Дүрткүҙҙең микрофонына дәғүәләшеп, күкрәк кирөп барыһын да айыҡ, сәмле, юморлы итеп сәләмләүсе билдәһеҙ егеттең ҡыйыулығы барыһын да шаҡ ҡатырҙы...

Һәм тағы. Бәйгелә ҡатнашыусыларҙың саф башҡортса мәҙәк күрһәтеүе оҡшаны. Тимәк, алдағы йылдарҙа ошондай бәйгеләрҙә ҡатнашыусы йәштәрҙең тел, телмәр кәмселектәрен тәңкитләүҙәргә ҡолаҡ һалынған, тигән һығымта яһалды. Сара һуңында ҡатнашыусыларға, тамашасыларға һәм ойоштороусыларға мөрәжәғәт итеп, тәьҫораттары менән уртаҡлашыуҙарын һорағанда ла барыһы ла ошо күренеште ыңғай яҡтан билдәләне һәм хуплауҙарын белдерҙе.

Ә фестиваль һөҙөмтәләре түбәндәгеҫә: "Фестиваль асышы"н Өфөнән "Барыбер" командаһы алды. "Иң яҡшы егет роле" номинацияһы "Тегенән-бынан"дың бөрйән һөйләшендә шаяртыусы капитаны Айгиз Хәсәновҡа тапшырылды. Ҡыҙҙар араһында ошондай уҡ номинацияны Нефтекамаһың "Особый башҡорттар" командаһынан Илмира Әлетдинова яуланы. Өсөнсө урынды видеола Өфө урамдарын - Лос Сантосҡа, Илһам Ишкининды Биг Смоукка әйләндергән "Әфлисун" командаһы, бынау буран тип тормай килеп етеп, баш ҡала халҡын сибайҙарса көлдөрөүгә ирешкән "Йыуаса"лар менән бүлеште. Сибайҙан килгән тағы бер команда - "Ыстағәфирулла" менән Өфөләге "Тегенән-бынан" командалары икенсе баҫҡысты алһа, Өфө Фән һәм технологиялар университетының "КарАҡ"тары барыһын да уҙҙәренә ҡаратты һәм еңеүсе тип билдәләнде!

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БАЛЫҠ ТОТОУ - ЯҢЫСА



**1 мартта Волга-Каспий балыҡсылыҡ хужалығы бассейны өсөн Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығының 2022 йылдың 13 октябрендәге 695-се бойороғо менән раҫланған балыҡ тотоуҙың яңы ҡағиҙәләре үҙ көсөнә инде. Тыйыуҙар Башҡортостан биләмәһендә 2029 йылдың 1 мартына тиклем ғәмәлдә була.**

Ҡағиҙәләрҙең элекке редакцияһындағы кеүек үк, балыҡ тоторға яратыусылар өсөн сикләүҙәр бар. Мәҫәлән, эхолот ҡулланыу тыйыла, ошо ҡоролма менән һыу яткылыгына 500 метрҙан яҡыныраҡ килгән өсөн штраф ҡаралған. Һәүәҫкәр балыҡсыларға ау менән файҙаланыу тыйыла. Тәүлегенә 5 килограмдан ашыуыраҡ балыҡ тоторға ярамай.

Башҡортостан биләмәһендә һәүәҫкәр балыҡсылыҡ өсөн тыйылған урындар билдәләнде. Атап әйткәндә, Ағиҙел йылғаһында ике участка: Илеш районының Йондоҙ һыу алыу ҡоролмаһынан алып Әңгәсәк ауылының административ сигенә (Дүртөйлә районы) тиклем һәм Өфө районының Ҡыҙылъяр ауылы сигенән Бачурин ауылының административ сигенә тиклемге участкала.

Яҙ көнө балыҡтар ыуылдырыҡ сәскән осорҙа, 25 апрелдән 5 июнгә тиклем, балыҡсылыҡ тыйылған. Был ваҡытта ярҙан тороп бер ҡалҡыуыслы йәки батырғыслы ҡармаҡ һалырға ғына рөхсәт ителә. Бынан тыш, 1 октябрҙән 1 майға тиклем ҡышлау соҡорҙарында балыҡ тотоу тыйыла (уларҙың исемлеге ҡағиҙәләргә ҡушымтала күрһәтелгән).

Республика биләмәһендә балыҡсылыҡ хужалығы әһәмиәтендәге һыу ятҡылыҡтарында бағыр, ҡыҙыл балыҡ, бәрҙе, уҡбалыҡ, ә Яҡтыкүлдә алабалыҡ тотоу тыйылған. Ҡыҙыл китапҡа индерелгән балыҡтарҙы тоторға ярамай, ҡармаҡҡа эләкһә, кире һыуға ебәрергә кәрәк. Һәмбаштар һәм бикрелләр ғаиләһенә ҡараған балыҡтарҙы махсус рәүештә үрсетелгән шәхси быуаларҙа тоторға мөмкин.

ҠЫҪҠАСА

# ТАШҠЫН ХӘҮЕФЕ БАР

**Күп йыллыҡ күҙәтеүҙәрҙәргә ҡарағанда, Башҡортостан биләмәһендә ташҡын хәүефе көслө булған 200-ҙән ашыу йылға бар.** Йышыраҡ бәләкәй дала йылғалары, шулай уҡ Ағиҙел, Өфө, Дим йылғалары ярҙарынан сыға. Был турала "Башинформ" агентлығында үткән матбуғат конференцияһында Башҡоростандың гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхитте күҙәтеү идаралығы начальнигы Вилора Горохольская хәбәр итте. "Уртаса күп йыллыҡ күрһәткестәргә ярашлы, йылғалар 7-17 апрелдә таша башлауы ихтимал. Оҙайлы фараз бирә алмайбыҙ. Һыуҙың иң юғары кимәле норманан түбәнерәк булыр тип көтәбеҙ. Яуымтөшөм күләме лә иҫәпкә алынған. Тупраҡтың туңыу тәрәнлеге, ҡар запасы ташҡын ваҡытында хәлде билдәләгән төп дәүмәлдәр булып тора. Барлыҡ ошо үлсәмдәр фараз әҙерләгәндә анализлана, ул марттың өсөнсө ун көнлөгөнә әҙер булырға тейеш", - тип билдәләне ул.

✔ **Башҡортостан Прокуратураһы Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө идаралығы наркотиктар әйләнешенә контроль буйынса бүлегенең элекке биш оперуполномоченныйына ҡарата ғәйепләү һығымтаһын раҫланы.** Улар вазифа вәкәләттәрен арттырғаны, административ хоҡуҡ боҙоу тураһында дәлилдәрҙе һәм оператив-эҙләү эшмәкәрлеге һөҙөмтәләрен боҙоп күрһәткәне, ҙур күләмдә наркотиктар һатып алғаны, һаҡлағаны һәм ялған күрһәтмәләр биргәне өсөн ғәйепләнә. Тикшереү версияһы буйынса, 2020 йылдың августында ғәйепләнеүселәр үҙ эшенең күрһәткестәрен яһалма рәүештә арттырыу өсөн ике ҡатынды тотоуҙы ойошторған, йәғни полиция хеҙмәткәрҙәре уларға үҙҙәре наркотиктар ташлаған һәм уны тартып алыу фактын документлаштырған. Бынан тыш, психологик баҫым яһап, ғәйепләнеүселәр ҡыҙҙарҙы медицина тикшереүе үтеүҙән баш тартырға күндергән, һөҙөмтәлә уларҙы "наркотик сараларҙы ҡулланыу" статьяһы буйынса административ яуаплылыҡҡа тарттырған. Ғәйепләнеүселәр үҙ ғәйебен танымаған. Енәйәт эше Совет районы судына ебәрелгән.

✔ **Өфө мэрияһында мәктәптәрҙә бушлай ҡайнар аш менән туҡланыуҙы ойоштороуға яңы тарифтар раҫланды.** Тейешле указға баш ҡала мэры Ратмир Мәүлиев ҡул ҡуйған. Билдәле булыуынса, льготаға хоҡуҡлы балалар өсөн белем биреү ойошмаларында төшкө аштың хаҡы 2023 йылдың 1 ғинуарынан уҡ артҡан. Әйтәйек, хәҙер 1-4-се класс уҡыусылары өсөн иртәнге аш көнөнә - 63 һум 80 тин, төшкө аш - 71 һум 82 тин, төштән һуңғы аш 45 һум тора. 5-11 класс уҡыусылары өсөн хаҡтар түбәндәгесә: иртәнге аш - 60 һум, төшкө аш - 70 һум, төштән һуңғы аш - 45 һум. Украинанан, Луганск Халыҡ Республикаһынан, Донецк Халыҡ Республикаһынан, Херсон һәм Запорожье өлкәләренән күсенгән, ваҡытлыса тороу пунктттарында йәшәмәгән 5-11-се класс уҡыусылары өсөн дә бушлай туҡланыу хаҡы артҡан. Уларға ҡаҙнанан иртәнге ашҡа - 78 һум 20 тин, төшкө ашҡа 89 һум 45 тин бүлenә.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Календула

❖ Аритмия осрағында ризыҡланғандан һуң 2 сәғәт үткәс шәкәр киҫәгенә 20 тамсы календула төнәтмәһен тамыҙып эсергә. Әҙер төнәтмәһе булмаһа, аритмия һәм йөрәк көслө типкәндә 2 балғалаҡ сәскәгә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтеп, көнөнә 4 тапҡыр ярты-шар стакан эсергә.

❖ Нефрит булғанда календула сәскәһе һәм кесерткән япрағын тигеҙ өлөштә ҡушырға. Әҙерләмәнең 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә. Ашағандан 1 сәғәт үткәс, көнөнә 3-4 тапҡыр ярты-шар стакан эсергә.

### Кәкүк емеше

❖ Баш ауырығанда (мигрень) быяла һауытҡа кәкүк емешенең (первоцвет лекарственный) яңы сәскәләрен тығыҙлап ғына тултырырға һәм йөҙөм шарабы ҡойоп, 3 аҙна төнәтергә. Һеҙөп, ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр 50-шәр мл эсергә.

❖ Баш ауырыһа һәм әйләнһә, 1 ҡалаҡ киптереп ваҡланған сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм йылы көйө сәй кеүек эсергә. Йәки күберәк һалып бешереп, көнөнә 3 тапҡыр ярты-шар стакан эсергә.

❖ Бөйөр һәм бөйәл ҡыуығы ауырыуҙарынан 1 балғалаҡ кәкүк емеше тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтергә, һеҙергә. көнөнә 3-4 тапҡыр 1-2 ҡалаҡ эсергә. Был дөйөм хәлһеҙлек, ашаға килмәгән, йөҡөһоҙлоҡ, эс ҡатыуҙан, бөйәл ҡыуығы сифатында ла файҙалы.

### Шифалы ромашка

❖ Пиелонефрит һәм цистит ауырыуҙарынан 1 ҡалаҡ сәскәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә, һеҙергә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Баш ауырығанда ризыҡланғандан һуң 2-3 сәғәт үткәс, көнөнә 3 тапҡыр 2-шәр грамм сәскә онтағын ашарға. Йәки 1-2 балғалаҡ сәскәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ярты сәғәт төнәтергә һәм эсе көйөнсә көнөнә 3-4 тапҡыр 1/3 стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

## Муйынға тағыу ысулдары

Биҙәүестәрҙең үҙенсәлектәре тураһында һүҙ алып барғанда, әлбиттә, муйынға тағыу ысулдарын да күҙ уңында тоторға кәрәк. Бөгөнгә килеп еткән мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, "селтәр", "яға", "һаҡал" һәм башҡа төрҙәрендә үҙҙәренә хас булған традициялар барлыҡҡа килгән:

1. "Селтәр"ҙә нығынған төп ысул - ул нигеҙгә тегелгән тар таҫма. Ул ике төрлө беркетелергә мөмкин: а) бер осо нигеҙгә ҡуша тегелә, ә икенсе осона элмәк йәки төймә баҫыла. Нигеҙгә шулай уҡ элмәк ҡуйыла; б) ике таҫма киҫәгенең бер яҡ осо нигеҙгә тегелә, икенсе осона төймә баҫылып элмәк эшләнә.



2. "Яға". Был осраҡта тағып йөрөү ысулы атаманың үҙендә үк сағылыш тапҡан тип тә әйтергә мөмкин, сөнки муйынды уратып алған яҫы таҫмаһы бар. Тап шул элементты төбәкте өйрәнеүсе Д.П. Никольский муйынсаҡҡа оҡшата ла инде. Халыҡ телендә иһә уны һапма тип атайҙар. Шуны ғына өҫтәп әйтергә кәрәк: Ҡурған һәм Силәбе башҡорттарында һапма һәм биҙәүестәрҙең нигеҙе башлыса бер бөтөндө тәшкил. Ә бына Учалы менән Әбйәлилдә уларҙың һәр береһе айырым эшләнгәндән һуң ғына ҡуша тегелә. Шулай уҡ йыш ҡына нигеҙҙең өскө ягында тағы бер элмәк эшләнә.



3. "Һаҡал"да ысулдарҙың төрлөлөгөн күрәбеҙ. Миҫал өсөн Дашков музейында һаҡланыусы ике һаҡалды ҡарап үтергә мөмкин. Икеһенең дә нигеҙе бер ҡалып буйынса эшләнгән. Әммә тәүгеһенең нигеҙенә тағыу өсөн тар ғына таҫма тегелгән. Икенсеһендә - яғаныҡына оҡшаған яҫы таҫма. Ҡайһы бер һаҡалдарҙан күренеүенсә, башҡа төр ысулдар ҙа ҡулланылырға мөмкин.



Азат ҒАРИПОВ,
этнограф.
"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре"
китабынан.

ЙЫЛ ЗЫҢҒЫРЫ

**Өфө башҡорттары ҡоролтайы "Киске Өфө" гәзите, Өфө тарихы музейы менән берлектә Рәсәйҙә иғлан ителгән "Педагог һәм остаз" йылына арналған сараларҙы түңәрәк ҡор менән башлап ебәрҙе. Унда баш ҡала мәғарифы өлкәһендә оҙаҡ йылдар эшләүсе тәжрибәле спикерҙар - Өфө күп профилле профессиональ колледжы директоры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре, педагогия фәндәре кандидаты Сынтимер Биктимер улы Баязитов, Өфө фән һәм технологиялар университетының Башҡорт филологияһы, көнсығыш телдәр һәм журналистика факультеты деканы, филология фәндәре докторы, профессор Гөлфирә Риф ҡыҙы Абдуллина, филология фәндәре кандидаты Фәнзил Бүләк улы Санъяров "Кем ул остаз? Остаз булыу еңелме? Оло йоштәге һәр кем остаз тип атала аламы?" тигән һорауҙарға яуап эҙләп, баш ҡаланың башҡорт гимназиялары, лицейҙары уҡытыусылары, уҡыусылары, студенттары менән фекер алышты.**

# ОСТАЗЛЫҠ МӘКТӘБЕ...

## һәр белем усағында булһын



Өфө башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты баш ҡаланың белем усаҡтары менән һәр саҡ бәйләнештә һәм мәғариф системаһындағы проблемалар, башҡорт телен уҡытыу мәсьәләләрен иғтибар үҙәгендә тота. Бөгөн, балаларҙы илһөйәр, телһөйәр итеп, ниндәй ҡиммәттәргә нигеҙләнеп, ниндәй өлгөлә тәрбиәләргә тейешбеҙ, тигән бәхәстәр заманында остаздар мәктәбе, өлкән быуын педагогтарының ярҙамы, тәжрибәһе бигерәк тә мөһим икәнлегенә күптән инанылған. "Беҙҙә уратып алған донъя үҙе остазлыҡҡа ҡоролған. Ҡарағыҙ әле, бесәйҙәр булһынмы, бүреләрме, нисек итеп балаларын өйрәтә. Кешеләр ҙә шулай, үҙе белгәнде өйрәтеп ҡалдырырға тырыша. Аллаһы Тәғәләнән шундай миссия бирелгән: үҙе олораҡ булып, оҙағыраҡ йәшәүселәр үҙенең тормош тәжрибәһен йәш быуынға тапшырырға тейеш. Был системаға һалынған күренеш, бөтөн булмышыбыҙ, йәшәү рәүешебеҙ шуға ҡоролған. Быйылғы йылды ил етәкселеге Педагог һәм остаз йылы тип иғлан итеүенә шуға гәжәпләнмәнем дә", - тине Фәнзил Бүләк улы Санъяров та үҙенең сығышында.

Тәжрибәле педагог ҡына түгел, 20 йыл Өфө ҡала хакимиәтендә эшләгән дәүерендә булдырылып, әлеге көндә лә баш ҡала балаларын туған телгә ылыҡтырыусы "Һаумы, һаумы, әкиәт", "Шаяниум" кеүек сараларҙы, хәҙер инде бар донъяны урап сыҡҡан, киң танылыу яулаған "Мираҫ" фольклор йыр һәм бейеү ансамблен ойоштороп, үҙен остаз кимәленә күтәргән Сынтимер Баязитов та ошо тупланған тәжрибәнең һаҡланып ҡалырға тейешлегенә баҫым яһаны. "Башҡорт телен һаҡлау, үҫтереү йәһәтенән күп эштәр башҡарылды был йылдарҙа. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары әсбаптар ҙа яҙҙы, конкурстарҙа ҡатнашып, урындар ҙа яуланы. Ошолар артабан бер быуындан икенсе быуынға күсеп, традицияларға дауам ителһә, был бай тәжрибә бөгөн дә күп рухи башланғыстарға нигеҙ һалып, этәргес көс булыр", - тигән ышаныс белдерҙе Сынтимер Биктимер улы. Ул Бөтөн донъя башҡорттары башҡарма комитетының мәғариф, фән һәм башҡорт телен һәм әҙәбиәтен үҫтереү буйынса комиссия кураторы булараҡ, быйылғы Педагог һәм остаз йылына арнап, Өфө урамдарындағы баннерҙарҙы үҙ һөнәрендә ҙур уңышҡа өлгәшкән уҡытыусыларҙың фотоһүрәттәре биҙәйәсәген дә белдерҙе. Был ла йылға айырыуса биҙәк һәм тантана өҫтәйәсәк.

Әйткәндәй, ҡорҙа спикерҙарҙан башҡа ла оҙаҡ йылдар баш ҡаланың мәғариф өлкәһендә эшләгән кешеләр - М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының элекке директоры Гөлназ Әхмәҙиева, М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы директоры Шәмсулла Хәбибрахманов, Башҡортостандың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре Мәрфуға Мостафина кеүек кешеләр ҙә бар ине. Улар ҙа күптәргә үҙ тәжрибәләрен, йөрәк йылыһын биргән, ошо уҡытыусы һөнәренә йәлеп иткән остаздар. Ошо урында 158-се Башҡорт гимназияһының башҡорт теле уҡытыусыһы Фәйрүзә Үтәбаеваның сығышын да килтереп китәйек: "Мин юғары уҡыу йортон тамамлап, 122-се Башҡорт гимназияһына башҡорт теле уҡытыусыһы булып эшкә урынлашҡанда "Юлдаш" радиоһы асылып ҡына тора һәм унда хеҙмәткәрҙәр йыялар ине. Был гимназияла берәй ай уҡытырмын да, радиоға эшкә китермен, тигән ниәттә инем. Әммә шулай уҡ башҡорт теленән уҡытҡан Венера Ғәлимова кеүек остаздар йоғонтоһонда белем усағының рухлы мөхитенә башкөллө инеп киткәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым. Эйе, уҡыу йорто йәш кешегә диплом бирә, һөнәр бирмәй, һөнәргә ана шул остаздар өйрәтә икәнен үҙ тәжрибәмдән беләм..."

Осрашыуҙа яңғыраған сығыштар, әлбиттә, Өфө фән һәм технологиялар университетынан килгән студенттарҙы ла битараф ҡалдырманы. Уларҙың да кемдәрелер үҙҙәрен ошо уҡытыусы һөнәренә арнаясаҡ бит. Шуға ла бер студенттың: "Замана уҡытыусыһы ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш?"- тип һорауы тәбиғи яңғыраны. Гөлфирә Риф ҡыҙы уға шулай яуапланы:

- Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы тураһында һүҙ барһа, ул барыһынан да бер башҡа юғарыраҡ торорға тейеш, сөнки йәмғиәттә беҙгә иғтибар бик көслө. Шуға ла тап ошо предмет уҡытыусыһы замандан артта ҡалмаҫҡа, заман технологияларын белергә, донъяуи мәсьәләләргә үҙ ҡарашын булдырырға, хатта кейгән кейеме менән дә башҡаларға үрнәк булырға тейеш ул.

Тағы бер студент сарала ҡатнашыусы остаздарҙан: "Бына һеҙ ҙә башҡорт халҡын бик тыйнаҡ тинегеҙ. Ләкин, ҡарағыҙ, бөгөн беҙгә ситтәр килеп үҙ эшен аса, эш биреүсе булып китә, ә үҙебеҙҙекеләр эш артынан Себер һымаҡ тарафтарға сығып китә. Беҙ һаман тыйнаҡ булырға тейешбеҙме?"- тип тә һораны:

-"Роснефть" газ һәм нефть гигантының башҡарма директоры Сечиндың филолог икәнен беләһегеҙме? - тип һорауға һорау менән яуап ҡайтарҙы Фәнзил Санъяров. - Бына һеҙ ҙә филологтар, ләкин теләһәгеҙ һеҙ ҙә банк директоры була алаһығыҙ, тимәк. Тик бының өсөн бер генә диплом етмәй, һеҙгә уҡырға ла уҡырға, эштән ҡурҡмаҫҡа кәрәк. Әйҙә, баҫалҡы түгел, үткер булығыҙ. Беҙ һеҙҙе белемле, маҡсатлы, ышаныслы алға барыусы булырға саҡырабыҙ".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәғариф хеҙмәткәрҙәре йәштәр өсөн һәр ваҡыт остаз булып ҡала икәнен дә раҫланы был сара. Уларҙың йәштәрҙең аңын формалаштырыу, йүнәлеш биреүҙәге роле гәйәт ҙур. Шуға ла был түңәрәк ҡорҙағы фекер алышыуҙар артабан һәр уҡыу йортонда дауам итер, һәр башҡорт гимназияһы, лицейында үҙҙәренең Остаздар мәктәбе ойошторолор, тигән ышаныста ҡалабыҙ.**

Ләйсән ДАЯНОВА.

***✓ Ике тотҡалы алтын көршәкте донъя кимәлендәге шедеврҙар иҫәбенә индереп була: уның тотҡалары һикергән мәлдәге тау кәзәһенең һыны рәүешендә яһалған.***

ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Өсөнсө бүлек. Иртә тимер эпохаһы

Ырымбур өлкәһенең көньяғында 1987-1988 йылдарҙа А.Х. Пшеничнюк тарафынан ҡаҙып асылған Филиппов ҡурғаны ошо дөйөм ҡағиҙәнән айырылып тора. Уның диаметры 100 м, бейеклеге 9 метрҙан ашыу, ул байтаҡ киң ҡәбер (21х19м, тәрәнлеге 2м) өҫтөнә өйөлгән, бер стенаһында ерләү өсөн соҡоп эшләнгән ҡәбер урыны була. Моғайын, ошо киң ерләү камераһының ағас иҙәнле бүрәнә бураһы һәм түбәһе, ә өҫтә, ерҙең боронғо өҫкө ҡатламы кимәлендә, бер нисә ҡатлы бүрәнә түшәме булғандыр. Ҡәбергә түбәнәйә барған тар ғына оҙон коридор-дромос илтә, ҡәбергә инеү урынында йыуан бүрәнәләргә текәтеп эшләнгән ишек йә иһә ҡапҡа булған. Ҡәбер өҫтөндә, ерҙең боронғо өҫкө ҡатламы кимәлендә, ҙур һәм ҡатмарлы, майҙаны 100 кв.м булған ағас ҡоролма ҡалдыҡтары төҫмөрләнә. Бәлки, бында күп камералы, түшәме бүрәнә менән ҡапланған бура булғандыр. Был ҡоролманан бик ҡалын ағас ҡатламы ҡалдыҡтары хасил булған, уны ҡаҙып таҙартҡанда бүрәнә һәм башҡа деталдәр табыла. Ҡоролма өҫтөнә ағас ботаҡтары түшәлеүе һәм ҙур ер өйөмө һалыныуы билдәле була. Ер өйөмө ҙур киҫәкле кәҫтәр һалынып яһалған. Ваҡыт уҙыу менән бүрәнә ҡатламы сереп бөтөп, ағас ҡоролма эсенә ер тулған, ҡурған өҫтөндә диаметры 40 метрға еткән соҡор барлыҡҡа килгән.

Ҡаҙыныу эштәре барышында ҡурғандың боронғо замандарҙа уҡ бер нисә тапҡыр таланыуы асыҡлана, быны ер өйөмөндә түбәнгә табан йүнәлтелгән һәм аҫтараҡ горизонталь траншеялар булыуы дәлилләй. Траншеяларҙың береһендә бейек төплө, күләме 60 - 80 литрлыҡ бронза ҡаҙандар табыла: күрәһең, соҡор ишелеп төшөп, бурҙар ҡиммәтле табыштарын сығарып өлгөрмәй ҡалған. Күп тапҡырҙар таланыуға ҡарамаҫтан, ҡәберҙә 1000-гә яҡын алтын предметтар: кес кенә муйынсаҡтарҙан алып ҙур әйберҙәрҙең фрагменттарына тиклем табыла. Улар араһында тармаҡлы мөгөҙлө ҙур болан һындары айырылып тора; һындарҙың бейеклеге 50 см тирәһе, кәүҙәһенең оҙонлоғо 25-30 см. Һындар ағастан һырлап эшләнгән, әммә алтын пластиналар менән ҡапланған. Болан һындарының мифик арбаға (йә иһә санаға) егелгән булыу ихтималлығы хаҡында археологтарҙың фаразы бар: вафат булыусы ошолай итеп теге донъяға күсә ала, тигән ҡараш булған.

Төп ҡәбер янында бөтөнләйгә көтөлмәгән йәшерен урын - ике ҙур булмаған соҡор ҡаҙып асыла. Уларға өҫкө яҡтан алтын пластиналар менән ҡапланған берәр ағас һандыҡ йәшерелгән була. Һандыҡтарҙа береһе эсенә икенсеһе һалынып ҡуйылған байтаҡ ҡына ағас кәсәләр, алтын һәм көмөш һауыт-һаба табыла. Ике тотҡалы алтын көршәкте донъя кимәлендәге шедеврҙар иҫәбенә индереп була: уның тотҡалары һикергән мәлдәге тау кәзәһенең һыны рәүешендә яһалған. Һәр бер ағас кәсә ҡойоп йә иһә сүкеп эшләнгән алтын тышлыҡ (ҡаплама) менән биҙәлгән. Тышлыҡтар "януар" стилендә эшләнгән һәм болан, дөйә, ҡош, һыбайлы һәм башҡа шундай һындарҙан хасил ителгән. Улар барыһы ла юғары кимәлдәге оҫталыҡ менән башҡарылған.



Филиппов ҡомартҡыһындағы 13-сө һанлы ҡурғандан РФА-ның профессор Л.Т. Яблонский етәкселегендәге Археология институты экспедицияһы мөһим өҫтәлмә материалдар таба. Ошо ҡурғандың диаметры 54-66 м, бейеклеге 3,5 м. Ҡурғандың үҙәгендә үлсәмдәре яҡынса 7,3х6,3 м, тәрәнлеге 214 см булған ҡәбер була. Элегерәк ҡаҙып асылған ҡурғандарҙағы кеүек, ҡәбергә илтеүсе оҙон коридор (дромос) була, ул трапеция рәүешендә төпкә табан төшә бара. Ҡәбер төбө кимәлендә төньяҡ-көнсығыштан һәм көньяҡ-көнбайыштан ҡәбергә ике оҙон коридор - ер аҫты юлдары һалынған, уларҙың тәғәйенләшен билдәләп булмай. Шундай уҡ ер аҫты коридорҙары беренсе Филиппов, Көньяҡ Ҡаҙағстандың Бесшатыр ҡурғандары буйынса ла билдәле, әммә тикшеренеүселәр уларҙың тәғәйенләнешен теүәл генә аңлата алмай. Был хаҡта бер нисә фараз бар: а) улар ҡәбер ҡаҙылған саҡта уҡ яһалып, вафат булыусының ырыуҙаштары ҡәбергә инеп йөрөй алһын өсөн төҙөлгән; б) улар ҡәберҙе талау өсөн эшләнгән, әммә был фараз менән күптәр килешмәй.



*14-се һүрәт. Йыртҡыстың аяҡтары һәм башы рәүешендәге алтын биҙәүес менән көпләнгән ағас кәсәләрҙең береһе. Филиппов ҡурғаны.*

Әйтергә кәрәк, шундай уҡ ер аҫты коридорҙары Мысыр (Египет) пирамидаларында ла бар, һәм улар үлгән кешен йәне менән аралашыу маҡсатында башҡарыла торған ниндәйҙер ғәмәлдәр өсөн тәғәйенләнгән. Ун өсөнсө ҡурған шулай уҡ таланған була, әммә унда ла шундай уҡ ҡыҙыҡлы әйберҙәр табыла: Урта диңгеҙ ювелирҙары ҡулы менән яһалған, алтын ялатылған көмөш кәсә, тимер ҡылыс, йәнлек башы төшөрөлгән һаҙаҡ элмәге, кейемгә тегелә торған алтын таҫмалар. Л.Т. Яблонский Филиппов ҡурғандары датаһын б.э. тиклем V-IV быуаттар менән билдәләй.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

МУЗЕЙ ҠОМАРТҠЫҺЫ

# САРМАТ ҠЫЛЫСЫ

**Ике бысаҡлы (двулезвийный) тимер ҡылысты Әбйәлил тарих-тыуған яҡты өйрәнеү музейының даими экспозицияһында "Археология" залында күрергә була. Иҫәп һаны: ОФ 2755. Ҡылыс 2009 йылда М.А. Илһамовтан һатып алынған.**



Ҡылыс Әбйәлил районы Ишкилде ауылы янында, юл төҙөгән саҡта осраҡлы рәүештә табып алынған. Археолог Ф.А. Сөнәғәтов тикшереүҙәре ваҡытында ҡылыс табылған урында диаметры 20, бейеклеге 1,5 метр булған емерелгән ҡурған булыуы асыҡланған. Уның аҫтында кеше һәм ат һөйәктәре, тимер ауыҙлыҡ, һөйәктән эшләнгән һөңгө осо һәм ике бысаҡлы ҡылыс табылған.

Ҡылыстың оҙонлоғо 0,96 метр.

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

**Белоруссия фронтының, 7-се гв. атлы корпусының, дивизия һәм полк командирҙарының бойороҡтарына ярашлы, дивизияның бер нисә йөҙ яугирына батырлыҡ өлгөләре күрһәткәндәре өсөн боевой орден һәм миҙалдар тапшырыла.** Белоруссия фронтының 1943 йылдың 13 октябрендәге ғәскәрҙәр буйынса бойороғо менән Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ булыусылар: 58-се гв. атлы полкының 4-се эскадронында взвод командиры булған гв. лейтенанты Алтынбаев Нурыбай Брали улы (Өфө ҡалаһынан); шул уҡ эскадрондың взвод командиры, гв. кесе лейтенанты Әхмәтшин Сиражетдин Ғизетдин улы (Ҡариҙел районы, Магинский леспромхозынан); дивизия политбүлеге начальнигы урынбаҫары, гв. майоры Ғәлимов Әхмәт Мөхәмәҙи улы (Әбйәлил районының Асҡар ауылынан); 58-се гв. атлы полкының миномет расчеты командиры, гв. сержанты Ғиззәтуллин Нәфиғулла Ғиззәтулла улы (Туймазы районының Аҙнағол ауылынан); 58-се гв. атлы полкының 4-се эскадронында ПТР взводы командиры булған гв. лейтенанты Ҡотоев Хөсәйен Муллаян улы (Баймаҡ районынан).

**Белоруссия фронтының 1943 йылдың 19 ноябрендәге бойороғо менән шулай уҡ Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнәләр:** 58-се гв. атлы полкының химия хеҙмәте начальнигы, гв. капитаны Әминев Хәниф Имамғәли улы (Бүздәк районының Ҡартамаҡ ауылынан) полктың 2-се, 3-сө, 4-се эскадрондарын Днепр йылғаһы аша сығарыуҙы тәьмин иткәне өсөн; 62-се гв. атлы полкының штаб начальнигы ярҙамсыһы, гв. өлкән лейтенанты Донсков Петр Агапович, ул быға тиклем Ҡыҙыл Йондоҙ орденына ла лайыҡ булған офицер (Ростов өлкәһенең Морозовский районынан); 60-сы гв. атлы полкының 1-се эскадроны командиры, гв. лейтенанты Колесников Петр Матвеевич (Наурская станцияһы, Краснодар крайынан) Нивки, Усохи, Галки ауылдары өсөн барған алыштарҙа разведка төркөмө менән оҫта етәкселек итә, 19 сентябрҙән 30 сентябргә тиклем барған бәрелеш-тәрҙә сафтан сыҡҡан эскадрон командирын алыштыра, дошман һөжүмен кире ҡағыуға булышлыҡ итә; 16-сы гв. атлы дивизияһының 14-се айырым сапер эскадроны командиры урынбаҫары, лейтенант Королев Дмитрий Михайлович (Тамбов өлкәһе, Знаменский районынан). Ул 25 - 29 сентябрь арауығында штурм һалдары һәм паромдары төҙөүгә етәкселек итә, дошман уты аҫтында һалдарҙы Днепр аша алып сыға; 60-сы гв. атлы полкы командирының строевой часть буйынса урынбаҫары, гв. капитаны Ғәзиев Рамазан Магомедович (Дагестан АССР-ы, Левочинский районынан, даргин) Чернигов өсөн барған алыштарҙа үҙен оҫта һәм ҡыйыу командир булараҡ таныта; 16-сы гв. атлы дивизияһының артиллерия командующийы, подполковник Вәлиев Мөнир Миндияр улы, ВКП(б) ағзаһы (Удмурт АССР-ы, Сарапул ҡалаһынан) дивизия артиллерияһының уты менән идара итеп, дошманды ауыр юғалтыуҙарға дусар итә; 58-се гв. атлы полкының штаб начальнигы ярҙамсыһы, гв. капитаны Чурмантаев Гүмәр Абдрахман улы ла Днепрҙы кискән саҡта яугирҙар менән ҡыйыу һәм тәүәккәл рәүештә етәкселек итә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Эйе, уларҙа бик һәйбәт техника, технологиялар бар ине. Әммә әлеге көндә беҙҙең Рәсәйҙә, шул иҫәптән Башҡортостанда, продукция етештереү кимәле буйынса Германия, Америка, Израилдән юғарыраҡ торған хужалыҡтар бар.*



# БЫЛ УҠЫУ

## ауыл еренә ҡайтырға

**Башҡорттарға баҫалҡылыҡ хас икәнен ураған һайын ҡабатлап тормағанда ла, был сифат һәр саҡ үҙен һиҙҙертә. Тәүҙә уларҙы әңгәмәгә ризалатып булмай, һуңынан бөтә нәмә тураһында һөйләргә ризалар, әммә үҙҙәре, ғаиләләре тураһында һөйләүҙән ҡырҡа баш тарталар. Бөгөнгө әңгәмәсем дә республикала билдәле, былтыр илдәге 54 аграр вуз ректоры араһында "Йыл ректоры" исеменә лайыҡ булған шәхес. "Был минең генә түгел, ә коллективымдың ҡаҙанышы", - тип кенә һүҙҙе икенсегә бора һала. Шул уҡ ваҡытта ул - профессор, техник фәндәр докторы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, Рәсәй Федерацияһы юғары мәктәбенең атҡаҙанған хеҙмәткәре, РФ ауыл хужалығы министрлығының Волга буйы федераль округы вуздарының ректорҙар советы рәйесе, әүҙем дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре. Хәйер, алма ағасынан йыраҡ төшмәй - уның атаһы ла республикала билдәле шәхес бит. Шулай итеп, редакциябыҙҙың бөгөнгө ҡунағы - Башҡорт дәүләт аграр университеты ректоры Илдар Исмәғил улы ҒӘБИТОВ.**

**Күптән ошо вазифала эшләйһегеҙ, заманында ошо юғары уҡыу йортон тамамлағанһығыҙ. Үҙегеҙ уҡыған осорҙағы аграр вуз менән хәҙергеһе араһында ниндәй айырма бар?**

- Мин бынан 40 йылдар самаһы элек - 1981-1986 йылдарҙа механика факультетында уҡыным. Ул ваҡытта беҙ социализм төҙөйбөҙ тип ышана инек, хәҙер формация икенсе төрләрәк. Тормош бит бер урында тормай, донъя үҙгәргән һыңғайы иҡтисад та, кеше лә, ауыл хужалығы ла үҙгәрә. Әлеге студенттарҙың белеме лә, бөгөнгө тормошҡа ҡарашы ла беҙҙекенән ныҡ айырыла. Элек идея бар ине. Хәҙерге көндә, ғаилә ҡиммәттәрен, борон-борондан килгән ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һаҡлап ҡалырға тырышыуҙы иҫәпкә алмағанда, патриотизмдан башҡа халыҡтарҙы берләштерер бер идея ла юҡ.

Сит илдәрҙә нимәләр ҡылланғандарын күреп торабыҙ - беҙгә бөтә Көнбайыш тигәндәй ҡаршы сыҡты. Дөрөҫөн әйткәндә, улар ғүмер буйы беҙҙе күрә алманы, хатта дуҫ булып күренергә тырышҡанда ла "һалҡын һуғыш" барҙы. Юҡҡа ғына император Александр Өсөнсө: "Рәсәйҙең ике генә дуҫы бар - уның армияһы һәм флоты", - тимәгән. Шуға ла беҙ үҙебеҙҙең яҙмышты үҙебеҙҙең ҡулға алып, үҙебеҙгә генә ышанып, балаларға ла шуны һеңдерергә тейеш булабыҙ.

Ошоларҙы күҙ уңында тотоп, яҡшы белемле белгестәр, илдең намыҫлы, ысын граждандың әҙерләү университет коллективы алдында төп маҡсат булып тора. Һәр кеше уҡыу йортона үҙенең һәләттәрен тормошҡа ашырыр өсөн килә. Профессиональ белем алыу менән эш бөтмәй. Мәҫәлән, ул ҡайҙа ғына эшкә урынлашмаһын, йәш белгескә өҫтәмә рәүештә ниндәйҙер саралар ойошторорға, үткәрергә ҡушалар. Шуға ла уҡыу йортон тамамлаған һәр кем төп эшенән тыш йәмәғәт эштәре менән дә шөғөлләнеп, үҙенең эргә-тирәһендәгеләрҙе позитивҡа көйләй, яҡшыраҡ йәшәүгә йүнәлтә алырға ла тейеш.

Тарихтан ҡараһаҡ, ауыл хужалығы һәр ваҡыт алдынғы производстволарҙың береһе булды һәм ул әле лә ошо позицияла нығына бара. Әммә күптәр уның үҙгәрештәрен ҡабул итергә теләмәй, сөнки улар ауыл кешеһен итек кейеп, бысраҡҡа батып, ауыр эш башҡарыусы итеп кенә күҙ алдына килтерә, әммә бөгөн ауыл да, унда йәшәүселәр ҙә улар күҙаллағанса түгел. Эйе, элек заманына күрә колхоздарҙа һәйбәт ине. Хәҙер технологиялар икенсе, совет осорондағы техника менән йөҙ кеше эшләгән эште хәҙер биш кеше башҡара ала. Теләйбеҙме, юҡмы, урбанизация бара, шуға беҙ ҙә элек университетта йылына йөҙ илле агроном, йөҙ етмеш инженер-механик әҙерләһәк, әле төрлө тармаҡтар буйынса тар, һирәк специальностар әҙерләүгә өҫтөнлөк бирәбеҙ.

**Ошо хаҡта ла ентекләберәк аңлатығыҙ әле - ауыл хужалығында бөгөн тар, йәғни һирәк булған белгес тип ниндәй һөнәр эйәләре иҫәпләнә?**

- Хәҙерге көндә ауыл ерендә төрлө хужалыҡтар бар: фермер хужалыҡтары, элекке һымаҡ колхоздар, шулай уҡ яңы эре холдингтар. Тап ошо холдингтарға махсус белгестәр кәрәк. Улар йә үҫемлектәрҙе һаҡлау буйынса инженер, йә ер эшкәртеүҙең аныҡ системаһы буйынса ғына инженер. Механик тигәндә, бөгөн бер кем дә ремонт менән шөғөлләнмәй, бөтә нәмәне компьютерға тоташтыраһың да, ул барыһын да күрһәтә һәм эштән сыҡҡан, ҡулланыуға бармаған частарҙы табып, һүтеп алаһың да ремонтҡа бирәһең. Ә элек бөтә нәмәне колхоз-совхоздарҙа механизаторҙармы, башҡа тармаҡ кешеләреме, үҙҙәре ремонтлай ҙа ҡуя ине. Хәҙер улай мөмкин түгел, сөнки төрлө-төрлө маркалы техника килә. Уларҙы ремонтлау өсөн тәүҙә уның нисек эшләгәнен аңларға тейешһең һәм шуға күрә ремонт менән махсус белгестәр шөғөлләнә.

Мал аҙығы әҙерләүгә килгәндә, мәҫәлән, элек һәр һыйырҙан йылына 3-5 мең литр һөт һауып ала инек, һәм был бик шәп күрһәткес булды. Хәҙер иһә йылына 10-12 мең литр һөт һауыу норма иҫәпләнә. Малдарға балансланған аҙыҡ бирелә. Мәҫәлән, кукурузды эрерәк йә вағыраҡ киҫәһеңме, уның сәкәнен шул көйөнсә, әллә ваҡлап ашатаһыңмы, аҙ ғына ферменттар ҡушып ебәрәһеңме - тар белгес ана шуларҙың барыһын да белергә тейеш. Ентекләп өйрәнә башлаһаң, һәр тармаҡтың үҙенсәлектәре бик күп. Ҙур холдингтарҙа 10-20 мең баш мал тотола. Уларҙа бер белгес мал аҙығын ҡарай һәм шуның өсөн яуаплы, икенсеһе - ошо бер төр малдың ауырыуҙары буйынса белгес һ.б. Ә элек колхоз-совхоздарға, бар төр малға, ҡош-ҡортҡа бер ветеринар әҙерләй инек. Агроном фермер хужалығында эшләй икән, яҡынса ул бөтөн нәмәне белергә тейеш, йәғни ул киң профилле белгес. Ә холдингтарҙа тупраҡты һаҡлау буйынса айырым, ашламалар буйынса - айырым агроном булырға тейеш. Сөнки бер культураға бер төрлө ашлама кәрәк, икенсеһенә - бөтөнләй икенсе төрлө. Шулай уҡ Башҡортостандың Урал аръяғында үҫкән игенде төньяҡ-көнсығышта үҫтереп булмай. Шундай нескәлектәр, үҙенсәлектәр күп һәм беҙҙең белгестәр ҙә шуларға яраҡлы әҙерләнә.

**Ауылдарҙағы фермер хужалыҡтар, әлбиттә, холдинг түгел, улай эшләй ҙә алмайҙар, әммә улар ҙа дәүләткә һалым түләй, уларҙың да файҙаһы ҙур. Ошо фермер хужалығын алып барыу өсөн белгестәр әҙерләнәме һеҙҙең уҡыу йортонда?**

- Фермер хужалыҡтарына килгәндә, уларҙы бөтә ерҙә ойоштоторға мөмкин һәм улар үҙенсәлекле продукциялар етештереүе менән өҫтөнлөклө лә, әммә фермерҙар эше бер ваҡытта ла еңел булманы. Хәҙер бөтә нәмә бар, муллыҡ заманы, әммә һәр кем магазинға барып, нимәлер алырға булһа, уның составын, сифатын тикшерә башлай. Фермер хужалығы продукцияһы ҡиммәтерәк, әммә улар тәбиғи һәм ошо ерлектәге продукциянан эшләнгән булыуы менән файҙалы. Ә бына ҙур холдингтарҙа, мәҫәлән, көнөнә 300 тонна һөт эшкәртелә, уларҙа сәнәғәт күләме һәм һөткә нимәләр ҡушылғанын да белеп булмай. Фермер үҙе ҡарап үҫтергән малының продукцияһын үҙенең исеменән һатыуға сығара һәм уның сифаты өсөн дә яуап бирә, шуға ла уларҙың продукцияһы сифатлыраҡ була икәненә ышанабыҙ.

Беҙ фермер хужалыҡтары өсөн кадрҙар әҙерләү программалары эшләйбеҙ, ләкин биш йыл буйына уҡытмайбыҙ, нигеҙ белем бирәбеҙ. Һуңынан инде улар эш йүнәлеше буйынса - һыйыр малы үҫтерәме, йылҡы тотамы, тауыҡ үрсетәме йәки ауыл хужалығы культураларын үҫтерәме - ентекле белем ала. Был йәһәттән БР Ауыл хужалығы министрлығы менән тығыҙ бәйләнештәбеҙ һәм улар республика буйынса мониторинг үткәреп торалар, һәр район хакимиәттәрендәге ауыл хужалығы өсөн яуаплы кешеләр менән берлектә эшләйҙәр һәм улар аша ла, үҙебеҙ ҙә беҙҙәге программалар тураһында мәғлүмәт еткерәбеҙ, ҡайҙа ниндәй белгес етмәгәнен асыҡлайбыҙ. Хәҙер бик һәйбәт "Фермер мәктәбе" тигән проект тормошҡа ашырыла. Әлеге ваҡытта ул Рәсәйҙә дүрт вузда ғына эшләй, иң беренсе булып беҙ индерҙек. Йәшерен-батырыны юҡ, ауыл хужалығында Хөкүмәт ярҙамы булмаһа, эшләп булмай. Шуға фермерҙарҙы уҡытыу буйынса БР Ауыл хужалығы министрлығы, Россельхозбанк дотация бирә. Һуңғы өс йылда барлығы 200-ләп фермер уҡытҡанбыҙҙыр. Белемгә һыуһағандарға, теләктәре булғандарға һәм бер ни тиклем һөҙөмтәгә өлгәшеп эшләгәндәргә беҙ ҙә ярҙам итергә тырышабыҙ.

**Рәсәйгә яңы алымдар, яңы техника индерелә башлағас, ауыл хужалығы белгестәре, район хакимиәттәре башлыҡтары сит илдәргә барып стажировка үтә торғайны. Хәҙерге санкциялар ваҡытында ошондай стажировка үтеү өсөн Рәсәйҙә ниндәйҙер бай һәм ныҡлы база бармы?**

- 90-сы йылдарҙа илдә, эйе, сит ил тәжрибәһе тип иҫебеҙ китеп ҡапландыҡ. Эйе, уларҙа бик һәйбәт техника, технологиялар бар ине. Әммә әлеге көндә беҙҙең Рәсәйҙә, шул иҫәптән Башҡортостанда, продукция етештереү кимәле буйынса Германия, Америка, Израилдән юғарыраҡ торған хужалыҡтар бар. Үҫемлекселек һәм малсылыҡ өсөн экологик хәүефһеҙ микробиологик препараттар һәм биоашламалар етештергән "Башинком" фәнни предприятиеһында, "Урожай" агрофирмаһында, "ЭкоНива" агрохолдингында, Бәләбәй һөт комбинатында - быларҙың барыһында ла бына тигән стажировка үтергә була. Хәҙер стажировка үтергә ҡайҙалыр ситкә ебәреүҙең кәрәге лә юҡ, сөнки уларҙа булған барлыҡ техника беҙҙә лә етештерелә. Сит илдәге кеүек заманса комбайндар Кубандағы заводта етештерелә, Германия технологияһы буйынса заманса сәсеү комплекстары Һамарҙа эшләнә, Омскиҙа Канада технологияһы буйынса "Кузбасс" сәсеү комплексы етештерелә. Беҙҙә лә Европа техникаһы кимәлендә эшләргә өйрәнделәр хәҙер.

**Әле күп ерҙәрҙә, бигерәк тә ауыл райондарында, совет заманында уҡыған кадрҙар эшләй. Заманса белем алған йәштәр ҡайтһа, улар бер-береһен аңлай аламы, сөнки уҡытыу программалары ла, эшләү технологиялары ла бөтөнләй икенсе төрлө бит. Уларҙың бер-береһен аңламаған осраҡтары килеп сыҡмаймы?**

- Алдынғы тәжрибәне ҡулланмаған хужалыҡтарҙың киләсәге юҡ. Хәҙер бөтә донъя цифрлаштырыуға күсә. Беҙ уҡытҡан агрономдар ҙа яландарҙың электрон картаһы аша ерҙәрҙең сиктәрен, уңыш нисек булырын билдәләп була торған планшет, хатта беспилотник менән эш итә. Бөгөнгө студенттарыбыҙҙың барыһы ла иҫәптә, барыһы ла иң алдынғы хужалыҡтарҙа эш хаҡы алып практика үтәләр. Был нимәне аңлата: уҡыу йортоноң производство практикаһы танытмаһы булмаһа, уның сығарылыш студенттары һуңынан бер хужалыҡҡа ла эшкә урынлаша алмай. Бөгөн механизаторҙар, геодезистар, электриктарға һорау ҙур. Уларҙы икенсе курстан һуң хужалыҡтар үҙҙәренә практикаға саҡыра ла, шунда уҡ хеҙмәт кенә-

***Алдынғы тәжрибәне ҡулланмаған хужалыҡтарҙың киләсәге юҡ. Хәҙер бөтә донъя цифрлаштырыуға күсә. Беҙ уҡытҡан агрономдар ҙа яландарҙың электрон картаһы аша ерҙәрҙең сиктәрен, уңыш нисек булырын билдәләп була торған планшет, хатта беспилотник менән эш итә. Бөгөнгө студенттарыбыҙҙың барыһы ла иҫәптә, барыһы ла иң алдынғы хужалыҡтарҙа эш хаҡы алып практика үтәләр. Был нимәне аңлата: уҡыу йортоноң производство практикаһы танытмаһы булмаһа, уның сығарылыш студенттары һуңынан бер хужалыҡҡа ла эшкә урынлаша алмай.***

*✓ Илдә ниндәй алдынғы ҡаҙаныш бар - шуларҙың барыһын да үҙебеҙҙең юғары уҡыу йортона индерергә, булдырырға тырышабыҙ. Эйе, етәксе булыу - ул тынысланып, бүлмәндә креслола эш ҡушып ултырыу ғына түгел...*

гәһе асып, эш хаҡы түләй. Һәм студент киләһе йылдарҙа ла шул уҡ хужалыҡта практика үтә ала.

**Һеҙҙең вузда сит ил студенттары ла белем ала...**

- Барлығы өс йөҙләп сит ил студенты белем ала, нигеҙҙә БДБ дәүләттәренән. Квота буйынса Африканан, Азиянан 20-25 тирәһе кеше бар.

**Әңгәмә башында студенттарҙы белгес итеп кенә түгел, ә был йәмғиәттә юғалып ҡалмаҫлыҡ, һәр йәһәттән үҫешкән шәхес итеп тәрбиәләүҙе билдәләп киттегеҙ. Был юҫыҡта уҡыу йортонда ниндәй эш алып барыла?**

- Бөгөн беҙҙең университетта 32 спорт секцияһы, мәҙәниәт буйынса 18 түңәрәк бар. Башҡа уҡыу йорттарынан айырмалы, Йәштәр һарайы тип аталған мәҙәниәт усағыбыҙ бар. Спорт буйынса республикала ғына түгел, Рәсәйҙә алдынғы урындабыҙ. Студенттар араһында хатта донъя чемпиондары ла бар, волейбол командаһы Рәсәйҙә беренсе булып танылды. Ғөмүмән, спортҡа элек-электән ҙур иғтибар бирәбеҙ.

Художестволы үҙешмәкәрлек буйынса ла республикала алдынғы ансамблдәребеҙ бар. Улар хөкүмәт концерттарында даими сығыш яһай. Төрлө түңәрәктәр, секциялар, башҡа тәрбиәүи саралар аша студенттарҙың энергияһын дөрөҫ йүнәлешкә борорға тырышабыҙ, сөнки уларҙың күбеһе ятаҡтарҙа йәшәй, буш ваҡыттарын файҙалы шөғөлдәр менән тулыландырмаһаҡ, икенсе йоғонтоға бирелергә генә торалар.

**Һеҙ ауыл ерендә тыуған кеше, тамырҙарығыҙ барыбер ауылға барып тоташа. Ҡайҙа үҙегеҙҙе уңайлыраҡ тояһығыҙ?**

- Мәктәптә уҡыған ваҡытта ғына Белорет, Бөрйән, Күгәрсен, Хәйбулла райондарында йәшәргә тура килде һәм, ниһайәт, Өфө ҡалаһында төпләндек. Хәҙерге көндә, моғайын, мин республика кешеһемендер, тим, сөнки аграр уҡыу йорто етәксеһе булараҡ, Ауыл хужалығы министрлығы райондарҙа үткәргән барлыҡ сараларҙа ҡатнашырға тура килә һәм барлыҡ райондарҙы йөрөп сыҡҡанмын, ҡайҙа барһам да иптәштәр, таныштар, дуҫтар бар. Икенсе яҡтан, беҙҙең уҡыу йорто әҙерләгән белгестәр ауылда эшләргә тейеш, шуға уларҙың фекерҙәрен белеп, улар менән бергә производстволар буйлап йөрөп, республикала ауыл хужалығының үҫеше, халыҡтың йәшәйеше тураһында ла белергә тейешмен. Был да минең бурысым. Ауыл хужалығына бәйле булып та, урындағы хәлдәрҙе белмәһәң, ауылдан алыҫ торһаң, уңышлы һәм һөҙөмтәле эшләп булмай. Шуға ла мин үҙемде ауыл ерендә һәр саҡ уңайлы, үҙ кеше итеп тоям.

**Етәксе кеше булмағанды табырға, һәр кешенең проблемаһын хәл итергә, ғөмүмән, коллективтың нисек тын алыуын белеп-һиҙеп торорға тейешле ойоштороусы ла бит инде. Ошо йәһәттән һеҙ ниндәй бурыстарҙы алғы планға сығараһығыҙ?**

- Бөгөнгө көндә минең төп бурыс - белем алырға килгән йәштәрҙең, балаларын беҙгә ышанып ебәргән ата-әсәләрҙең ышанысын аҡлау. Шуға күрә беҙ, берҙән, заманса юғары белем бирерлек, студенттар менән уртаҡ тел таба алған квалификациялы уҡытыусылар коллективы тупларға тейешбеҙ. Был йәһәттән күңел тыныс: беҙҙә уҡытыусы кадрҙары бик яҡшы тип әйтә алам. Шул уҡ ваҡытта ныҡлы матди-техник база, заман талаптарына яуап биргән техника, ҡорамалдар тураһында хәстәрләү ҙә беҙҙең мөһим бурыс. Эйе, етәксе кешенең иңендә инде барыһы ла. Мәсәлән, уҡыу йортонда эшләүсе уҡытыусыны, башҡа хеҙмәткәрҙе, барыһы өсөн дә уңайлы эш урыны һәм шарттары булдырылырға тейеш. Әгәр аудиторияларҙа ел уйнап торһа, студенттарың өсөн ятаҡта урын етмәһә, улар үҙенең күңеленә ятҡан шөғөл менән шөғөлләнер урын тапмаһа - бында, тәү сиратта, етәксе яуаплы.

Республика етәкселеге гелән тылҡып торғанса, йылдан-йыл, көндән-көн беҙҙең тормош яҡшырырға, уңайлы шарттар булдырылырға тейеш. Беҙ университетта министрҙарҙы, шулай уҡ илдәге 54 аграр уҡыу йорттары ректорҙарын саҡырып, төрлө саралар уҙғарабыҙ, тәжрибә уртаҡлашабыҙ икән, тимәк, уртаҡлашыр тәжрибә генә түгел, һис тә оялмай күрһәтә торған шарттарыбыҙ ҙа, ҡаҙаныштарыбыҙ ҙа бар, тигән һүҙ. Яуланған үрҙәр менән тынысланып ултырырға ярамай, әлбиттә, илдә ниндәй алдынғы ҡаҙаныш бар - шуларҙың барыһын да үҙебеҙҙең юғары уҡыу йортона индерергә, булдырырға тырышабыҙ. Эйе, етәксе булыу - ул тынысланып, бүлмәндә креслола эш ҡушып ултырыу түгел, ул - заман менән бергә атлау һәм яңы ҡаҙаныштар яулау өсөн көрәш.

# ЙОРТОНА...

## теләгән егет-ҡыҙҙар килә



> *Бөгөнгө көндә минең төп бурыс - белем алырға килгән йәштәрҙең, балаларын беҙгә ышанып ебәргән ата-әсәләрҙең ышанысын аҡлау. Шуға күрә беҙ, берҙән, заманса юғары белем бирерлек, студенттар менән уртаҡ тел таба алған квалификациялы уҡытыусылар коллективы тупларға тейешбеҙ. Был йәһәттән күңел тыныс: беҙҙә уҡытыусы кадрҙары бик яҡшы тип әйтә алам. Шул уҡ ваҡытта ныҡлы матди-техник база, заман талаптарына яуап биргән техника, ҡорамалдар тураһында хәстәрләү ҙә беҙҙең мөһим бурыс.*

**Аңлы кеше, ғәҙәттә, йылдар үтә килә камиллаша, характерындағы ниндәйҙер һыҙаттарҙы үҙгәртә, нимәгәлер яраҡлаша бара. Үҙтәрбиә тиҙәр инде быны. Ә һеҙҙең характерҙа ниндәйерәк үҙгәрештәр бара?**

- Олоғая бара кеше тынысыраҡҡа әйләнә. Элегерәк ҡыҙыуыраҡ булһыңа, хәҙер уйлаңҡырайһың; йәш саҡта, һайт, тигәнгә, тайт, тип торһаң, хәҙер улайтмайһың.

**Өлкән быуын йәш быуынды үҙе менән сағыштырырға, хатта тәнҡитләргә ярата инде. Ә һеҙ нисәмә йылдар нисәмә быуын йәштәр менән эшләйһегеҙ һәм бөгөнгө йәштәргә ниндәй ҡылыҡһырлама бирер инегеҙ?**

- Атайҙар һәм балалар проблемаһы һәр ваҡытта ла булды, бар һәм буласаҡ. Ә минең шәхси фекеремсә, бөгөнгө балалар - үҙ фекерен, үҙ уйҙарын ныҡлы, төплө итеп әйтә һәм уны яҡлай белә. Улар менән "мин - начальник, һин - буйһоноусы", йәки "мин - оло, һин - йәш" һ.б. ошондай йүнәлештә, ошондай тонда һөйләшеү мөмкин түгел. Быны насар йәки яҡшы тип кенә баһалап булмай, минемсә, үҙенең фекерен әйтеп, уны яҡлау - яҡшы. Студенттарҙың шундай ҡарашы барыбер һәйбәт, сөнки уҡытыусылар ҙа мин дөрөҫ йүнәлеш, дөрөҫ белем бирәмме икән, тип уйлана башлай.

Ҡайһы ваҡыт студенттарҙың һорауҙары оҙаҡ йылдар эшләгән уҡытыусыларҙы ла яуапһыҙ ҡалдыра. Ундай ваҡытта шәхсән үҙем: "Мин дә барыһын да белеп бөтмәйем, шуға был мәсьәлә йәки һорау буйынса киләһе лекцияла ныҡлы, төплө яуап бирермен, әле яуап бирә алмайым", - тип, дөрөҫөн әйтәм. Бер яҡтары ғына хәүефләндерә, уйландыра: улар һаулыҡ йәһәтенән беҙҙән ҡалыша, физик эшкә өйрәнмәгәндәр, ялҡауыраҡтар. 1-се курсҡа килеүселәрҙең 50 процентының ниндәйҙер сәләмәтлек буйынса сикләүе була. Ә аҡыл йәһәтенән баштары эшләй, кибербалалар - цифрлы технологияларҙы яҡшы беләләр. Донъя шуға табан китеп барғас, был яҡшыраҡтыр тип уйлайым. Улар лекцияла тема буйынса һөйләмәгәнендә белеп йәки һиҙеп ҡалһа, тыңлап та тормай, тороп сығып китергә лә мөмкиндәр. Был шулай булырға тейеш тә, әгәр уҡытыусы теманы аңлата белмәһә йәки ваҡыт үтһен өсөн генә йөрөһә, студент ни өсөн уның лекцияһында ваҡытын әрәм итеп ултырырға тейеш? Улар хатта үҙҙәренә нимә ҡыҙыҡ һәм нимә белгеләре килә, шул темаларҙы һорайҙар, ниндәйҙер темаға ныҡлы, ентеклерәк өйрәнгеләре килә. Шул яҡтары һәйбәт.

**Башҡортостан элек-электән сәнәғәт һәм ауыл хужалығы үҫешкән төбәк булды, халыҡтың ҙа күпселеге ауыл ерендә йәшәй ине. Хәҙер халыҡ исәбен алған һайын ауылда йәшәүселәр һаны кәмей бара. Ә бына ауылдарҙы нисек итеп тергеҙеп була? Ғөмүмән, уны тергеҙеү кәрәкме?**

- Бөгөн урбанизациянан бер ҡайҙа ла ҡасып булмай. Ауылдарҙа халыҡтың күп булыуы ла кәрәкмәй. Республикала 37 процент халыҡ ауылда йәшәй һәм беҙ Рәсәй буйынса ауыл халҡы күп булған төбәктәрҙең береһе. Татарстанда был күрһәткес - 25, Силәбе, Свердловск өлкәләрендә 16 процент. Теләйбеҙме, теләмәйбеҙме, яйлап ауылдар һаны кәмейәсәк. Хеҙмәт етештереүсәнлеге ҡеүәтләнеүе халыҡты агломерацияларға, ҡалаға яҡыныраҡ ерҙәргә күсенергә мәжбүр итәсәк. Йәғни ауылдарҙан халыҡ район үҙәктәренә, район үҙәктәренән ҡалаға ағыласаҡ. Ауылдар кәмеһә лә, ауыл райондары барыбер ҡала. Район үҙәктәрендә эш табырға була һәм 30 километр араға йөрөп эшләү ҙә бер ни түгел. Элек беҙ Бөрйәндә Ғәлиәкбәр ауылынан район үҙәгенә 3 сәғәт бара инек. Хәҙерге көндә юлдар бына тигән.

Шул уҡ ваҡытта беҙҙең уҡыу йорто ла хәҙер ауыл хужалығында ниндәй тармаҡтар бар - бөтә йүнәлештәр буйынса ла белгестәр әҙерләй. Әлеге көндә ауылдан килеп, ауылға кире ҡайтыу ихтималлығы беҙҙең вуз студенттарында ҙурыраҡ. Башҡа уҡыу йорттарын тамамлаусылар кире ауылға ҡайтырға бик тырышмай. Шуға беҙгә ауыл еренә ҡайтырға теләгән егет-ҡыҙҙар уҡырға инә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Әгәр фән юлынан китмәһәгеҙ, фән кандидаты, доктор, ректор баҫҡыстарын үтмәһәгеҙ, үҙегеҙгә ниндәй һөнәр һайлар һәм ниндәй өлкәлә эшләр инегеҙ?" - тел осонда торған ошо һорау ҙа бирелде Илдар Исмәғил улына. "Яраткан һөнәреңде һайла һәм һин бер көн дә эшләмәйәсәкһең", тиҙәр бит, йәғни яраткан эшең һиңә ауыр булып күренмәйәсәк, киреһенсә, һин уны башҡарғанда ваҡыттың үткәнен дә тоймаясаҡһың, хатта эшләгән кеүек тә булмаясаҡһың. Мин һәр саҡ йәштәр араһында булдым, комсомолда ла эшләнем, теләһә ниндәй техниканы биш бармағым кеүек беләм. Шуға барыбер ҙә йәштәр менән эшләр, йә инженер булыр инем. Ғөмүмән, ниндәй генә профессия һайлаһам да, техника менән булышыр инем, тип уйлайым. Техника араһында эш башлар инем дә, артабан барыбер был тормошта үҙ урынымды табыр инем", - тине ул. Бер һүҙ менән әйткәндә, ул барыбер йәштәрҙең остазы булыр ине.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

***✓ Ятһа ла, торһа ла, сығып йөрөһә лә бер үҙе, күҙгә элеүсе, уға иғтибар итеүсе юҡ, хас та кәрәге бөткән, туҙған, эшлектән сыҡҡан әйбер. Халҡы урамдарына һыймаған ҡалала япа-яңғыҙың ҡалыу бигерәк ҡурҡыныс икән.***



**Хәйҙәр ТАПАҠОВ**

# ТАБЫЛДЫҠ

хикәйә

Мозафар гел шулай иртә, таң тишегенән, офоҡ ситенә таң ойотҡоһо ҡуңыр-ҡуңмаҫтан тора. Бөгөн дә ғәҙәтенсә һиҫкәнеп уянды ла бер килке түшәгендә әйләнгеләп ятты, шунан иҫке курткаһын яурындарына һалып, аяҡтарына таушалып бөткән шипатайҙарын кейеп, балконға сығып, кисә ятырҙан алда тартып, тәҙрә ҡашағаһында ҡалдырған тәмәке төпсөгөн ҡабып, яңынан тоҡандырҙы, тәрән итеп һурҙы. Ағыулы төтөн тын буйын хәтәр әсетеп ебәрҙе. Һул ҡулы менән түшен ҡармап, быуылып йөтәлләне. Шунан ҡарашын уң ҡулда офоҡта тимгелләнеп күренгән тау һыртына ҡарай йүнәлтте. Киртләстәр әлегә беленеп һыҙатланмаған, тимәк, таң атыу түгел, һыҙылмаған да әле.

Күп ҡатлы йөйөм ятаҡ иҫәпләнгән йорттоң өсөнсө ҡатында йәшәп ята ул, дөрөҫөрәге, тереклек итә. Ҡыҫынҡы ғына, түшәм-стеналарын туҙан баҫҡан, иҙәненә күп йылдар буяҡ яғылмаған, бушаған таҡталары баҫҡан һайын ауыр шығырҙаған бер бүлмәлә. Серей башлаған екле тәҙрә рамы сатнаған быялаларынан ҡояш нурҙарын һаран үткәрһә лә шыпа ла ғына йылы тотмай. Уйымға кыш көндәре одеял эленә, йәй башынан көҙгәсә тәҙрә гәзит менән ҡаплана, уныһы инде бара-тора ялҡында көйҙөрөлгәндәй һапһары төҫкә инә. Аш урыны ла юҡ бында, йыуыныу урыны ла, бәҙрәф оҙон коридорҙың теге осонда, уның ҡарауы, бына ошо тар балконы бар, ваҡыт-ваҡыт сығып, бар тирә-йүнде тамаша ҡылырлыҡ, көпһөҙ, саба еле, яуым-төшөмә үтәләй һуҡҡан балкон йораты. Ул әйбер һаҡлау урыны ла иҫәпләнә, мәгәр һаҡлар нимәһе юҡ, кәрәкмәгән ҡыйғыпыр бер яҡ ситтә өйөлөп ята шунда. Йәнәш ҡалҡҡан ике йорт араһына тимер ҡалайҙарҙан ҡыйыҡлы өҡәлтәк рәүешен әтмәләп, эсенә оло пластик һауыттар ҡуйып, сүп-сар һалыу урыны эшләп ҡуйғандар. Һалҡындарҙа һиҙелмәй, әммә йәйге селлә осоронда ошо урын тирә-йүнгә тын алғыһыҙ ауыр еҫ тарата. Әле шул яҡтан нәҙек кенә итеп сыйнаған тауыш сағылды ҡолағына. Берәйһе эт көсөгөн, йә бесәй балаһын сығарып ырғытҡандыр. "Әҙәм балаһы ҡанһыҙға, миһырбанһыҙға әүерелде, емереү, ташлау, сығарып ырғытыу ғына түгел, йән ҡыйыу гәзәти, күнегелгән күренеш хәҙер..."

Мозафар төпсөктө ирендәрен бешерә башлағансы һурҙы ла түбәнгә быраҡтырҙы. Шунан, инеп, кире түшәгендә һуйҙайҙы. Бына шулай яңғыҙы йәшәп ятҡан көнө. Ҡатыны бар ине. Зәбирә исемле, мәктәптә уны ололап Зәбирә Кәбировна, тип йөрөттөләр. Башланғыс кластарҙа эшләне ғүмере буйы, "Мәғариф алдынғыһы" тигән билдәһе лә бар ине. Ә ул инде хеҙмәт юлының башынан алып аҙағынаса машина рулен борғоланы, бар белгән шөғөлө шул. Башта, йәшерәк саҡта комбинатта "Белаз"да йөрөнө, һуңынан ҡарыуы ҡайта төшкәс, коммуналь хужалыҡҡа, ваҡ-төйәк йөк ташыусы, туҙыуы еткән, көн һайын тиерлек ваҡ ремонт талап иткән автомобилгә күсте, ары - пенсия. Минималканан саҡ ҡына юғарыраҡ пенсия тәғәйенләнде, уға ла, ҡатынына ла. Йәшерәк саҡта матур, йәмле, татыу йәшәнеләр. Аҡсалы саҡта ҡала үҙәгенән дүрт бүлмәле фатир, заманына күрә күрмәлекле иҫәпләнгән йорт ҡаралтылары һатып алдылар, тик балалары ғына булманы. Ғәйеп кемеһендә булғандыр, мәгәр асыҡламанылар ҙа, кәрәк тә тапманылар. Шунан көтмәгәндә ҡатыны ҡаты сирләп китте, ирип кесерәйгән майшәм рәүешле күҙ алдында һүнә, кибә башланы. Башта ҡала дауаханаһына һалдылар, шунан рәт сығара алмай, апаруҡ мәшәҡәтләнделәр ҙә, ауырыуҙың хәле яҡшырмағас, баш ҡаланың үҙенә оҙаттылар. Баҙар шарттарында бар донъя менән аҡса хакимлыҡ итә бит, шул көҙрәтле бол кәрәк мәлдә кәрәк кешенең усына һалынмаһа, бармаҡ ҡыбырлатыусы ла табылмаҫ. Ошоғаса төйнәгән аҡсалары ҡат-ҡат тикшерелеүгә, осһоҙ-ҡырыйһыҙ түләүле анализдар тапшырыуға, шунан дауалар һатып алыуға китте, тик һиҙелеп алға китеш кенә тойомланманы. Аптырағас, дүрт бүлмәлене өсәүгә алмаштырҙылар, өсәү бер аҙҙан икеүгә ҡалды. Унан килгән аҡсалар ҙа төпһөҙ ҡоҙоҡҡа төшкән ише файҙаһыҙға юғалдылар.

Зәбирә ике ҡала араһын оҙаҡ таҡырланы, һуңғы осорҙа хәле үтә ҡырҡыуланғас, ҡабаттан онкодиспансерға оҙаттылар. Киткәндең өсөнсө көнөнә артынан юлланды. Ҡатынын бәләкәй генә, бер караүат һыймалы палатаға һалып ҡуйғандар. Тәҙрә янында кер йыуыу машинаһына тартым аппаратура, стенаға шнурҙары сеймәлеп һалынған ҡулайлама беркетҡәндәр. Дарыуҙарҙың ҡырҡыу еҫе, хлорка танау тишектәрен ярып алып бара. Зәбирәнең йөҙө һары, юҡ, аҡһыл аллюминий төҫөнә ингән. Йәнһеҙ шул йөҙҙә ҡара ҡаштар, сал ҡунған сәстәр, ҡан ҡасҡан ирендәр бермә-бер айырым асыҡ күренә. Мозафар тотоп килгән күстәнәсен тумбочка ҡырына ҡуйҙы ла палаталағы берҙән-бер ултырғысты тартып, ҡатынының эргәһенә ултырҙы. Өнһөҙ-һүҙһеҙ бер килке сукайыштылар. Ул да һорау билдәһеләй бөгөлөп төшкән, әйтер һүҙҙәре онотолған. Ярымлы итеп өндәшә лә, йыуата ла алмай. Ошо хәлдә нимә тип кенә йыуатаһың инде? Зәбирә һоноло, уның ҡулын үҙенә тартты, тилмереп күҙҙәренә ҡараны:

- Нисек кенә йәшәп ятаһың әле, Мозафарым? - Һәр ваҡыттағыса наҙлы итеп өндәште.

- Арыу. Бер көйө генә.

- Арыулығын һиҙеп, тойоп ятам, мин эргәңдә ултырмаһам, ашамайһың да, әсмәйһең дә бит һин, ана ҡайһылай мөҙөрөп киткәнһең.

- Тамаҡҡа аш үтмәй шул.

- Мин сирләгәнгә ашай алмайым, ә һин бит сағыштырмаса сәләмәт, шулай булғас көслөнкерәп булһа ла ҡабыштырырға кәрәк. Ирҙәр бит ашау көсө менән йөрөй.

- Тырышырмын. Үҙең һуң?

- Иртәгә операция. Йөрәгең шәптән түгел, тинеләр, әммә тәүәккәлләп ҡарарға хәл итте дауалаусы профессор. Нисек кенә булһа ла ризалаштым мин дә, тырмалашып, ҡырталашып ҡарайым әле, бәлки... Әле сығышлай шул врачымды күреп, операцияға ризалығыңды белдереп, юридик документҡа ҡул ҡуй, башҡаса сара юҡ...

- Әллә тим, берәй әбейгә күренеп ҡарайһыңмы? Бәлки, ярҙамы тейер. Баймаҡ районы Йылым ауылында ауырыуҙы өшкөрөп аяҡҡа баҫтырыусы бер ҡарт тураһында ишетеп ҡалғайным.

- Ауырыһаң, имсе күбәйә, тиҙәр.

- Аптыраған көндән әйтеүем, тағы, низнай...

Ҡайтманы, ҡатынын бысаҡ аҫтында яңғыҙын ҡалдырғыһы килмәне, "Агиҙел" ҡунаҡханаһында ҡунырға ҡалды. Иртәгеһен операция өҫтәлендә үлеп ҡалды Зәбирәһе. Барлы-юҡлы аҡсаһына транспорт яллап алып ҡайтыу, ерләү мәшәҡәттәре ҡурҡыныс төш һымаҡ хәтерендә ҡалған. Уның өсөн бар донъя төҫһөҙләнеп, булмышы шаңғырап бушап ҡалғандай итте. Өсөн, етеһен, ҡырҡын ҡала ашханаһына йыйып уҡытты. Йыназаға башлыса Зәбирәнең туғандары, мәктәптәге элекке хеҙмәттәштәре, күрше-күлән килде. Уның яғынан ниндәй генә ағай-эне булһын инде, ул бит детдом балаһы. Зәбирәнең яҡындары яйын тап килтереп, ярҙам итеп торорға, ташламаҫҡа вәғәҙәләгән булдылар. Ҡайҙа инде, ярҙам итеү түгел, шылтыратып хәлде белергә лә онотолар аҙаҡ.

Ятһа ла, торһа ла, сығып йөрөһә лә бер үҙе, күҙгә элеүсе, уға иғтибар итеүсе юҡ, хас та кәрәге бөткән, туҙған, эшлектән сыҡҡан әйбер. Халҡы урамдарына һыймаған ҡалала япа-яңғыҙың ҡалыу бигерәк ҡурҡыныс икән, абынғанда таяныс, сирләгәндә хәләнә инерҙәй кешеңдең янында булмауы оло фажиғә икәнлеген ҡатынын юғалтҡас ҡына бар тәрәнлегендә төшөндө. Тормошоноң йәме, ашының тәме китте. Эсештергеләй башланы: башта тамағыма аш үтһен тип, ары ҡотһоҙ көн тиҙерәк үтһен тип, һуңғараҡ ауыр уйҙар сигенһен, онотолһон тип. Ҡайғыһы хәсрәт сылбырына ялғанды шулай. Бар алған пенсияһы квартплата түләүгә, наҡыҫ аҙыҡ-түлек һатып алыуға китә, ә ҡалғаны инде... араҡыға, хәмергә. Екһендергес көнө лә сәй эсеүҙән түгел, башын төҙәтеү уйынан һыра һемереүҙән башлана. Янында ҡойто кейенгән әшнәләр пәйҙә булды. Улар сер һөйләшеп эс бушатыуҙан, кәңәш-төңәш итеүҙең ни икәнен дә белмәйҙәр, бар тырышлыҡтары темеҫкенеп араҡы эҙләү ҙә, тапҡанын сәкәштереп йотоу. Хәбәр һөйләшмәй генә, өҙөк-йыртыҡ өндәшеп, ымлашып тиерлек аралашалар ҙа, йөктәре тулһа, кемеһе ҡайҙа етте, шунда иҫереп тәгәрәй. Иртәгеһен ошо йәмһеҙ табын тағы ҡабатлана, тағы...

Бер көн ошо мәнһеҙ, мәғәнәһеҙ ҡорҙа арыу ғына кейенгән, быҙау муйынсаһына оҡшаш галстук таҡҡан йәш ир күренде: һөйләшеүгә лә теле телгә йоҡмай, үҙен зыялы ҡиәфәттә тота, мөғәмәләһе лә ипле. Ни сәбәптәндер был шылғаяҡ ир баштан уҡ уға һырпаланды, төпсөр хәбәре менән эс-бауырға инеп бара:

- Һеҙҙең Мозафар исемле икәнегеҙҙе ишетеп ултырам. Таныш булайыҡ, мине Дауыт, тиҙәр, Дауыт Хәйруллович.

- Дауытһың да икән, ти, дальше што, я с тобой свиней не пас!

Яңы танышы көлкөһө килмәһә лә быжыр йөҙөн арҡырыға йәйелдереп, бер-берсенә тоташып үҫкән ҡаштарын туғарландырып көлөп ебәрҙе:

- Вы абсолютно правы. Шулай ҙа танышыу, близкое знакомство необходимо, бер килеп ярҙамымдың тейеп ҡуйыуы ла бар.

- Ярҙам, тиһеңме? Баш сатнаған мәлдәрҙә эсергә булашһаң, шул еткән.

- Нишләп эсергә генә ти, закондарҙы белеү, таныу йәһәтенән дә белемле кешенең эргәлә йөрөүе иногда помогает. Юрист дипломым бар, шулай ҙа алыпһатар һөнәрен һайланым, предприниматель значит, аяҡ кейемдәре менән һатыу итәм, ҡалала ике магазиным да бар.

- Юғары белемле спекулянт, әләйгәс?

- Шулайыраҡ. Сауҙа өлкәһенә эшләүе еңелдән түгел, бөгөн уңышҡа юлыҡһаң, иртәгеһенә инде янаыуың бар, причем дотла.

- Нинә ул хаҡта тубытаһың әле, кемгә һәм нимәгә кәрәк һинең баш ауырыуың? Суфый түгелһеңдер ҙә, эс!

Мозафар алдындағы буҙ шыйыҡса ҡойолған стаканды алды ла сәкәштереп тә маташмай, ауыҙына түңкәрҙе, ғәҙәт иткәнсә, йотоп та мәшәҡәтләнмәне. Дауыт уға әйәреп эсмәне, ҡулындағы һауытын сытырая бирерәк ситкә ҡуйҙы ла хәбәрен дауам итте:

- Абзый, твое жилище, арыу ғына бит, ә? - Хәйләкәр ҡарашы менән фатир эсен теүәлләп, ҡаш аҫтынан һөҙөп ҡараны. - Иркен, яҡты, артыҡ юғарыла ла түгел, икенсе ҡат. Ә минеке һиңеҙенсәлә бер бүлмәле генә фатир. Өс бала, бисә, өҫтәүенә әсәйем. Нисә йыл шул ҡыҫынҡылыҡта йонсола инде...

- Коммерсантмын, тиһең дә баһа, нишләп улай хәйерселеккә төштөң?

- Әйтәм бит, бер нисек тә аҡса еткереп булмай. Булған аҡсаһы ла әйләнештә йөрөй, яңы тауар һатып алыуға китә, торговля эта - мельничная камень которая без зерна крутится впустую, в холостую!

- Улайһа, ташла сауҙаны, ауылға күсеп бар, ер һөр, сәс, ур, тамағың да туйып ҡалыр, башҡаларға ла өлөш сығыр.

- Һеҙ нимә, мин бит ҡалала тыуғанмын, үҫкәнмен, ер эшен бөтөнләй белмәйем.

- Ә һин бар, самалап ҡара, өйрәнерһең, айыу балаһын да бейергә өйрәтәләр.

- Был йәшкә еткәс, жизнь уже не изменишь, судьбу не перезагрузишь.

- Бына быныһы хаҡ, тормош тигәнең - ормош.

- Тағы беҙҙең яҡта засуха нисәнсе йыл, иген түгел, бесән дә үҫмәй. Ә пенсияны күпме алаһығыҙ әле һеҙ?

- Үҙемә етерлек!

- Үҙенә етерлек булғас, квартплата түләүҙән артмайҙыр, ә?

- Унда һинең эшең булмаһын, йәме, мырҙа! - Ул ярайһы уҡ тупаҫ яуапланы ла ҡырлы стаканға ҡайтанан үрелде. - Алдыңдағы менән бул, кеше хәсрәтенә тығылма һис ҡасан, много будешь знать быстро состаришься!

- Ғәфү, берүк ғәфү, абзый, мин ни әңгәмә араһында ғына, һүҙ булмағанда һүҙ булһын тигәндәй...

Бер нисә көндән әшнәләре менән бүлмәһендә йәнә табын ҡорҙо Мозафар. Ни сәбәптәндер, теге ир генә күренмәне, хәйер, ул эскеселәр ҡорон өнәмәй, һиҙемләүенсә, үҙенең йомоштарын йомошлап ҡына күренгеләп китеүе. Тәгәрәгәнсе эстеләр. Иртәгеһен күҙҙәрен асҡанда бүлмә бушап ҡалғайны, урталыҡтағы өҫтәлдә икмәк ҡаҡтары сәселеп ята, буш шешәләр һерәйгән, иҙән тулы төпсөк. Арыраҡ мөйөштә Горбачевтың үҙгәртеп ҡороу осорондағы телевизорҙың шәүләһе төҫмөрләнә. Экраны бәләкәй булһа ла төҫлө күрһәткән әйбер ҡиммәтле, затлы иҫәпләнде шул йылдарҙа. Ул ошо көндән һинең өсөн мәғлүмәт, яңылыҡтар тәҙрәһе ябылды, тип әйтергә теләгәндәй, Зәбирәһен ерләгән көн тишек-тошоғонан һаҫыҡ төтөн борхотоп, эшлектән сыҡҡайны, ремонтлатып аҙапланманы, һаман шул килеш тора урынында. Төймәле кеҫә телефоны ла бар барлыҡҡа, әммә уға аҡса һалып, аралашҡан өсөн түләп бармағанлыҡтан, әллә ҡасан тымды. Үҙең ҡуллана алмаһаң да сит шылтыратыуҙар килә тиҙәр ҙә, уның был донъяла барлығын хәтерләгән кеше ҡайҙа!

**(Дауамы бар).**

✓ *"Саҙаҡаны үҙеңдән башла", тигән бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис сәләм. Саҙаҡа кемгәләр бирелгән тиндәр йәки һумдар ғына түгел. Саҙаҡа изгелек итеү, яҡшылыҡ эшләү, һүҙ менән дә, мал менән дә ярҙам итеүҙе аңлата.*



*ЯҢЫ ПРЕМЬЕРА*

**6-7 мартта Салауат дәүләт башҡорт драма театрында күренекле шағир, прозаик, драматург, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Салауат Әбүҙәрҙең "Хазина" комедияһы буйынса спектакль премьераһы тулы аншлаг менән үтте. Спектаклдә сәхнәгә театрҙың баш режиссеры Лиана Ниғмәтуллина ҡуйған, рәссамы - Юлиә Сиражетдинова, композитор - Риф Сәлишев, хореограф - Эмиль Һөйәрғолов, "Башҡортом" йырының авторы - Револь Ғималов.**

# АЛТЫН-КӨМӨШ ХАЗИНАМЫ?



### Драмамы, әллә комедиямы?

Салауат Әбүзәр "Хазина" сәхнә әҫәрен драма итеп яҙған. Билдәле режиссер Арыҫлан Йәнбәков 2011 йылда был әҫәр буйынса спектаклде М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә ҡуйырға әҙерләгән булған, ғүмере өҙөлмәһә, ҡуйылыр ҙа ине. Драма тексы Лиана Ниғмәтуллина ҡулына осраҡлы рәүештә килеп юлыға. Әҫәр үтә етди булғанлыҡтан, уны хәҙерге көн шарттарына ярашлы ҡуйыу ҡатмарлыҡтар тыуҙырырын күҙаллап, режиссер уны комедияға әйләндерә. Шул уҡ ваҡытта ул тулыһынса комедия ла түгел, бер уҡ ваҡытта тулыһынса драма ла була алмай.

Алтын урталыҡ табыла - драмеди. Драма менән комедия синтезын театр белгестәре шулай атай. Драмеди менән трагикомедияны бутарға ярамай. Трагедияла, мәҫәлән, герой хәл иткеһеҙ тормош ситуацияһына тороп ҡала һәм ҡотолғоһоҙ һәләкәткә тарый. Яҡын кешеңдең хыянаты - ул драма, ә үлеме - трагедия. Ә драмедила хыянатты шулай тип нарыҡларға ла була: әгәр ҙә кәләшең икенсе кешегә кейәүгә сыға икән, бынан кемдең отҡанлығы билдәһеҙ әле. Трагикомедияла инде бындай һығымта яһай алмайбыҙ. Трагикомедияны күҙ йәштәре аша көлөүгә тиңләһәләр, драмедины, киреһенсә, көлөү аша илау тип тә атарға мөмкиндер. "Хазина"ны тамаша ҡылғанда спектаклдең аҙағында күптәрҙең күҙенә йәш эленеүе ошоно аңлатҡандыр тием.

### Һандыҡ ҡайҙа булды?

Айбулат ата йортонда ҡатыны Ләйсән менән көн итә. Берҙән-бер көндө ул йорт янын рәткә килтереү маҡсаты менән ерҙе ҡаҙып йөрөгәндә бер һандыҡ алтын-көмөшкә тап була. Был хәбәр йәшен тиҙлегендә бар ауылға таралып, барыһының да нәфсеһен ҡуҙғытып ебәрә. Улай ғына ла түгел, хазина барыһының да асылын күрһәтеүсе лакмусҡа әүерелә. Күҙҙәр аҡая, ҡолаҡтар ҡарпая. Шулай итеп, хазина иң беренсе нәүбәттә - лакмус ҡағыҙы.

Һәр персонаж табылған алтын-көмөшкә ҡарата үҙ планын төҙөй, бигерәк тә бында силсәүит рәйесе Тимерйән Рәшитович менән тәртип һаҡсыһы Фәнил Кәримович уғата әүҙемлек күрһәтә. Хазина - был икәү өсөн байлыҡ, властарын һаҡлау ысулы. Улар хазина хаҡында белеп ҡалып, бар белгәндәре эсеү, күңел асыуҙа булған өс ирҙең һәм Мәхмүттен, Буранбайҙың ауыҙҙарын ябыр өсөн уларҙы йылға буйына алып барып, алҡынғансы һыйлай. Тик улар иртәгәһенә баштары бахмурҙан зәңкей башлау менән һандыҡ янына йүгереп килеп етә. Сөнки хазина улар өсөн күңел асыу, бахмурҙан арыу сығанағы. Айбулаттың төрмәнән ҡайтҡан ағаһы Әхәт тә үҙенә эйәреп ҡайтҡан "бурысын" түләр өсөн хазинаны файҙаланмаҡсы. Спектаклдәге ҡатын-ҡыҙҙар ҙа табылған хазинаға ҡарата үҙенен уй-хыялын ҡора.

Финалда Аллабирҙе аҡһаҡал һандыҡ эсендәге хатты уҡып, хазинаның халыҡ азатлығы өсөн көрәшкән башҡорт ғәскәренеке икәнлеген иглан иткәс, геройҙар, хатта эсеүҙән башҡаны белмәгән өс ир ҙә, Мәхмүт тә, Буранбай ҙа, Әхәт тә был һүҙҙәрҙе ишеткән ыңғайы айныға, үҙгәреш кисерә, үҙ асылына ҡайта. Баҡтиһәң, иң ҙур хазинабыҙ халҡыбыҙ рухы, арҙаҡлы шәхестәребеҙ, үҙебеҙ икән дә!

Экранда халҡыбыҙ азатлығы өсөн йәнен фиҙа ҡылыусы арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең, батырҙарыбыҙҙың һындары ҡалҡа башлауға, спектаклдәге кире геройҙар ғына түгел, хатта тамашасылар ҙа хазина тулы һандыҡ хаҡында бөтөнләй онота. Тик силсәүит менән тәртип һаҡсыһы мәсьәләнең был рәүешле ҡуйылыуы менән риза түгел, һаман да этлектәрен ҡыла. Тамашасылар залынан эркелеп сыҡҡанда ни бары бер генә тамашасының: "Иғтибар итмәй ҡалдым, ә һандыҡ ҡайҙа булды ул?" - тигән һорауын ишеттем.

### Теге өсәү: Никулин, Вицин, Моргунов һәм Мәхмүт...

Спектаклдә өс ирҙең Леонид Гайдайҙың данлыҡлы "Теге өсәү"е: Никулин, Вицин, Моргунов стилендә сағылыш табыуы үтә лә мауыҡтырғыс, йығылып ятып көлмәле янылыҡ булды. Тап ошо өсәү режиссерға етди драманы комедияға, артабан драмедиға әйләндерергә ярҙам итә лә инде. Сәхнәлә спектакль ағышы етди генә тонда бара ла, ошо өсәү күренеү менән тамашасы көлөргә тотона, хатта етди драма ҡарап ултырғанын да онота. Етди сәхнәләр менән кәмит күренештәрҙе айырыуҙа музыкаль биҙәлеш тоны ла оҫта файҙаланыла. Күңелле музыка ағыла башлау менән тамашасы "Теге өсәү"ҙе, Мәхмүтте көтә башлай.

Режиссер спектаклгә өҫтәмә рәүештә фәҡәт актриса Рәмзиә Мәҡсүтова өсөн Мәхмүт ролен индергән. Мәхмүт "Теге өсәү"ҙең дүртенсе терәүе лә. Мәхмүт өсөнсө пландағы персонаж итеп күҙалланһа ла, актриса оҫталығы уны беренсе планға сығара. Мәжит Ғафури исемендәге башҡорт академия драма театрының данлыҡлы комигы Шамил Рәхмәтуллинды иҫкә төшөрҙө Мәхмүт. Спектакль бара, етди драмала өҫтәл артында геройҙар етди темаға әңгәмә алып бара. Ә өҫтәл аҫтында йәшенеп ултырыусы Шамил Рәхмәтуллин үҙен талаусы серәкәйҙәрҙе ҡыуалап, сәбәләнеп ултыра. Тамашасының да иғтибары, диҡҡәте өҫтәл аҫтында. Мәхмүт иһә "Теге өсәү" рәхәтләнеп тамаҡ сылатҡанда закуска өсөн тип алынған банканы аса алмай тәгәрәп ятып хитлана. Тәүҙә банканы аса, унан ҡыяр алыр өсөн ҡулын тыға, артабан ҡулын һурып ала алмай, ҡыҫҡаһы, был сәхнәне күрергә кәрәк...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Яңы премьера ана шундай, төрлө яҡлы фекерҙәр уятты күңелдә. Тәүҙә көлдөрҙө, аҙаҡ илатты. Спектаклдең Салауат дәүләт башҡорт драма театрының 90 йәшлек юбилейы йылында сәхнәгә ҡуйылыуы символик мәғәнәгә эйә: батырыбыҙ исемен йөрөткән данлыҡлы театрыбыҙ халҡыбыҙҙың, республикабыҙҙың оло хазинаһы! Театрҙың директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Айбулат Ҡотошов әлеге ваҡытта театр коллективының күренекле драматург Наил Ғәйетбайҙың "Башҡорт хан" тигән драмаһын сәхнәгә ҡуйырға әҙерләүе хаҡында хәбәр итте. Киләсәктә беҙҙе тарихи осрашыуҙар көтә!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# САҘАҠАНЫ ҮҘЕҢДӘН БАШЛА,

## йәғни ул үҙеңдән артып ҡалғанда ғына башҡаға бирелә



**Юлдан китеп барыусы бер йәйәүле сүлмәк күреп ҡала һәм уны таяғына эләктереп, ситкә ырғыта (Мосолман кешеһе юлсыға ҡамасауларҙай, зарар килтерерҙәй әйберҙе юлдан ситкә сығарып ташларға бурыслы). Сүлмәк эсендә йылан булған икән. Йылан сүлмәктән сығып йәйәүлегә ташлана.**

Йылан күҙ алдында ҙурая башлай. Сүлмәктә сағында 2-3 ҡарыштан артыҡ оҙон булмаған был йылан 5-6 ҡолас оҙонлоғона етә һәм юлсыны быуа башлай. Юлсының тын алырлыҡ та хәле ҡалмай. Ярҙам итерҙәй берәй йән эйәһе юҡмы икән тип, тирә-яғына күҙ һала. Ҡапыл йәйәүле ғәскәрҙең биш һалдаты күренә. Бәләгә тарыған йәйәүле баштан-аяҡ ҡоралланған һалдаттарға ҡысҡыра. Әммә һалдаттар уға иғтибар итмәйенсә үтеп китә.

Йылан табышын быуыуҙы дауам итә. Бәләгә тарыған кеше ҡотолоуҙан өмөтөн өҙмәй. Берәйһе килеп сыҡмаҫмы, тип тағы юлға ҡайырылып ҡарай. Унда утыҙ һалдаттан торған һыбайлы ғәскәр күренә. Бөтә көсөн йыйып, бәләгә тарыған юлсы һыбайлыларға ҡысҡыра, ярҙам итеүҙәрен үтенә. Һыбайлылар бәләгә тарыған кешене күрмәйенсә үтеп китә.

Бер аҙҙан юлда зәғиф, сибек, йолҡош ҡына бер кеше күренә. Һылтыҡлай-һылтыҡлай килә ул. "Йәйәүле ғәскәр ҙә, атлы ғәскәр ҙә ҡотҡарманы. Был меҫкен генә кешенең ярҙамы тейерме икән?" - тип икеләнә хәле мөшкөл юлсы. Шулай ҙа бүтән сараһы ҡалмағас, уға өндәшә, ярҙам итеүен үтенә.

Сибек юлсы ниндәйҙер доға уҡып, сүлмәкте юл ситенә ҡуя. Йылан яңынан бәләкәй хәленә ҡайта һәм сүлмәккә инеп юғала.

Бәләнән ҡотолған кешегә ҡотҡарыусыһы ошоларҙы һөйләй:

- Йәйәүле ғәскәрҙең биш һалдаты - биш ваҡыт намаҙың. Һин биш ваҡыт намаҙыңды уҡымағанһың. Шуға күрә теге биш һалдат һине күрмәгән дә, ишетмәгән дә, - тип аңлатҡан әүлиә. - Ә инде утыҙ һыбайлы - утыҙ көнлөк ураҙаң. Һин ураҙа тотмағанһың. Шуға улар һинә ярҙам итмәгән.

Ҡасандыр бер фәҡиргә ярты икмәкте саҙаҡа итеп биргән була юлсы. Сибек, аҡһаҡ кеше - ана шул саҙаҡа икән. Ихлас күңелдән бирелгән саҙаҡа әҙәм балаһын бәләгә тарығанда хәленән килгәнсе ҡотҡарырға тырыша.

Исламда саҙаҡаның күләме билдәләнмәгән. Сөнки саҙаҡаны һәр кем ихлас күңелдән, хәле еткән күләмдә бирә. "Саҙаҡаны үҙеңдән башла", - тигән бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис сәләм. Саҙаҡа кемгәләр бирелгән тиндәр йәки һумдар ғына түгел. Саҙаҡа изгелек итеү, яҡшылыҡ эшләү, һүҙ менән дә, мал менән дә ярҙам итеүҙе аңлата. Шуға күрә кеше иң беренсе нәүбәттә үҙен хәстәрләргә бурыслы. Үҙен хәстәрләй, үҙенең хәлен еңеләйтә, үҙенә изгелек эшләй алмаған кеше бүтәндәргә нимә менән ярҙам итә алһын инде? Саҙаҡа үҙеңдән артып ҡалғанда ғына бирелә. Үҙеңдең тамағың ас икән, ҡулыңдағы һуңғы телем икмәкте бүтәндәргә биреү аңлы эш рәтенә инмәй. Кеше иң элек үҙен тәьмин итергә бурыслы. Шунан һуң иң элек үҙеңдең яҡын кешеләреңдә ҡарарға тейешһең. Үҙең дә, яҡындарың да мохтаж түгел икән, артабан күршеләреңдә, дуҫ-иштәреңдә хәстәрләйһең. Уларҙың мохтажлығы юҡ икән, шул сағында инде сит кешеләргә - мохтаждарға, меҫкендәргә, фәҡирҙәргә ярҙам итәһең. Был мәсьәлә Исламда ҡәтғи тәртипкә һалынған һәм кешелек йәшәйешенең иң юғары ҡаҙанышын билдәләй.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Мосолмандар өсөн иң изге ай - рамаҙан айы быйыл 23 март көнө башлана. Һәммәгеҙгә иман, тән һәм йән сихәте, тоткан Ураҙаларығыҙ ҡабул булыуын теләйбеҙ!**

✓ *Ғүмер оҙайлығы менән аралашырға яратыу араһында бәйләнеш бар, ти Ҡытай белгестәре. 2002-2019 йылдарҙа 28 мең кешене тикшергәндән һуң, улар шундай фекергә килгән. Ҡатнашыусыларҙың барыһына ла яҡынса 89 йәш булған.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БАШЫҢА КЕЙ

■ Ғүмер оҙайлығы менән аралашырға яратыу араһында бәйләнеш бар, ти Ҡытай белгестәре. 2002-2019 йылдарҙа 28 мең кешене тикшергәндән һуң, улар шундай фекергә килгән. Ҡатнашыусыларҙың барыһына ла яҡынса 89 йәш булған. Уларҙың ҡайһылары йәмәғәт эшендә әүҙем ҡатнашҡан, ҡайһылары аҙнаһына, ҡайһылары айына бер тапҡыр кеше араһына сыҡҡан, өйҙә генә ултырыусылар ҙа булған. Шулай уҡ ғүмер оҙайлығына тәьҫир иткән башҡа факторҙар тураһында ла мәғлүмәт йыйылған: кешенең енесе, белем кимәле, ғаилә хәле, килеме, емеш-еләк һәм йәшелсәне күпме ашауы, ниндәй тормош алып барыуы, сәләмәтлегенең торошо асыҡланған. Һынауҙарҙың тәүге биш йылында 25406 кеше бер ниндәй ҙә йәмәғәт эше менән шөғөлләнмәгән. 1379-ы һирәкләп булһа ла, 693-ө айына бер тапҡыр, 553-ө аҙнаһына бер тапҡыр, 532-һе көн һайын тиерлек әүҙемлек күрһәткән. Тикшереү барышында 21161 кеше мәрхүм булған, уларҙың 15728-е тәүге биш йылға тура килә. Асыҡланыуынса, әүҙемлек ғүмерҙе ярайһы ғына оҙайтҡан. Көн һайын аралашып, ниндәйҙер мәсьәләләр хәл итеп йәшәүселәр 87 процентҡа үҙенең ғүмерен оҙайта.

■ Отоларинголог, юғары категориялы табип, медицина фәндәре кандидаты Владимир Зайцев билдәләүенсә, яҙ килеү менән күптәр баш кейемен киймәй башлай, һөҙөмтәлә ошо миҙгелдә танау ҡыуышлығы сирҙәре менән ауырыусылар арта. Ҡояш сағыуыраҡ яҡтыртһа ла, һауаны артыҡ йылытып өлгөрмәй, ялан баш йөрөүселәрҙең баш һөйәге, танау ҡыуышлығы өшөй. Хроник ринит бар икән, ул үҙен һиҙҙерә башлай. Ғәҙәттә, ринитты кеше дауалап та тормай, шуға ла ул яйлап риносинуситҡа әйләнә. Шулай уҡ яҙын Д витамины етешмәүе арҡаһында күптәрҙә авитаминоз башлана.

■ Мәскәү табиптары 99 йәшлек пациентҡа күреү һәләтен яңынан ҡайтарған. Был өлкән йәштәге ҡатын бер күҙенең насар күрә башлауына зарланып, табиптарға мөрәжәғәт иткән. Диагностика үткәргәндән һуң, уның ҡара катаракта менән яфаланыуы билдәле булған. Махсус ультратауышлы ҡоролма ярҙамында күҙ яҫмығын ваҡлап, яһалмаһын ҡуйғандар. Операция 15 минут дауам иткән, пациенттың күреү һәләте 0,01 проценттан 80 процентҡа тиклем кире ҡайтҡан.

■ Организмға инфекция эләккәс тә, мейе тән температураһын күтәрә, аппетит юғала, кешенең хәле булмай, танауы тона, йүткерә башлай. Мейе һәм тән реакцияһы араһындағы бәйләнештең ни сәбәпле барлыҡҡа килеүен асыҡларға тырышыуҙар быға тиклем дә булғайны. Бостондағы Гарвард медицина мәктәбе ҡомаҡтарҙың организмында киҙеү вирусы үҫешен өйрәнеп, тел аҫтында урынлашҡан нервылағы нейрондарҙың баш мейеһенә киҙеү инфекцияһы тураһында сигнал биреүен билдәләгән. Ошо уҡ нейрондар организмдың сирҙе ҡуҙғытыусыға тәьҫирен контролдә тотоусы нейрон сылбырын әүҙемләштерә икән. Был юҫыҡта төп ролде ошо нейрондар эшләп сығарған простагландиндар алып тора, был физиологик әүҙем матдәләр ауыртыу тойғоһон көсәйтеп ебәрә. Тап улар тамаҡтан мейегә бәйләнеш булдыра. Киләсәктә был нейрондарҙың ошо һәләтен киҙеүгә ҡаршы дарыуҙар яһауҙа ҡулланырға буласаҡ, ти ғалимдар.

КӨНАУАЗ

# ТӘНДЕ ЯҘЫРҒА ВАҠЫТ.

## Баҡса көтә!



(Башы 1-се биттә).

**➔ Һуңғы осорҙа, ысынлап та, халыҡ сәскә үҫтереү менән дә мауығып китте. Уларҙың ниндәй сорттарын сәсеү өсөн әле ҡулайлы мәл?**

- Бының менән килешмәйенсә булмай, элек йәшелсәнән ҡалған урынға ғына сәскә сәсеп ҡуйһалар, хәҙер махсус рәүештә баҡса тоталар был матурлыҡ өсөн. Һәр хужабикәнең, ғәҙәттә, үҙе яратҡан сәскәһе була. Шуға ла уларҙың төрҙәре буйынса кәңәш биреү ҙә ауыр. Сәскәләрҙең барыһы ла тиерлек беҙҙең климатҡа яҡшы ғына яраҡлаштырылған, шуға ла нимә сәсһәгеҙ ҙә, үҫтерә аласаҡһығыҙ. Бәрхәт гөлдәре, петуния, эшшольция, иберис, барвинок, седум, флокс, астильба, хоста, волжанкалар, лилиәләрҙең бигерәк тә азиат гибридтары менән ла-гибридтары бигерәк матур үҫә. Сәскәләр ауырый икән, уларҙы махсус препараттар менән эшкәртергә кәрәк. Мәшәҡәте күп булһа ла, георгин, гладиолустарҙы яратыусылар бар. Уларҙың бүлбеләрен һаҡлар өсөн һалҡын баҙ кәрәк.

Иң мөһиме, сәскә ултыртыр алдынан баҡсағыҙҙың бөтөн үҙенсәлектәрен иҫәпкә алығыҙ - уларҙың ҡояшта ғына үҫкәне, күләгәне яратҡаны бар. Яҙғы ташҡын ваҡытында ерҙе һыу баҫыуҙы, ҡыйыҡтан һыу тамсылап, тамырҙарын асыуын да сәскәләр үҙһенмәй. Ерҙең структураһы ла мөһим, батҡылмы ерегеҙ, әллә ҡомо күпме, ҡара ер ҡатламы аҙ булһа, ҡара тупраҡ та өҫтәргә кәрәк. Йәшелсәләр тиреҫ ярата, әммә сәскәләргә янған тиреҫ йә көл генә ярай.

Беҙҙең төбәктә көҙҙән ултыртылған һәм яҙ сәскә атҡан шафран, крокус, нарцис, гиацинт, ләләләр ҙә яҡшы үҫә. Сүп үләне кеүек, әрһеҙләшеп, күбәйеп тә китәләр. Бының бер зыяны ла юҡ, бер нәмә лә сәскә алмаған саҡта сәскә атып ҡалалар ҙа, башҡа үҫемлектәр сыға башлағас, япраҡтары һулып, йоҡоға ла талалар.

Петуния майҙа сәскә атһын тиһәгеҙ, хәҙер сәсегеҙ. Петуния, дильфиниум, ҡыңғырауҙарҙың орлоҡтары бик ваҡ, тупраҡ менән күмһәң, шытып сыҡмауы ихтимал. Шуға ла еүеш тупраҡҡа һибәһең дә, өҫтөн быяла йәки полиэтилен менән ҡаплап ҡына ҡуяһың. Һыу һипкәндә лә пульверизатор менән генә һибергә. Кемдер орлоҡто тупраҡҡа һалғас, өҫтөнән ҡар һибә, был осраҡта һыуыҡ ҡар орлоҡто уятып ебәрә, шытып сығыу энергияһы ҡеүәтлерәк буласаҡ. Иретеп, ҡар һыуын һибеү ҙә дөрөҫ, ул бик йомшаҡ. Бүлмә гөлдәре лә ярата уны.

Астралар сәсеүҙе март аҙағына ҡалдырырға мөмкин. Сөнки нығ иртә ултыртһаң, буйға китеп, һуҙыла башлайҙар. Шулай уҡ йәшәгән төбәгегеҙҙәге һауа шарттарын иҫәпкә алығыҙ, мәҫәлән, Урал аръяғы райондарында Өфө тирәһенә ҡарағанда вегетация ике аҙнаға һуңыраҡ башлана. 10 июнгә тиклем ҡырауҙар төшә икән, үҫентеләрҙе ошонан да алда ергә күсереп ултырта алмаясаҡһығыҙ. Буйға киткән үҫенте ергә күсереп ултыртҡас, ғәҙәттә, ауырый башлай. Был йәшелсәләргә лә ҡағыла. Сәскәләргә килгәндә, уларҙы үҫтереүҙең

МАТУРЛЫҠ ТЫУҘЫРЫУСЫ

# ҺЕПЕРТКЕ СӘСҺӘҢ ДӘ ҮҪӘ БЕҘҘӘ...

**Баҡса тигәндә, иң тәүҙә күҙ алдына кишер-һуған, томат-ҡыяр баҫһа ла, арабыҙҙа ошо ябай ғына файҙалы шөғөлдө юғары сәнғәт кимәленә күтәреп, иҫ киткес матурлыҡ тыуҙырыусылар ҙа күп. Мәҫәлән, Әбйәлил районы Байым ауылында йәшәүсе Элиза АБДРАХМАНОВА баҡсаһында был төбәккә хас булмаған абрикос, әстерхан сәтләүеге кеүек ағастарҙан тыш, ябай булмаған сәскәләрҙең бихисап төрҙәре үҫә.**

**➔ Июнь аҙағына тиклем ҡырауҙар төшкән, ҡышын һыуыҡтар 45 градусҡа еткән төбәктә, ғәҙәттә, алма үҫтереүе лә еңелдән түгел. Һеҙҙең йылы яҡҡа хас үҫентеләргә һөйөү ҡайҙан?**

- Һыуыҡ тип тормай беҙҙә халыҡ, баҡса эшен бик ярата, алмаһын да, башҡа еләк-емешен дә үҫтерә. Тырышһаң, әллә ниндәй уңыштарға өлгәшергә була, баҡса ялҡаулыҡты ғына яратмай. Миңә иһә, уңышына ҡарағанда, үҫеүен күҙәтеү нығыраҡ оҡшай. Нимәлер сәсәм дә, бала һымаҡ, көтә башлайым. Яҙҙы ла түҙемһеҙләнеп көтөп алам, пландар ҡорам, ағастар, үҫентеләр нисек ҡышланы икән, тип борсолам. Әле бына яңы ғына айыу баланы (жимолость) модаға инде беҙҙең яҡта. Мин уны 27 йыл үҫтерәм. Магнитогорск ҡалаһында туғандай күреп аралашҡан таныштар бар ине, уларҙан алып ҡайтып ултыртҡайным, емеше бигерәк тәмле. Улар бер-береһен һеркәләндерә, шуға ла айыу баланын бер нисә төп ултыртырға кәрәк. Хәҙер 9 сорты бар. Ә ошо ҡыуаҡтар араһында ус аяһындай ғына һандуғас ояларының күплеген белһәгеҙ! Төнөн һандуғас моңонан йоҡлай алмай ятабыҙ. Бәләкәй ҡыҙым белеп бөткән, хәҙер киске ун тулһа, һайрай башлай, ти. Ысынлап та, 5 минутҡа ла һуңламай. Майҙың 10-дары килә лә, балаларын сығарып, саҡ ҡына ҙурайтһалар, китеп тә баралар. Үҙебеҙ ҙә, күрше-тирәләр ҙә айға яҡын һандуғас моңо тыңлап кинәнәбеҙ.

Ҡарағатты ла сәсеп торам, оҡшамаһа, ҡышты сыға алмаһа, йолҡоп ырғытып торам. Былтыр әстерхан сәтләүеге сәсеп ҡараным, "Идеал" тигән сорт, быйыл уңыш бирә башларға тейеш. Абрикостарҙы 15 йыллап ашайбыҙ, уны башта һөйәктән сәсеп үҫтерҙем. Алдайҙыр ул, беҙҙә абрикос үҫмәй, тиеүселәр булды. Ышанғандар минән үҫенте алып ултыртып, хәҙер абрикос ашай. Яҙын алһыу ғына булып сәскә ата. Улар ҙа бер-береһен һеркәләндерә, бер нисә төп сәсергә кәрәк.



Былтыр персик сәстем, бер ҡышты сыҡтылар, быйыл нисек булыр. Хөрмә ултыртып ҡараным. Әле бына крыжовниктың яңы сорты килгәнен көтөп йөрөйөм, емешенең ауырлығы 5 грамм, әлегә бындайҙы күргәнем юҡ. Ғөмүмән, ҡыштар ҡаты беҙҙә, шуға ла төрлө баҡса магазиндарынан ағас үҫентеләре һатып алмағыҙ, тип кәңәш итәм. Улар башлыса Үзбәкстан, Тажикстандан килтерелгән үҫемлектәр, 18 градус һыуыҡҡа ла бирешә. Беҙ 3-4 зона һыуыҡлығына ҡарайбыҙ, шуға ла Белорет, Силәбе өлкәһе, Михайловка питомниктары ағастары иң ҡулайлыһы, саҡ ҡына ҡимməтҡә төшһә лә, аҙаҡтан ҡыуанырһығыҙ.

Минең баштан уҡ баҡсамдың дизайнын уйларға мөмкинлегем булманы, шуныһына ғына эсем бошоп китә. Картуфлыҡты хәҙер бүлдереп алып бөтөп барам, ирем дә, ҡыҙҙарым да шөғөлөмдө аңлап ҡабул итә. Атайым бигерәк мине ҡупыртып маҡтап ебәрә, сәскәләрем менән фотоға төшөргә ярата. 2 тапҡыр баҡсаны һыу баҫып, 2 тапҡыр бер нәмәһен дә ҡалдырмай ҡырып алып киткәндә лә яңынан тергеҙергә көс таптым. Баҡса эше күңелеңде бер биләп алһа, яңынан-яңы үрҙәргә дәртлән-

✓ *Әбейҙе лә күрмәйем, шул гөлгә ҡарағанмын да ҡатҡанмын. Аҫҡы яғы япраҡһыҙ булғас, унда үрмәле гөлдәр сәскән. Оҫта дизайнер тиерһең! Ошонан һуң башҡа гөлдәр минең өсөн матурлығын юғалтты.*



бер ауырлығы ла юҡ, тик һыу һибегеҙ. Ҡороаҡ төбәктә йәшәһәгеҙ, сәскә атҡансы, аҙнаһына ике тапҡыр яҡшы итеп һыу һибергә, сөнки сәскә атыуға ныҡ көс кәрәк. Сәскә атҡас иһә, һипмәһәгеҙ ҙә була, улар бынан зыян күрмәй.

**➔ Йәшелсәләрҙән тап әле генә сәсә торған төрҙәренә нимәләр инә?**

- Уңғанбикәләр татлы борос сәсә башлағандыр. Кем баклажан ултырта, шулай уҡ ваҡыты етте. Күп осраҡта был йәшелсәләрҙе беҙҙең төбәктә үҫтереүе ҡыйыныраҡ, сөнки климат һалҡыныраҡ. Йәй ҙә һуң килә, көҙ ҙә тигәндәй. Әгәр ҙә ябып, уларҙы гел генә ҡурсалап тора алаһығыҙ икән, бик яҡшы.

Томаттарға килгәндә, кемдең һәйбәт йылытылған теплицаһы бар, томатты ултырта башлаһа ла мөмкин. Кемдең теплицаһы һыуығыраҡ, тимәк, улар һуңыраҡ сығара, ә томат буйға китһә, ауырый. Томатты март аҙағына тиклем сәсергә мөмкин әле. Сорттарына килгәндә, минең Сибайҙа йәшәгән апайым, мәҫәлән, "Алсу", "Сибирская тройка" тигәндәрен яратып үҫтерә, Учалыла атайымдар "Бычье сердце", "Малиновка" тигән сорттарына өҫтөнлөк бирә. Асыҡ грунт өсөн белгестәр "Монгольский карлик", "Утенок", "Вельможа", тоҙлау өсөн "Лиза" кеүек сорттарын тәҡдим итә. Бында ла ниндәй сортты сәсеп өйрәнгәнһегеҙ, шуны сәсегеҙ, сөнки һеҙ уларҙы нисек тәрбиәләргә беләһегеҙ, ә өйрәнгән яу, билдәле, һуғышырға яҡшы. Шулай уҡ томаттың "Корнобель" тигән сортын маҡтайҙар, сөнки әллә ни һыу һибергә лә кәрәкмәй, тиҙәр. Орлоғо ҡиммәтле булһа ла, ҡарауы уңайлы.

**➔ Үҫентеләр өсөн тупраҡты һатып алыу яҡшыраҡмы, әллә көҙҙән баҡсанан ер алып ҡалыу ҙа яраймы?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, айырмаһын күрмәйем, нисек өйрәнгәнһегеҙ, шулай сәсегеҙ. Торф таблеткалары ла бар хәҙер, уның бер етешһеҙлеге - ҡиммәткә төшә. Әгәр ҙә ерҙе үҙегеҙ әҙерләһәгеҙ, ул 3 өлөштән: 1 өлөш тупраҡ, 1 өлөш ҡом, 1 өлөш янған тиҙәк йә торфтан торһон. Зарарһыҙландырыу мотлаҡ. Кемдер тупраҡҡа ҡайнар һыу һибә, кемдер алһыу итеп марганцовка иҙеп ҡоя. Беҙ лабораторияла ике ысулын да ҡулланабыҙ. Етештереүсегә ышанысығыҙ булмаһа, һатып алынған тупраҡты ла зарарһыҙландырығыҙ. Үҫемлек сәскәндән һуң улар сирләй башланы икән, "Глиокладин", "Гамаир", "Алирин" тигән биофунгицидтар алып эшкәртегеҙ. Симбиоз тигәнде ишеткәнегеҙ барҙыр, йәғни, ике организм бер-беренһенә файҙа килтерә: бактерия үҫемлектән ниндәйҙер химик матдәләр ала, үҙе үҫемлектең тәбиғи иммунитетын күтәрә, зарарлы бактерияларҙы юҡҡа сығара.

**➔ Март айында баҡсаға сығып, нимәләр эшләп өлгөрөргә кәрәк?**

- Ҡар һыуы бик шифалы тинек, теплицағыҙға ҡар тултырып ҡуйығыҙ, ул иреп, тупраҡты дым менән тулыландырасаҡ. Теплицаның иҫке тупрағын көҙҙән алып, яңыһын һалғанһығыҙҙыр, моғайын. Ҡара тупраҡ ҡатламы аҫтынан тиреҫ тә һалып ҡалдырығыҙ, уны бигерәк тә ҡыяр менән томат ярата.

Ағастарҙың ботаҡтарын да ошо мәлдә киҫәләр, әммә уның буйынса мәғлүмәт бирә алмайым. Ағастар тирәләй ҡарҙы тапап, өйөп ҡуйырға була, был көндөҙ иреп, төндә туңып торған ваҡытта тамырҙарҙы һаҡлай. Сысҡан, ҡомаҡтар нәркәс сәскәһенең еҫен яратмай, ағастар тирәләй ошо сәскәләрҙе ултыртығыҙ. Бәрхәт гөлө, бәйғәмбәр сәскәһен кәбеҫтә менән аралаштырып ултыртырға тәҡдим ителә, ҡарышлауыҡтарҙан һаҡлаясаҡ. Матур ҙа, файҙалы ла.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө ҡунағыбыҙҙың кәңәштәре менән быйылғы баҡса миҙгелен башлап ебәрҙек. Арағыҙҙа сәскә үҫтерергә яратыусылар ҙа, ғаиләһенә тик үҙе үҫтергән йәшелсә-емеш кенә ашатыусылар ҙа күп икәнен беләбеҙ. Һеҙ ҙә үҙ тәжрибәгеҙ, баҡса үҫтереү серҙәре менән уртаҡлаша алаһығыҙ, уҡыусыларыбыҙ, беҙгә хаттар яҙығыҙ, шылтыратып һөйләгеҙ.**

**Ләйсән ВӘЛИЕВА әңләмәләште.**



күнәктә - 250 литр тирәһе булғандыр - бер ҡыуаҡ үҫеп ултыра, сәскәһенең матурлығы, күк ере лә, алһыу ере лә бар, үҙҙәре кеше башындай. Әбейҙе лә күрмәйем, шул гөлгә ҡарағанмын да ҡатҡанмын. Аҫҡы яғы япраҡһыҙ булғас, унда үрмәле гөлдәр сәскән. Оҫта дизайнер тиерһең! Ошонан һуң башҡа гөлдәр минең өсөн матурлығын юғалтты. Эре япраҡлы бүлмә сорты булған ул. Хәҙер беләм, тупрағы әсе булһа, сәскәһе - күк, сөсө булһа - аҡһыл булып ата ла, ултыра торғас, йәшел төҫкә инә. Уртаса әселектәге тупраҡта алһыу була. Махсус препараттар менән ерҙең әселеген көйләргә була. Ә былай гортензия сөсө тупраҡты ятратмай, уға гел генә лимонлы һыу, эремсек һыуы һибеп торорға кәрәк.

Мин уның баҡсала үҫкәнен яратам. Араларында "Самарская лидия" тигәне иң ҡиммәтлеһе, иң матуры. Аҡһыл булып асыла ла, алһыуланып, ҡыҙарып, яйлап көрән төҫкә инә. Яҡшы ҡышлаһындар инде, тип, борсолам, һөйләшәм сығып. Шул тиклем яратам был сәскәләрҙе.

Гортензияны ҡырҡып торорға кәрәк, һабағы күп булған һайын, сәскәһе вағая. Интеретта бөтөн мәғлүмәт бар, нисек ҡырҡырға ла өйрәтелә. Эре япраҡлы сортын ҡырҡмайҙар, уның былтырғы үҫентеләре сәскә ата. Ағас кеүеге, һепертке кеүек сорттарының быйылғы үҫентеләре сәскә ата, ҡырҡһаң, яңы ботаҡтар күберәк сыға, тимәк, сәскәһе лә күберәк була. "Бесконечное лето" тигән сорты иһә былтырғы ботаҡтарҙан сәскә ата башлай ҙа, көҙгә табан быйылғы үҫентеләре сәскәләнә. Шуға ла ул йәй буйына сәскәлә - бер төптә әллә нисә төҫ.

Ауылда тиҙәк күп тиһәләр ҙә, тиҙәк менән генә булмай, махсус ашламалар ҙа ҡулланам. Аҙын азоттан башлайым, ул йәшел массаһын күбәйтә. Калий сәскә бөрөләренә көс бирә, ағастың ҡайырыһын ҡатыра, ҡышын олон өшөмәй. Гортензияларға көл ярамай, ул тупраҡты сөсөләндерә.

дереп тик тора икән. Саҡ ҡына кәйефем төшөп китһә лә, баҡсаға сығам.

**➔ Сәскәләр батшабикәһе раузаларҙы иң ҙур ғорурлығым, тигәйнегеҙ...**

- Сәскәләрҙе башлыса каталогтарҙан ҡарап, почта аша яҙҙырып алам. Раузалар миндә канада сорттары, 2-3 метр бейеклеккә үҫәләр. Ҡышҡылыҡҡа япмайым да, теймәйем дә, үҫеп тик ултыралар. Быйыл да алдырҙым, хаҡына ҡарамайым, бер көн уйлайым да, заказ бирәм дә ҡуям. Һарыһы, алһыуы, күрәне бар. Нимәгәлер заказ бирер алдынан шул төбәктең тәбиғәте, һауа торошон ҡарайым, ә Канаданың тәбиғәте беҙҙекенә оҡшаған.

Астра, цинния минең өсөн ҡыҙыҡ түгел, ә бына бәрхәт гөлөн сәсәм, ул нисектер баҡсаның үҙәген тотоп торған кеүек. Борон әбейҙәрҙең баҡсаһында бәйғәмбәр сәскәһе, космея була ине, мин дә уларҙы ятатам, бәйғәмбәр гөлөнөң быйыл ҡыҙылын алдым, космеяның да ҡатлы-ҡатлыһы бар икән. Ҡайһы берәүҙәрҙең баҡсаларында сүп үләне үҫеп ултырғанын күреп ғәжәпләнәм. Әрһеҙерәк кенә берәй сәскә төртөп ҡуйһалар ҙа булыр ине.

**➔ Гортензияны ла һүрәттән генә күрә инек, хәҙер был сәскә лә ифрат популяр булып киткән икән. Уны үҫтереүҙең ниндәй серҙәре бар?**

- Шулай тиһәгеҙ ҙә, элек уны бүлмә гөлө итеп өйҙә үҫтерҙеләр бит ул. Һаман хәтеремдә, 1-се класс тирәһендә уҡый инем шикелле: әхирәтем, әйҙә, өләсәйемә барып киләйек, тине бер саҡ. Барып инһәк, ҙур

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баҡсаһы тураһында шундай тәмләп һөйләй Элиза Ғәйәр ҡыҙы, уның менән әҙ генә аралашҡандан һуң да уның энергияһын тойоп, әллә күпме дәртләнеп йөрөйһөң. Баҡсаһын һандуғас һайрар ергә әйләндерер өсөн тырышлыҡ та, ихласлыҡ та аҙ түгелмәгәнен үҙе генә беләләр. Әммә үҙ шөғөлөн ысынлап сәнғәт өлгөһөнә әйләндергән был апайҙың, һепертке сәсһәң дә, үҫә бит ул беҙҙә, тийеүе күптәрҙең күңеленә матурлыҡ орлоҡтары һалһа ине, тигән теләктә ҡалабыҙ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

## УҢЫШ ҠАҘАН

# АҠСА ҺӘМ ҒАИЛӘ

## Алданмағыҙ!

Берәй ҡасан ҡайҙалыр аҡса һалып, уларҙың янғаны бармы? Күпме тапҡыр алдынғанығыҙ бар? Йәки алдауҙарынан ҡурҡаһығыҙмы? Улайһа, түбәндәге кәңәштәр һеҙҙең өсөн.

Һеҙгә таныш булмаған кеше шылтырата икән, ти. Шылтырата ла, миңә телефон номерын әхирәтегеҙ бирҙе, тип әйтә. Яҡын әхирәтегеҙ һеҙгә насарлыҡ теләмәй ҙә инде, шуға һөйләшеүҙе дауам итәһегеҙ. Кәңәш: бер ҡасан да бындай шылтыратыуҙарға яуап бирмәгеҙ. Телефонды алһағыҙ ҙа, шунда уҡ һөйләшеүҙе өҙөргә тырышығыҙ. Бындай "эксперттар" һеҙҙе һөйләндереп, нимәгәлер күндерер өсөн күп тырышлыҡ һаласаҡ, улар бының буйынса ҙур "белгес". Бындай һөйләшеү ысулы "һалҡын шылтыратыу" тип атала. Көтмәгәндә кемдер шылтырата ла, һүҙ ярҙамында һеҙҙе арбарға тотона. Телефон аша "ҡыҙыҡлы тәҡдим" яһаусылар менән һөйләшеп тә тормағыҙ. Йәки, адвокатым өсөн телефонығыҙҙы ҡалдырығыҙ, ул һеҙҙең менән бәйләнешкә сығыр, тип әйтегеҙ. Бынан һуң "эксперт" үҙе тиҙ генә һөйләшеүҙе өҙөр. Бер ҡасан да аҡсаға ҡағылышлы мәсьәләләрҙе телефондан хәл итмәгеҙ. Юғиһә, һеҙҙең аҡсаларға һунар башланасаҡ.

Аҡсаны һаҡлау өсөн алтын һатып алыу дөрөҫ түгел. Әлбиттә, киләсәктә кәрәк булыр тип, бер нисә алтын әйбер һатып алып, һалып ҡуйырға була, тик был бер нисек тә инвестиция тип атала алмай. Был ҡиммәтле металды яратыусылар алтын инфляциянан яҡшыраҡ һаҡланған, тип әйтер. Эйе, дөрөҫ, әммә әле уны һатып алған осорҙа был аҡылһыҙлыҡ булып күренә. Шулай ҙа "ҡара көн"гә тип берәй биҙәүес йәки берәй слиток һатып алырға мөмкин, тик уны аҙаҡтан һатып, аҡса эшләй алмаясаҡһығыҙ.

Алдаҡсылар шулай уҡ сикле ваҡыт билдәләп тә, һеҙҙе тишек шоманға ултыртыуы бар. Акция бөгөн тамамлана, алып ҡалығыҙ, тигән саҡырыуҙы рекламала ла әүҙем ҡулланалар. Яҡшылап уйлар өсөн ваҡыт кәрәк, ә һеҙгә бының өсөн ваҡыт ҡалдырмаҫҡа тырышалар. Баҫымға бирешмәгеҙ, аҡсаны юҡҡа тотонғансы, бындай мөмкинлекте юғалтыу хәйерлерәк.

Алдаҡсыларҙың тағы бер тоғро "дуҫы" бар, ул ҡурҡыу. Аҡса эшендә ҡурҡыу насар кәңәшсе. Һеҙҙең ҡарарығыҙға хис-тойғоларығыҙ ҡамасауларға тейеш түгел. Үҙ килемегеҙҙе яйлап ҡына йыя башлаһағыҙ, киләсәктән ҡурҡыу тойғоһо һеҙҙә булмаҫҡа тейеш. Финанс продукттарына килгәндә, бер ниндәй фирма ла иң яҡшы һәм иң файҙалы тәҡдимде бер юлы бирә алмай. Һәр фирманан иң яҡшыһын алығыҙ, аҡсағыҙ янығыҙҙа ҡалыр.

Бер ҡасан да аҡса уйындарында ҡатнашмағыҙ. Хатта математик ҡараштан да бындай системалар ҡасан да булһа янасаҡ, сөнки яңы уйынсылар сикһеҙ күбәйеп китәсәк. Бындай аҡса уйындарын ойоштороусылар ҙа яҡшы "мәктәп" үткән һәм көслө дәлилдәр менән эш итә. Һеҙ саҡырылған тамаша ла бик оҫта уйналасаҡ, унда аҫтыртын хәйлә, психологик тәьҫир мотлаҡ ҡулланыласаҡ.

Бер тапҡыр алданған кешене тағы ла алдап була - бынының ла ҡанун. Шуға ла ҡабат бындай шикле фирмаларға аяҡ баҫмағыҙ. Һәм аҙаҡҡыһы, аҡса темаһына еңел ҡарамағыҙ. Ҡыйыуыраҡ булығыҙ, тормош - ул сәйәхәт. Әгәр ҙә мөмкинлектәрен тапһағыҙ, ул һеҙҙе хыяллана ла алмаған ерҙәргә илтәсәк. Мин һеҙгә ошо сәйәхәтегеҙ өсөн аҡса эшләй алыуығыҙҙы теләйем.

**Бодо ШЕФЕР. (Аҙағы).**



## 20 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.30 "Играй, гармонь!" Концерт в Кремле. [12+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.45, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Раневская". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.55 Премьера. "На футболе с Денисом Казанским". [18+]
0.25, 1.05, 1.45, 2.20, 3.05, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Акушерка. Новые серии". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз).**
**14.45, 16.00, 16.45 Интервью. [12+]**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Д/ф "Доброволец". [16+]**
**23.30 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 Спектакль "Девушка с монистами". [12+]**
**2.15 Д/ф "К Всемирному дню поэзии. Ночь вдохновения". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Следопыт. [12+]**

## 21 МАРТА ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Раневская". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.55, 0.35, 1.15, 1.55, 2.35, 3.05, 3.20, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Акушерка. Новые серии". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45 Надо знать. [12+]**
**11.00, 16.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**17.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Елкән. [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**23.30 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 Спектакль "Зятек". [12+]**
**3.00 История одного села. [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**

## 22 МАРТА СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Раневская". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.55, 0.35, 1.15, 1.55, 2.35, 3.05, 3.20, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Акушерка. Новые серии". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**10.30, 17.45, 3.00 История одного села. [12+]**
**10.45 Әлләсе… [6+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [12+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 МузКәрәҙ. [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 Спектакль "Мою жену зовут Морис". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 23 МАРТА ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Раневская". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.55, 0.35, 1.15, 1.55, 2.35, 3.05, 3.20, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Акушерка. Новые серии". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**10.45 Надо знать. [12+]**
**11.00 Автограф. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Сулпылар. [0+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Формула меда. [12+]**
**17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.15 Спектакль "Кодаса или Полснохи меньшему брату". [12+]**
**3.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**

## 24 МАРТА ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "ГОЛОС" весны в обновленном составе. [12+]
23.30 Х/ф Премьера. "Лучшее впереди". [16+]
1.40, 2.20, 3.05, 3.40, 4.15, 4.50, 5.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Моя Мелодия. [12+]
23.45 Улыбка на ночь. [16+]
0.50 Х/ф "Храни тебя любовь моя". [12+]
4.10 Т/с "Пыльная работа". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**10.30, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 22.00, 6.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Слово Земли. 2.0. [12+]**
**12.45, 5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.15 Ҡурай даны. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 5.30 Автограф. [12+]**
**14.15, 19.45 История одного села. [12+]**
**15.00 "АйТекә!" [6+]**
**15.15 "КультУра". [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Финликбез. [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**19.00, 3.00 Честно говоря. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Бизнес-обзор. [12+]**
**20.45 "Башҡорт йыры". [12+]**
**23.00, 3.45 "Ете егет". [12+]**
**23.45 Спектакль "Караул". [12+]**
**2.15 Алтын тирмә. [0+]**
**4.30 Бай. [12+]**

## 25 МАРТА СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "ПроУют". [0+]
11.10 Премьера. "Поехали!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Т/с "По законам военного времени-2". [12+]
17.25, 18.20 Д/ф "Михаил Задорнов. От первого лица". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.50 Х/ф "Гнездо". [18+]
1.50, 2.30, 3.05, 3.40, 4.15, 4.50, 5.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.05 Х/ф "Паром для двоих". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Время надежды". [12+]
0.35 Х/ф "Синее озеро". [12+]
4.15 Х/ф "Любовь и Роман". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 Это моя профессия. [12+]**
**9.00 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 Елкән. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 МузКәрәҙ. [0+]**
**11.30 Башкирская открытая Юниор-лига КВН РБ. [12+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**17.45 Х/ф "53". [12+]**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет.[6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Концерт заслуженной артистки БАССР, народной артистки РБ Розы Аккучуковой. [12+]**
**2.15 "Весело живем". [12+]**
**4.00 Д/ф "СВОи". [16+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

## 26 МАРТА ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 23.45, 0.25, 1.05, 1.45, 2.20, 2.55, 3.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 "Жизнь других". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.00 Д/ф "Кто из вас без греха?" К 85-летию Алексея Петренко. [12+]
15.05 Д/с "Век СССР". [16+]
17.00 Д/ф Премьера. "Штурмовики". Специальный репортаж. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
22.35 "Что? Где? Когда?" Весенняя серия игр. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.10 Х/ф "Счастливый маршрут". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 16.00 Вести.
11.30 Большие перемены.
12.15 Х/ф "Тот мужчина, та женщина". [12+]
16.30, 19.00 Песни от всей души. [12+]
17.30 Синяя Птица и друзья. Специальный выпуск. Посвящается мамам и бабушкам.
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Не хлебом единым". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [12+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.30 "Дорога к храму". [0+]**
**16.00, 4.30 Историческая среда. [12+]**
**16.30 "Честно говоря". [12+]**
**17.15 Концерт заслуженного артиста РБ Рушана Биктимирова. [12+]**
**19.00, 3.45 Әлләсе… [6+]**
**19.45 Патриот РФ. [12+]**
**20.00, 2.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**20.30 Полезные новости. [12+]**
**20.45, 2.30 Спортивная история. [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 1.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 "Морозное дыхание метели". [12+]**
**1.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**3.00 Честно говоря. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Март (Шағбан - Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (28) дүшәмбе | - | 5:51 | 7:21 | 13:30 | 17:44 | 19:26 | 20:56 |
| 21 (29) шишәмбе | - | 5:48 | 7:18 | 13:30 | 17:45 | 19:28 | 20:58 |
| 22 (30) шаршамбы | - | 5:46 | 7:16 | 13:30 | 17:46 | 19:30 | 21:00 |
| 23 (1) кесе йома | 5:13 | 5:43 | 7:13 | 13:30 | 17:48 | 19:32 | 21:02 |
| 24 (2) йома | 5:11 | 5:41 | 7:11 | 13:30 | 17:49 | 19:34 | 21:04 |
| 25 (3) шәмбе | 5:08 | 5:38 | 7:08 | 13:30 | 17:51 | 19:36 | 21:06 |
| 26 (4) йәкшәмбе | 5:06 | 5:36 | 7:06 | 13:30 | 17:52 | 19:38 | 21:08 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 21 МАРТ - БӨТӘ ДОНЪЯ ШИҒРИӘТ КӨНӨ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**9-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ураҡсин. Сатыр. Ҡарымта. Ҡура. Хазина. Өлпә. Юрға. Нух. Анкара. Шәрек. Тауыҡ. Ҡойроҡ. Мәжүси. Балаһын. Маяҡ. Ирен. Дүрт. Рейн. Һауа. Твен.

**Вертикаль буйынса:** Өләшеүсе. Ҡаптырма. Ҡамыл. Ҡапсыҡ. Аждаһа. Таж. Австралия. Нитрат. Муйын. Ит. Нур. Юха. Ҡатынынан. Көйшәм. Ихата. Аҫаба. Ҡыяҡ.

КӘҢӘШЕМ...



# УРАҘАҒА ӘҘЕРЛӘНӘБЕҘ

● Аллаһы Тәғәләгә тәүәккәлләнеп, ниәттәрҙе теүәлләгәндән һуң, алдан уҡ дөрөҫ туҡланыу саралары күрелә. Иң беренсе милли, ябай аҙыҡтар ҡулланыуҙы күҙ уңында тотам. Ит ризыҡтарын кәметеү ҙә күҙ уңынан ысҡындырылмай, сөнки итте эшкәртеү өсөн организм күп көс сарыф ителеүен беләбеҙ.

● Иң тәүҙә баҙарға сығып, төрлө сәтләүек, киптерелгән емеш-еләк һатып алып, интернеттағы рецепт буйынса шуларҙы итбурғостан үткәреп, балға ҡушып, 3 айлыҡ запас эшләп ҡуйҙым. Иртәнге сәхәр ваҡытында бер ҡалаҡ туҡлыҡлы шул масса менән сәй эсәм. Арпа ярмаһынан үҙебеҙ әҙерләгән талҡандан баллы-майлы йомарлаҡтар әҙерләп, һыуыҡтыҡта тотам. Иртән ризыҡланғанда икмәк урынына шул бер йомарлаҡты ашайым. Һыйыр майынан тап-таҙа ғына һары май иретеп ҡуйҙым. Көнөнә бер ҡалаҡ шул майҙы ла ашарға тырышам, сөнки эсәк буйҙарындағы ташҡа әйләнеп ҡатҡан ҡалдыҡтарҙы йомшартыу менән бергә, ул эс ҡатыуҙан бер сара булып тора.

● Сәхәр алдынан да, ифтар алдынан да, эске таҙарыныу маҡсатынан, бер балғалаҡ әнис майы йотоп ебәрәм һәм бер стакан баллы йылымыс һыу эсәм. Унан ҡалһа, көҙҙән әҙерләп ҡалдырылған мышар, балан кеүек Аллаһы Тәғәләнең беҙгә инсеэлгән тыуған ерҙә үҫкән еләк-емештәребеҙ бар ҙа баһа! Юғиһә, сит илдән әллә кемдәр, әллә ниндәй ниәттәр менән йыйып беҙгә оҙатҡан, банан-манан, әфлисун-мәфлисун һ.б. "аҡса емештәре" менән мауығып китмәйек, тим.

● Төрлө бутҡаларҙы бешергәндә, ваҡлап турап ҡышҡылыҡҡа һыуытҡыста туңдырған ашҡабаҡ, йә булмаһа, кәбеҫтә, кишер ваҡлап ҡушып ебәрәм. Еңел үҙләштерелә һәм шулай уҡ туҡлыҡлы һәм тәмле була бындай бутҡалар.

Әлбиттә, ураҙа тотоу һәр кемдең Аллаһы Тәғәлә алдында ғына яуап бирә торған йәшерен бурысы һәм ғәмәле, уны бар ғәмгә фаш итеү рыялыҡ һанала. Ләкин был ихласлығыбыҙ ураҙа тоторға ҡыймай ҡуркып йөрөүселәргә, ураҙала булып та, ниндәйҙер уңайһыҙлыҡ кисергән милләттәштәремә кәңәш биреү маҡсатынан ғына уртаҡлашам.

Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**22 март** "Сулпан" балалар театры **"Илһөйәр әлифбаһы"** шиғри-музыкаль мелодрама менән гастролдә. 12.00 6+

**24 март "Алтын асҡыс - Remake"** (А. Толстой), музыкаль мажара. 12.00 6+

**"Внутри меня цунами"** истории подростков. 14.00 12+

**25 март "Һауанан ергә тиклем"** (А. Саҙрыев), бэби-спектакль. 12.00 6+

**"Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23 март "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), тамаша. 12+

**24 март "У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн спектакль. 11.00 6+

**"Хужа Насретдин мажаралары"** (Л. Соловьев, В. Виткович), трагикомедия. 12+

**26 март "Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәким), комедия. 18.00 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*

**26 март "Три поросенка"** (Д. Гараева). 12.00, 14.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**22 март "Науруз. Дуҫлыҡ күпере".** 6+

**24 март Хәлит Фәтиховтың** юбилей кисәһе. 6+

**26 март "Музыка струн"** ғаилә өсөн концерт. 15.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**20 март Премьера! "Футлярҙағы кеше. Мөхәббәт тураһында"** (А.П. Чехов), иллюстрациялы хикәйәләр. 13.00 12+

**21 март "Көтмәгәндә булған хәл"** (Э. Йәһүҙин), комедия. 16+

**23 март** М. Ғафури ис. БАДТ сәхнәһендә **"Һиныҡай менән Юлдыҡай"** (Х. Ғәбитов, Г. Саламатова инсц.), шиғри драма. 12+

**25 март "Сказка о рыбаке и рыбке"** (А. С. Пушкин, Л.Н. Ниғмәтуллина инсц.), әкиәт. 13.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**21 март "Я - русский композитор"** С. Рахманиновтың 150 йыллығына. 6+

**23 март "Моңдар тулы күңелем, дуҫтар тулы ғүмерем"** З. Әүбәкирова концерты. 6+

**24 март** Өфө "Нур" ТДТ сәхнәһендә **"Аҡ ҡалфаҡ"** (М. Фәйзи), драма. 12+

**26 март "Три богатыря и Соловей-разбойник"** (А. Зарипов), әкиәт. 12.00 0+

**"Ҡатын түгел - аждаһа!"** (Д. Салихов), комедия. 18.00 16+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**20 март** М. Ғафури ис. БАДТ сәхнәһендә **"Әлимә, йәки Мырҙаш ҡарт туйы"** (Д. Юлтый, З. Бураҡаева инсц.), драма. 12+

**"Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драмаһы менән **23 март** - Маҡан, **24 март** - Гусев ауылдарында гастролдәр. 16+

**"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Буләков), лирик комедияһы менән **23 март** - Кәрешкә, **24 март** - Күсей ауылдарында гастролдәр. 12+

## БР Милли музейы

**21 март "Күңелем шиғриәте"** әҙәби сара. 11.00 6+

**22 март "Веселые ручейки"** балалар сараһы. 14.00 6+

**25 март "Асыҡ ишектәр көнө".** 6+

*АФАРИН!*

# БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ

## өлгө күрһәтә

**Стәрлетамаҡ ҡалаһында "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" республика конкурсының финал этабы һәм еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы үтте. Конкурс "Етегән" республика байрамы сиктәрендә ойошторолдо. Сара ғаилә институты абруйын нығытыуға, халыҡты республиканың мәҙәни киңлегенә әүҙем йәлеп итеүгә, әхлаҡи-эстетик нигеҙ булдырыуға, башҡорт фольклорын һаҡлау һәм үҫтереүгә, ғаилә ҡиммәттәрен популярлаштырыуға йүнәлтелгән. Бәйге 2021 йылдан алып уҙғарыла, ойоштороусылары - Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Халыҡтар дуҫлығы йорто, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы.**




Бәйге күптән инде республика сиктәренән сығып, төбәк-ара сараға әүерелде. Мәҫәлән, быйыл Рәсәйҙең ун субъектынан 13 ғаилә ҡатнашты. Жюри ағзалары лауреаттарҙы "Ғаилә ҡиммәттәре", "Ғаилә кәсебе", "Ғаилә ижады" номинацияларында билдәләне. Бәйгенең жюри рәйесе, "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" конкурсының жюри рәйесе, Бөтөн донъя башҡорттары Президиумы ағзаһы Сәлиә Мырҙабаева сараның әһәмиәтен билдәләп, шулай тине:

- Быйыл бәйгелә ҡатнашырға йөҙҙән ашыу ғаилә теләк белдерҙе, зона этабына 27 ғаилә сыҡты, улар араһынан тиҫтәнән ашыу ғаилә финалға үтте. Ҡатнашыусыларҙы беҙ маҡсатлы, уңған, балаларын һәр яҡтан үҫешкән шәхестәр итеп тәрбиәләү өсөн бар көсөн һалған, мәҙәниәтле, туған телде, тарихты белгән рухлы кешеләр итеп күрәбеҙ, уларҙы ошо талаптарға ярашлы һайлайбыҙ. Унан, бәйгелә ҡатнашҡан һәр ғаиләнең башҡаларға өлгө булырлыҡ дәртдарманлы, сағыу булыуы фарыз. Һәр ғаиләнең үҙ тарихы, йолалары, кәсебе булһа, милли ғөрөф-ғәҙәттәр һаҡланһа, Башҡортостандың киләсәге ныҡ буласаҡ.

Шулай итеп, "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" республика бүлегендә гран-призы Стәрлебаш районынан Тойғоновтар яуланы. Ғаилә башлығы Урал Мансур улы "Салауатгаз" ойошмаһының Стәрлебаш бүлегендә диспетчер булып эшләй. Әлфиә Риф ҡыҙы - Стәрлебаш районы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге начальнигы, районды бөтә сараларыһын уртаһында ҡайнай. Тойғоновтар Ерҙәң ҡояшлы ягында йәшәй, улар сәнғәткә ғашиҡ ғаилә - хатта "Тойғон" исемле ғаилә ансамблдәре лә бар. Был татыу, ижади, йырлы-моңло ғаиләлә Тимур, Таһир һәм Дамир исемле өс малай үҫә. Сәнғәт менән спорт - уларҙың яратҡан шөғөлдәре. Төрлө конкурстарҙа еңеүҙәр яулайҙар, бер бәйгелә лә һынатмайҙар.

"Ғаилә ижады" номинацияһында беренсе урынға Нефтекама ҡалаһынан Ғимаҙиевтар сыҡты, икенселә - Өфөнән Вәлиевтар, өсөнсөлә - Сибайҙан Байғужиндар.

"Ғаилә кәсебе" номинацияһында еңеүселәр түбәндәгеләр: I урында - Асҡын районынан Ғайсиндар; II урында - Күгәрсен районынан Ишмөхәмәтовтар, III урында - Межгорье ҡалаһынан Хәйруллиндар.

"Ғаилә ҡиммәттәре" номинацияһында иһә алдынғылыҡты Нефтекама ҡалаһынан Ғилемхановтар бирмәне, икенселә һәм өсөнсөлә - Көйөргәҙе районынан Рахманғоловтар һәм Ғафури районынан Күскилдиндар.

Махсус номинацияларҙа, мәҫәлән, "Һәләтле ғаилә" тип Сибайҙан Ғәйетбаевтар, "Мираҫлы ғаилә" тип Стәрлетамаҡтан Мансуровтар, "Рухлы ғаилә" тип Татарсан Республикаһының Түбәнге Кама ҡалаһынан Кирәевтар, "Күп балалы ғаилә" номинацияһында Иглин районынан Нуриевтар билдәләнде.

**Гүзәлиә БАЛТАБАЕВА.**

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҒЫ*

# ТӘЖРИБӘ УРТАҠЛАШЫУ МАЙҘАНЫ

**Ошо көндәрҙә Өфөлә "АРТ-Ҡоролтай" мәҙәни форумы уҙғарылды. Өсөнсө тапҡыр үткәрелгән сара мәҙәниәт, һөнәри үҫеш өлкәһендә эш һәм ижади тәжрибәләр уртаҡлашыу йәһәтенән уңайлы майҙан булып тора.**

Быйыл "АРТ-Ҡоролтай" Педагог һәм остаз йылына арналды, унда тәрбиә һәм белем биреү, мәҙәниәт өлкәһендә ирекмәндәр хәрәкәте, инклюзив практикалары мәсьәләләре күтәрелде. Форум сиктәрендә төбәктә мәҙәниәт өлкәһендә күҙәтелгән үҫеш һәм ҡаҙаныштарҙы, Рәсәй буйынса өр-яңы үҫеш юлдарын сағылдырған төрлө тематик һәм интерактив секциялар ойошторолдо. Шулар араһында иң мөһимдәренең береһе китапханаларҙың беренсе республика форумы булды. Унда ҡатнашыусыларҙы Рәсәй дәүләт китапханаһының генераль директоры Вадим Дуда видеобәйләнеш аша сәләмләне.

Рәсәй дәүләт балалар китапханаһы директоры урынбаҫары Ольга Мезенцева мәктәп йәшендәге балаларға рухи-әхлаҡи тәрбиә биреүгә йүнәлтелгән Бөтә Рәсәй "#ЗнайЧитай" балалар һәм үҫмерҙәр уҡыуҙары лабораторияһы проектын күрһәтте. Былтыр көҙ был проектҡа Владимир һәм Тула өлкәһе китапханалары ҡушылған, быйыл илдең тағы ла дүрт төбәк балалар китапханалары эш башлаясаҡ. "Беҙ Балаҡатай, Ишембай район китапханалары нигеҙендә "#ЗнайЧитай" балалар һәм үҫмерҙәр уҡыуҙары лабораторияһын булдырыу буйынса Рәсәй дәүләт балалар китапханаһына методик ярҙам күрһәтеүҙәрен үтенеп мөрәжәғәт иттек. Уйын, йыр, бейеү, уйын ҡоралдары менән танышыу, шәхестәр менән осрашыуҙар балаларҙы китап уҡыуға йәлеп итә, - ти Ә.З. Вәлиди исемендәге БР Милли китапхана директоры вазифаһын башҡарыусы Азат Ибраһимов.

Шулай уҡ "АРТ-Ҡоролтай" сиктәрендә Республика халыҡ ижады үҙәгенең "Күнел күҙе" халыҡ инклюзив театрының балалар төркөмө Михаил Бартенев әкиәте буйынса "Я считаю до пяти" спектаклен сәхнәләштерҙе. Унда Өфө ҡалаһының 132-се, 103-сө мәктәптәре, Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернаты уҡыусылары уйнаны. Ойоштороусылар әйтеүенсә, спектаклдән алынған килем "Күнел күҙе"нең балалар коллективын үҫтереүгә йүнәлтеләсәк.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ӘҘӘМДЕҢ КҮҢЕЛЕ МЕНӘН...

## теле бер булһын ул

Белеклегә бер әйтһән дә ҡолағының эсендә; белекһеҙгә йөҙ әйтһән дә ҡолағының тышында.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәлә).**

Бөтөн кешелек аҡылы ике һүҙгә һыя: көтөү һәм өмөт итеү.

**(Александр Дюма).**

Был хеҙмәтемде мин Леонор исемле ҡыҙыма бағышлайым. Уның ярҙамы, дәртләндереүҙәре булмаһа, китабымды ике тапҡырға тиҙерәк яҙып бөтөр инем.

**(Пелем Вудхауз).**

Көсһөҙ бер ҡасан да ғәфү итмәй. Ғәфү итеү тик көслөләргә генә хас.

**(Махатма Ганди).**

Үҙенде бәхетле булған кеүек тот һәм ысынлап та, бәхетлерәк булып китерһең.

**(Дейл Карнеги).**

Барлыҡ никахтар ҙа күңелһеҙ тамамлана, тип уйлаусыларҙы мин аңламайым. Миңә ҡалһа, биш никахымдың барыһы ла уңышлы булды.

**(Питер де Врайз).**

Был ресторан гел тулы булғанға унда бер кем йөрөмәй.

**(Йоги Берра).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Балаларың бәхетенә ҡыуанайым тиһәң, уларға ҡарашыңды үҙгәрт, ти бер аҡыллы кеше. Бына бер ғибрәтле миҫал.**

**Бер әбейҙең ике ҡыҙы булған. Береһе ҡулсатыр һатыусыға сыҡҡан, икенсеһе - туҡмас менән сауҙа итеүсегә.**

**Алыусы булмаҫ инде, тип, көн аяҙыһа, ҡулсатыр һатҡан, ямғыр яуһа, туҡмас ҡырҡҡан ҡыҙҙары өсөн илаған әсә. Шулай итеп, көн һайын әсе күҙ йәшен түккән ти ул.**

**Көндәрҙән бер көндө ул аҡыл эйәһенә мөрәжәғәт иткән. Аҡһаҡал йылмайған да:**

**- Һин һауа торошон үҙгәртә алмаясаҡһың. Уның ҡарауы, уй-фекерең менән идара итә алаһың. Көн ҡояшлы, матур икән - кесе ҡыҙың өсөн ҡыуан: ҡамырын баҫып, йәйеп, киптереп, киҫеп һатыр. Ямғыр яуһа, олоһо өсөн һөйөн: ҡулсатырын алыусы күбәйер тип, - тигән.**

**Аҡыл эйәһенең кәңәшен тотҡан әбей: ниндәй генә көн булмаһын, шатланған ғына. Һәр ваҡыт ҡайғырған әсәләрен нисек тынысландырырға белмәгән ҡыҙҙары өсөн дә был ҡыуаныс булған.**

**Һабаҡ шунда: әгәр хәл-ваҡиғаны үҙгәртә алмайһың икән, уға ҡарашыңды үҙгәрт. Шул сағында проблемаң да юҡҡа сығыр..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 23010

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
17 март 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы –
**ПР905**

Тиражы - 3267
Заказ - 346